ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

17-23 февраль (шаҡай) 2018

№7 (789)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Үҙ эшенең оҫталары...**

һәр ерҙә кәрәк



6

**Генерал Шайморатов һәм...**

башҡорт атлылары тураһында хәҡиҡәти һүҙ



7

**Халыҡ ижадын...**

өйрәнеүсе һәм яратыусы ғына мин



8-9

**Күҙҙәрҙә...**

бәхет нуры сағылһын



12

**ТВ-программа** 14


***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 1 февралдән 31 мартҡа тиклем 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн ваҡытынан алда элекке хаҡтар менән яҙылыу иғлан ителде. Йәғни һеҙ ошо ваҡыт эсендә 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 554 һум 82 тингә яҙыла һәм квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреп, Рәми Ғариповтың "Сыңрау торна", Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре", Йәүҙәт Бәшировтың "Башҡорт хан", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры" һәм башҡа китаптарға эйә була алаһығыҙ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!***

АФАРИН!

# БАТЫРҒА - АВТОМОБИЛЬ!

**Үткән аҙнала баш ҡаланың "Динамо" стадионында Милли көрәш буйынса Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы кубогына традицион асыҡ турнирҙың финалы үтте. Унда республиканың район-ҡалаларынан 70-тән ашыу батыр төп приз - автомобиль өсөн көс һынашты. Төп еңеүсе тип Айгиз Зәйнетдинов танылды.**



*Эдуард Дилмөхәмәтов фотоһы.*

Сарала ҡатнашыусыларҙы, ҡунаҡтарҙы, спорт һөйөүселәрҙе муниципалитет башлығы Ирек Ялалов тәбрикләне.

- Милли көрәш - быуаттар буйына тупланған традициялары булған айырым спорт төрө. Турнир ойоштороғанда беҙ халыҡ йолаларын һаҡлау һәм милли көрәште тағы ла популярлаштырыуҙы төп маҡсат итеп ҡуйҙыҡ, - тине Ирек Ишмөхәмәт улы. Унын билдәләүенсә, баш ҡалала был спорт төрөнә иғтибар һәр саҡ юғары булды. Өфө үҙенең оҫталығын күрһәткән, юғары еңеүҙәргә өлгәшкән, көрәш үҫешенә өлөш индергән һәләтле башҡорт батырҙары менән ғорурлана. Ҡала башлығы 2018 йыл турнирының да көрәш йылъяҙмаһында әһәмиәтле, сәләмәт һәм әүҙем тормош рәүеше ҡиммәттәрен популярлаштырыуға ярҙам иткән тағы ла бер бит яҙылырына ышаныс белдерҙе.

Финал алыштары 60 - 90 килограмм ауырлыҡ категорияларында иң таһылдарҙы асыҡланы. Улар - Алмаз Еникеев, Артур Зөлҡәрнәев, Альберт Рәхмәтуллин, Айгиз Зәйнетдинов, Рәдиф Аҡсурин. Еңеүселәргә миҙалдарҙы һәм бүләктәрҙе Рәсәйҙең Көрәш Федерацияһы вице-президенты Раил Ноғоманов (Мәскәү ҡалаһы), спорт ветераны, көрәш буйынса РСФСР-ҙың спорт мастеры Фәнис Уразбахтин, "Госстрой" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең директорҙар советы рәйесе Кирилл Бадиков, композитор Рим Хәсәнов һ.б. тапшырҙы. Төп приз эйәһе чемпиондар араһында лототронда асыҡланды.

Спорт байрамын күп музыка ҡоралдарында уйнаусы, республика, Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара конкурстар еңеүсеһе Заһир Зәйнетдин, халыҡ-ара конкурстар лауреаты Диана Ишниязова, республиканың атҡаҙанған артистары Венер Камалов, Фирүзә Париж, "Гүзәл-данс" бейеү ансамбле сығыштары биҙәне.

**Наилә ЗАҺИТОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Изгелекте уйлап-нитеп тормаҫтан, күңел талабы кушканса йыш эшләйһегеҙме?

***Даян МӨХӘМӘТДИНОВ, эшҡыуар:*** Иғтибарлыраҡ, нескә күңелле кешеләргә изгелекте аҙым һайын эшләргә тура киләлер ул, тип уйлайым, сөнки йәмәғәт транспортында ҡайҙалыр китеп барһаң, өлкәндәр йә ҡатын-ҡыҙ баҫып барғанда, йәйелеп ултыра алмайһың бит инде, тиҙерәк һикереп тора һалаһың, янында башҡалар баҫып килгәндә, ултырыуы яҙыҡ, килешмәгән ҡылыҡ тойола. Киреһенсә, үҙенән башҡаны белмәгән-күрмәгән кешеләр ҙә бар, ундай ир-егет уйлап та бирмәй ултырып барыуын дауам итә, сөнки изгелек эшләү ғәҙәте унын ҡанында юҡ самаһындалыр, күрәһең. Шул уҡ транспорттан төшкәндә лә ҡарттарға ярҙам итеү өсөн ҡулдар үҙенән-үҙе һуҙыла, әҙер генә тораһың бит инде. Ә юл аша сыҡҡанда? Уныһы ла ҙур сауаплы бер ғәмәл, ләкин берәй әбекәйҙе юл аша сығарғанда һин ул турала уйламайһың да. Ундай бәләкәй генә изгелектәр (ҙурҙары ла, әлбиттә!) үҙенән-үҙе, күнегелгәнсә эшләнә. Иртән тороп, битенде йыуған кеүек үк. Мәҫәлән, бала-саға, ҡатын-ҡыҙ, өлкәндәргә, ғәриптәргә ишек асып индереү әллә ни изгелек тә иҫәпләнмәйҙер, тик ана шул ғәмәлде башҡарғанда ҡыуанып, рәхмәт әйтеүҙәрен ишетеү күңелгә бик тә рәхәт була.

Изгелек ҡулы һуҙырға әҙер тороу балаға ата-әсәнән дә биреләлер ул. Атайым шулай әҙәм балаларына кеселекле, изгелекле булды ғүмер баҡый. Ат һорап килгәндәргә арбаһы-ниһе менән егеп үк биреп ебәрер ине. Беҙҙән дә шуны талап итте. Ветеринар булып эшләне ул. Ауыл халҡы шуға ла үтенестәр менән беҙҙең тупһаны йыш тапаны. Хатта хаҡлы ялға сығып, урынына икенсе кеше эшләп йөрөһә лә күҙ терәп атайыма килделәр: тәүлектең теләһә ҡайһы сәғәтендә лә изгелек эшләүҙән туҡтаманы. Хоҡуҡи мәсьәләләр буйынса ла кәңәш-төңәшкә күп килделәр. Был йәһәттән дә күптәргә ярҙамы тейҙе, йәне йәннәттә булһын! Атай йортона ауылға ҡайтһаҡ, балаларыма ҡартатай менән ҡартәсәйҙәре хаҡында гел һөйләйем. Ошо һөйләүҙәр ҙә, үҙебеҙҙең өлгө лә йоғонтоһоҙ ҡалмайҙыр: балаларҙың ярҙамсыл, итәғәтле булып үҫеп килгәндәре өсөн һөйөнәм.

(Дауамы 2-се биттә).

12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БЫЛ СЕР...

## рухлыларға ғына сиселә

***Юлай ҒӘЙНЕТДИНОВ, Башҡортостандың халыҡ артисы, ҡурайсы:*** Заманалар бер ҡасан еңел булмаған. Башҡорт халҡы быуаттар буйы үҙ илен, азатлығын яҡлап, һаҡлап, яуға күтәрелгән һәм үҙенең тарихына данлы юлдар яҙған. Беҙҙең тарих йырҙарыбыҙҙа, ҡурай моңонда сағыла. Тарихы булмаған көйөбөҙ, йырыбыҙ юҡ. Оҙон көйҙәр менән халыҡ үҙ булмышын, тарихын һаҡлаған. Шуға ла улар милли эпос, халыҡтың музыкаль поэтик классикаһы тип атала. Халҡыбыҙҙың рухи булмышы ла ошо оҙон көйҙәрҙә, ҡурай моңдарында сағыла. Сөнки башҡорт яуҙа ла, тыныс тормошта ла ҡурайы менән бергә булған.

Ҡурай - халыҡтың моң йылъяҙмаһы, ул шанлы-данлы йылдарҙың, байманлы мәлдәрҙең ауазын быуындарға ишеттереүсе. Шуның өсөн дә башҡорт тигәндә - ҡурайҙы, ҡурай тигәндә башҡортто күҙ алдына килтерәбеҙ. Ҡурай биш уйымлы ябай ғына тынлы музыка ҡоралы булһа ла, уның йәшерен коды бар. Бары тик башҡорт рухлы булғандарға ғына сиселә торған был сер күптәргә асылмай. Дөрөҫөн әйткәндә, маймылды ла ҡурайҙа уйнарға өйрәтергә мөмкин, ләкин ҡайҙа инде бында башҡорт рухы! Бөгөн ҡайһы бер ҡурайҙа уйнаған кәсепселәр сит ҡәүемдәргә аҡса өсөн ҡурайҙа уйнарға өйрәтеп йөрөй. Улар ҡурай серенә төшөнөп етмәгән, шуға, нисек кенә яҡшы уйнаһа ла, тамашасы күңеленең нескә ҡылдарын тирбәлтерлек моң ағылдырып башҡара алмай. Тимәк, улар ысын ҡурайсы түгел. Әйткәндәй, 2016 йылда ҡурайсылар съезында "Ҡурайсы кодексы" өсөн бөтәһе лә тауыш бирҙе. Ә был кодекста "ҡурайҙы ситтәрҙең үҙләштереүенә юл ҡуймаҫҡа" тигән юлдар бар. Тимәк, әле әйткән кәсепселәр кодекс талабына яуап бирмәй...

Әгәр ҙә ҡурайыбыҙҙы, оҙон көйҙәребеҙҙе, тарихыбыҙҙы һаҡлаһаҡ, беҙгә бер ниндәй заман һынауҙары ла ҡурҡыныс түгел. Башҡорт халҡын үҙаллы итеп, үҙ сәнғәте, мәҙәниәте, әҙәбиәте, тарихы, йолалары булған милләт итеп һаҡлап килгән ошо ҡиммәттәребеҙ барҙа, халҡыбыҙ мәңгелек буласаҡ.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Изгелекте уйлап-нитеп тормаҫтан, күңел талабы ҡушҡанса йыш эшләйһегеҙме?

**(Башы 1-се биттә).**

***Гөлдәр ӘХМӘТТӘРӘЕВА, хеҙмәт ветераны:*** Кисә көнөмдө нисек үткәреүем хаҡында бәйән итеүем һеҙҙең был һорауығыҙға яуап була алыр ул, әйткәндәй. Иртәнсәк магазинға сығып әйләндем. Урамдағы емеш-еләк киоскыһы янындағы сиратта бер аҙ тотҡарланырға тура килде шулай. Минең алдағы әбей маҙаһыҙ һәм бәйләнсек булып сыҡты бит, әйтәгүр: йә һатыусыны әрләй, йә алған алмаһы оҡшамай - алыштырырға ҡуша. Ниһайәт, иҫәпләшергә йыйынғайны ғына, аҡсаһы тулманы ла ҡуйҙы бит бының. Тиҙерәк ҡулымдағы янсығымдан сығарып аҡса һонам. Быны көтмәгән мыжыҡ әбейемдең йөҙө яҡтырып китте. Моҡсайына әйберҙәрен дә һалышып, ярҙам итеп ебәргәс, рәхмәттәрен уҡып, алҡышланып бөтә алманы. Ҡайтып, сәй эстем дә, мунсаға юлландым. Унда ла тауышланып йөрөгән бер ҡарсыҡҡа тап булдым, бынағайыш! Ниндәй көн булды һуң әле был, тип аптырайым. Пар бүлмәһенә сабынырға инһәм, күрәм: теге ҡарсыҡ түбәнге ләүкәлә генә ултырып тора, миндеге юҡ. Шул мәлдә сабынып бөткән бер ҡатын үҙ миндеген бының ҡулына тоттороп китеүен байҡаным. Йыуынып бөтөп, кейенергә сыҡһам, теге әбей миңә күрше эскәмйәлә ултыра. Асыуы баҫылмаған, һаман кемделер әрләй үҙе. Аңлап ҡалдым шул саҡ: аяғы өшөй икән, иҙән һыуыҡ, тип йыйыштырыусы ҡатынға һуҡрана. Бында яланаяҡ йөрөмәйҙәр, минеке тағы бар өйҙә, тип, мунса тәпешкеләремде ҡалдырып киттем уға. Уның да күңеле яҙылып китте, рәхмәттәр әйтеп ҡалды. Кеше күңелен күрергә күп тә кәрәкмәй бит ул. Ундайҙарҙы ла аңларға кәрәк: юҡтан ғына кәйефе китә өлкән кешенең: йә өйөндә тыныслыҡ күрмәй, иғтибар, йылылыҡ етмәйҙер уға, йә юҡлыҡтан йәне көйәлер. Тирә-йүндәгеләребеҙгә кеселекле, ярҙамсыл булайыҡсы, йәмәғәт. Уның менән генә донъябыҙ кәмемәҫ, киреһенсә, күңелебеҙ байыр, кеше йылмайыуынан үҙебеҙ ҙә рәхәтлек кисерербеҙ.

***Радмир САФИН, психолог:*** Ҡайһы берәүҙәр, тормошта нимәгәлер өлгәшер, уңышлы булыр өсөн ҡаты күңелле, эгоист булырға, "кеше баштары аша" йөрөүҙән дә тартынмаҫҡа кәрәк, тигән фекерҙә тора. "Әрһеҙлек (әллә - оятһыҙлыҡ?) - икенсе бәхет, тип тә ҡуябыҙ бит ҡай саҡ үҙебеҙ ҙә. Ләкин бындай ҡараш төптө дөрөҫ түгел, ул асылы, холҡо менән тап ана шундай сифаттарға эйә әҙәмдәрҙең тормош позицияһы, һәм ул бер ваҡытта ла яҡшыға алып бармаясаҡ. Шөкөр, ә бит беҙҙең халыҡты тыуғандан алып тик яҡшылыҡҡа өйрәтә башлайҙар: атай-әсәйҙәребеҙ һәм олатай-өләсәйҙәребеҙ ҙә, уҡыған әкиәттәребеҙ ҙә, йырлаған йырҙарыбыҙ ҙа... Сөнки халҡыбыҙ борондан шуға инанған: яҡшылыҡ булһа атыбыҙ, кеше булыр затыбыҙ. Донъялағы иң боронғо иҫәпләнгән "Урал батыр" эпосыбыҙҙың да төп идеяһы - изгелек ғәмәле, изгелектән бар булған зат-ырыуыбыҙ. Изгелек ҡылыу - ул дан өсөн дә, исем өсөн дә түгеллеген яҡшы белгән халҡыбыҙ. Юҡҡа ғынамы ни уның "Изгелек изгелек булып ҡайтыр", "Изгелек ерҙә ятып ҡалмаҫ" тигән һынамыштары бар. Ошо ғәмәл менән йәшәгән кеше һәр ваҡыт сәләмәт, шат, асыҡ күңелле оптимист һәм оҙон ғүмерле була, ти табиптар ҙа. Улар быны йылдарға һуҙылған махсус күҙәтеүҙәргә нигеҙләнеп белдерә. Ә бына Канада психологтары балалар менән "Аҙнаға өс изге эш" тәжрибәһе үткәреп ҡараған. Изгелек ғәмәле улар өсөн әсәһен ҡосаҡлау, мәктәптә төшкө ашын иптәше менән бүлешеү, өй йыйыштырышыу йә киске аш әҙерләшеү кеүек ябай ғына эштәрҙән ғибәрәт була. Дүрт аҙнанан һуң балаларҙың дуҫтары күбәйә, мәктәптә уларҙың популярлығы арта, өлгәшеүҙәре яҡшыра, балалар үҙҙәрен элеккегә ҡарағанда ышаныслыраҡ тоя башлай. Тимәк, ни тиклем изгелекле булһаң, был сифат, һис шикһеҙ, башҡаларға ла "йоға". Ышанмаһағыҙ, үҙегеҙ менән дә шундай тәжрибә үткәреп ҡарағыҙ! Бының өсөн форсаты ла тыуып тора: 17 февраль - Халыҡ-ара иреклe изгелек ғәмәле көнө.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ӘСӘ ТЕЛЕНДӘ...

## ғилем алырға ине ул



**Мәктәп төшөнсәһен күптәр урта белем алыу йорто тип кенә күҙ алдына килтерә. Юғары уҡыу йорттары һәм академиялар ҙа мәктәп тә баһа. Башҡорт телендә урта мәктәпте тамамлаған балалар әсә теле буйынса белемдәрен филология факультетында ғына камиллаштыра ала.**

Башҡорттарҙың аҡһөйәктәре 165 йыл элек мәғариф үҙәге ойоштороу маҡсатында Каруанһарай төҙөргә ҡарар иткән. 55 йылдан һуң ғына унда Башҡорт халыҡ мәғариф институты асҡандар. Башҡорт телендә төрлө ғилемгә өйрәтерлек мәғариф үҙәге университетҡа әүерелергә тейеш ине лә, ләкин был уҡыу йортон дүрт йылдан техникум дәрәжәһенә төшөргәндәр, һуңынан бөтөнләй ябып, бинаһын да тартып алғандар. Шунан бирле әсә телендә аристократик белем биргән уҡыу йортоноң ойошҡаны ла юҡ. Әсә телендә бөтөн фән тармаҡтары буйынса ла тәрән фекер йөрөтөүгә өйрәтеү өсөн Башҡортостандың һәр уҡыу йортонда башҡортса уҡытыу бүлектәре булырға тейеш, тип уйлайым. Бөгөн "Башҡорт дәүләт..." тип башланған юғары уҡыу йорттарының исемдәре үҙ асылына тура килмәй, улар "Башҡортостан дәүләт вуздары". Вуздарҙың башҡорт бүлексәләренә икенсе милләт вәкилдәре лә инә алһын өсөн, уларға үҙебеҙҙең әсә телен бик яҡшы итеп өйрәтергә кәрәк. "Русский язык в башкирский школе" тигән журнал бар ине, ә хәҙер "Башкирский язык в русскоязычной школе" тигән журнал да кәрәк.

Әсә телендә юғары белем алыу булмағас, ҡалала башҡорт теле менән "деревня", "национал" йәки "провинциал" булып йөрөйһөң. Юғары мәҙәниәтле, йәғни "культурный", булам тип, күбеһе этенә-төртөнә үҙ-ара ла урыҫ телендә генә һөйләшә башлай. Сит ил кешеһе шулай уҡ этенә-төртөнә үҙ фекерен урыҫ телендә акцент менән төшөндөрә алһа, уны "О-о!" тип һөйөнөп, ғәжәпләнеп хөрмәт итәләр. Ә башҡорттоң урыҫса акцент менән һөйләшкәне йыш ҡына тиҫкәре ҡараш тыуҙыра. Бына шулай, Арҡайымды туҙан күмеп киткәндән бирле башҡорт үҙ илендә сит ил кешеһе һымаҡ.

Әсә теленән барлыҡҡа килгән акцент провинция һәм урта белем билдәһе генә булып ҡалмаһын өсөн симметриялы ике теллелек кәрәк. Урыҫ теллеләр ҙә башҡорт телен өйрәнеүҙән ҡурҡмаһын ине, сөнки уларға ла, ниндәй телдә булһа ла, ғилем кәрәк. Ғилем башҡорт телендә лә бирелһә, күрерһегеҙ, фәнни үҫеш һәм фәнни ижад өр-яңы төҫ алаСаҡ, икенсе милләт вәкилдәре башҡорт теле ярҙамында күп яңы асыштар килтерәсәк.

**Марат ХӘЙҘӘР.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"РИА Рейтинг" Рәсәй төбәктәрендә халыҡ тормошоноң сифат рейтингын баҫып сығарҙы. Башҡортостан уҙған йыл менән сағыштырғанда үҙ торошон бер билдәгә яҡшыртҡан һәм хәҙер 24-се баҫҡысты биләй. Рәсәй Федерацияһы субъекттары араһында йәшәү сифаты буйынса Мәскәү, Санкт-Петербург һәм Мәскәү өлкәһе алдынғылыҡты биләй. Улар йыйған балдар 70-тән күберәк. Башҡортостан 50,53 балл йыйған.

✓Үткән йәкшәмбе "Һарытау һауа юлдары"ның Мәскәүҙән Орск ҡалаһына юлланған АН-148 самолеты һәләкәткә осраны. 71 кеше - 65 пассажир һәм 6 экипаж ағзаһының ғүмере өҙөлдө. Улар араһында ике яҡташыбыҙ ҙа бар. Был һәләкәткә тиҙлек датчиктарының туңыуы сәбәпсе булыуы ихтимал, тип хәбәр ителә Дәүләт-ара авиация комитетының рәсми сайтында.

✓Башҡортостан һанлы иҡтисадты үҫтереү процесында әүҙем ҡатнаша, тип белдерҙе Әбйәлил районында барған Финанс өлкәһенең мәғлүмәт хәүефһеҙлеге буйынса X Урал форумында республика хөкүмәте премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов. Билдәләнеүенсә, Башҡортостандағы барлыҡ социаль учреждениеларҙа интернетҡа сығыу мөмкинлеге бар. Бынан тыш, төбәктә "ошо өлкәләге эштәр менән шөғөлләнгән" махсус кластер ойошторолған. Республикала электрон белем биреү өлкәһендәге проекттар уңышлы ғәмәлгә ашырыла.

✓Йәштәр эштәре буйынса федераль агентлыҡ 2018 йылда физик берәмектәр араһында Бөтә Рәсәй йәштәр проекттары конкурсында ситтән тороп ҡатнашыу этабына йомғаҡ яһаны. Унда ҡатнашыу өсөн һигеҙ мең самаһы кеше ғариза биргән, уларҙың 260-ҡа яҡыны - Башҡортостандан. Һөҙөмтәлә Башҡортостан проекттары дөйөм суммаһы 4,2 млн һумлыҡ 25 грантҡа лайыҡ булған. Консультация алыу өсөн түбәндәге адресҡа мөрәжәғәт итергә мөмкин: Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 10, 4-се бүлмә, йәштәрҙең башланғыстарына булышлыҡ итеү бүлеге.

✓Хәрби Дан музейында "Кескәй геройҙар форумы" сараһында ҡатнашыу өсөн республиканың төрлө райондарынан туғыҙ бала үҙҙәренең батырлыҡтары тураһында һөйләргә баш ҡалаға килде. "Ысын геройға әйләнгән кескәй кешеләрҙең тарихтары менән 21 февралдә Өфөлә Кескәй геройҙар форумында таныштыралар. Бөгөнгө көнгә 30-ҙан ашыу ғариза алдыҡ", - тип хәбәр итте ойоштороусылар.

ИШАРА

# ТЕЛЕҢ ӘЙТКӘНДЕ...

## ҡолағың ишетһен!

**Интернет киңлегендә берәүҙең: "Әгәр ҙә мәгәр шулай итмәһәк, беҙ юҡҡа сығасаҡбыҙ, беҙ бөләсәкбеҙ!" - тигән кисәтеүен уҡығас, йөрәк жыу итеп китте. Бәй, был кеше үҙе үк бөтөү, юҡҡа сығыу программаһын Йыһанға ебәреп ята лаһа, тигән уйҙан тетрәнеп, тиҙ генә ғалимдарҙың ошо хеҙмәтен тәржемәләргә булдыҡ. Уҡыйыҡ һәм ниҙер әйтер алдынан һүҙҙең ниндәй әҙемтәгә юлыҡтырыры тураһында уйлап алырға өйрәнәйек.**



"Ғалимдар шундай һығымтаға килгән: ДНК телмәрҙе һәм уйҙарҙы ҡабул итә! Һәр әйтелгән һүҙ - тормошоғоҙҙо тамырынан үҙгәртергә һәләтле тулҡынлы генетик программа ул. Икенсе төрлө әйткәндә, кемдәр менән аралашаһығыҙ, һеҙөмтәлә нәсел унан программа ала. Тоҡом өсөн яуаплы молекулалар беҙ һөйләшкәндәге йәки ниндәйҙер телмәр ишеткәндәге акустик мәғлүмәтте үҙенә күсерә. Шулай уҡ ДНК беҙ шым ғына уҡығанда йәки нимәләр ҡарағанда яҡтылыҡ мәғлүмәтен дә ҡабул итә. Шул уҡ ваҡытта бер телмәр йәки текст - тоҡомдо һауыҡтырырға, икенсеһе уны йәрәхәтләргә мөмкин.

Медик-техник Фәндәр академияһы академигы, Нью-Йорк Фәндәр академияһы ағзаһы П. П. Гаряев, кеше һүҙ аша әйткән уйҙары ярҙамында үҙенең генетик аппаратын барлыҡҡа килтерә, тип иҫәпләй. Бәҡтиһән, доғалар генетик аппараттың резерв мөмкинлектәрен уята икән. Хатта өмөтһөҙ сирлеләр ҙә изгеләрҙең доғаһынан һуң һауығыуы билдәле. Изгеләрҙең фатихаһы уларҙың бер нисә быуынына тиклем дауам итә, һаҡлап тора.

Ҡарғыш иһә тулҡын программаларын емерә, тимәк, организмдың нормаль үҫешен боҙа. Кешене ихтыярынан, сәләмәтлегенән, ҡайһы бер осраҡта ғүмеренән дә яҙҙырған зомбилаштырыу, сихырлау, әсә ҡарғышында төп ҡорал булып һүҙ тора.

Ә хәҙер ғалимдарҙың төп һығымтаһына иғтибар итегеҙ: тулҡын генетикаһын өйрәнеүселәр, кешенең генетик аппараты уның хужаһы нимә уйлауы, тыңлауы йәки уҡыуы барыбер түгел, ти. Сөнки һәр мәғлүмәт тулҡын генына яҙылып бара икән. Шул уҡ ваҡытта ДНК аппараты мәғлүмәтте кемдән алыуыбыҙҙы айырмай: уға тере әңгәмәсе ни, телевизор ни. ДНК молекулалары был мәғлүмәт менән акустик һәм электромагнит тулҡындар ярҙамында бүлешергә һәләтле. Әммә иң ғәжәбе, үҙ тәжрибәләрендә ғалимдар күп "мөғжизәле" йәки генетик һөҙөмтәләрҙе һүҙ ярҙамында тартып килтерә. Улар кеше һүҙен молекулаға - ДНК-ға тәьҫир итергә һәләтле электромагнит тирбәлеүгә әйләндереүсе аппарат уйлап таба. Һөҙөмтәлә ҡайһы бер һүҙҙәрҙең ҡот осҡос мутация гены эффекты барлыҡҡа килтереүе асыҡлана: хромосомалар ҡалтая, өҙөлә, гендар урындары менән алмаша, ДНК киләсәк быуынға тәбиғи булмаған - үҙ-үҙен юҡ итеү программалары эшләп сығара башлай, улар организмда үрсей. Белгестәр баһалауынса, сәйер һүҙҙәр 30 мең ҡеүәтендәге рентген биргән радиоактив нурланыуға тиң мутаген һөҙөмтә бирә. Әгәр кеше өсөн 50 рентген үлемесле доза булып һанала икән, шундай телмәр эшкәртеүенән һуң ул нишләргә тейеш? Бәхеткә күрә, был тәжрибәне арабидопсис үҫемлеге орлоҡтарында үткәрәләр. Улар барыһы ла тиерлек һәләк була. Иҫән ҡалғандары иһә генетик зәғиф, сәләмәт организм үҫешен программалауға һәләтһеҙ. Бер нисә быуындан һуң уларҙың тоҡомо тулыһынса боҙола.

Ғалимдарҙы мутаген эффектының тәьҫир итеү көсөнә бәйле булмауы аптырата. Улар һүҙҙәрҙе ҡысҡырып та, шым ғына ла, шыбырлап та әйтә - һөҙөмтә бер үк. Бәлки, аппарат тауыш тирбәлеше энергияһын көсәйткәндер? Мөмкин түгел, сөнки ул, гәзәттә, кеҫә фонарене көс биргән ике бәләкәй батарея ярҙамында эшләй. 30 мең рентген һөҙөмтәһен алыр өсөн ошо батареялар ҡеүәтенән меңдәрсә тапҡыр көслө көсөргәнеш бирергә кәрәк.

Уйланырға урын бар, шулай бит. Тормошта күп ҡатмарлыҡтар йәмәғәт фекере, үҙҙәрен донъя тотҡалары тип уйлаусылар тарафынан һәр көслө заттың көсһөҙ итеү һәм яман һүҙ, алкоголь, тәмәке тартыу, бирәнлек, аҙғынлыҡ һ.б. шундай "допинг"тарҙан бәйле итеү өсөн программаланған икәнлеге аңлашыла.

Бик йыш: "Нисек йәшәйһең?" - тигән ябай һорауға нимә тип яуап бирәһегеҙ? "Барырлыҡ... Йәлап ҡына... Барыһы кеүек..." Ир-ат мөхитендә нимә тураһында һөйләшеүегеҙ һәм ниндәй телдә һөйләшеүегеҙҙе күҙәтегеҙ әле. Интернетта ниндәй мәғлүмәт уҡыйһығыҙ, ниндәй тапшырыуҙар ҡарайһығыҙ? Хәҙер аңлаштығыҙмы инде? Әгәр тормоштағы уңышығыҙ фекерләүегеҙ һәм аралашыуығыҙ кимәленә бәйле икәнен һаман да аңламаһағыҙ, ғалимдарҙың фекеренә ҡолаҡ һалығыҙ.

Кем булырға теләйһегеҙ, үҙ мөхитегеҙгә ниндәй мәғлүмәтте индерергә рөхсәт итәһегеҙ, үҙ көсөгөҙҙө табыр, үҙегеҙгә ышаныр, ихтыяр көсөгөҙҙө нығытыр, үҙегеҙҙе һәм харизмағыҙҙы 100 процентҡа асыр, үҙ ҡатыныңыҙҙы (ирегеҙҙе) донъяларҙың иң бәхетле кеше итер, балаларығыҙ аталары менән ғорурланһын, Ер йөҙөндә тормош ыңғайға китһен, изге күңелле һәм яҡшы күршеләр менән йәшәр өсөн бөгөндән башлап ниндәй фекерҙәр һәм һүҙҙәр ҡуллана башлаясаҡһығыҙ - ҡарар ҡабул итегеҙ!"

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Был мәҡәлә менән әллә ниндәй асыш яһаманыҡ. Был турала "Киске Өфө" гәзите биттәрендә даими яҙып торабыҙ. Ул хәҡиҡәтте, йәғни һүҙ менән һаҡ булырға кәрәклекте, тормошта уңыш ҡаҙаныш, бәхеткә төрөнөп йәшәүҙе геройҙарыбыҙ ауыҙынан да ишеткәнегеҙ, "Мосолман әҙәбе", "Уңыш ҡаҙан" рубрикаларында ла уҡығанығыҙ бар. Әммә... Кемегеҙ ниндәйҙер һүҙ, фекер әйтер алдынан ете ҡат үлсәп ҡарау гәзәтенә эйә? Уртаҡлашығыҙ әле шул матур фигелгәҙәттәрегеҙ тураһындағы һүҙ менән...**

Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР




# КҮҘӘТЕҮҘӘР

***41-се күҙәтеүем.*** Шәмбе көн автостраховка мөҙҙәте тамамланғас, машинамды Аҡъяр ауылының "Бикбау" сауҙа үҙәге ҡаршыһында ҡалдырып, "Росгосстрах" компанияһы офисын эҙләп киттем. Тиҙ генә барып таптым. Бикле булып сыҡты. Шәмбе эшләмәй икән. Кире килгәндә ҡаршыма бер ағай осраны. Һаулыҡ һорашты. Беҙҙең арала шундайыраҡ һөйләшеү булды:

- Нишләп йөрөйһөң, ҡустым?
- Мына, "Росгосстрах"ҡа килгәйнем. Бикле булып сыҡты...
- Йөк машинаһымы?
- Юҡ, еңел...
- Эй, эттәгенәһе, йөк машинаһы булһа, ярҙам итер инем...
- Ярай, ағай, Өфөгә ҡайтҡас эшләтермен әле...
- Һин, ҡустым, мине ғәфү ит...
- Нимә өсөн, ағай?
- Һиңә ярҙам итә алмаған өсөн...
- Эй, ағай, борсолма...
- Нишләп борсолмаҫҡа, ти. Һин бит Өфөнән килгәнһең...
- Бөтә Өфө кешеләренә ярҙам итергә тимәгән бит...
- Барыбер ҡыйын...
- Минең Өфөнән икәнлегем ҡайҙан беленә? Мине таныйһыңмы әллә?
- Юҡ, танымайым, үҙең әйттең бит Өфөнән тип. Мин, ҡустым, һиңә тағы нисек ярҙам итә алам?
- Юҡ, ағай, барыбер ҙә һиңә шундай ярҙамсыл булғаның өсөн ҙур рәхмәт...
- Һуң, мин бит һиңә ярҙам итә алманым...

...Минә бер нисек тә ярҙам итә алмағаны өсөн тәрән борсолоу тойғоһо йөҙөнә сығып, ағайым тороп ҡалды. Ундай кешеләрҙе Хыҙыр Ильяс тиҙәр. Шул булғандыр. Бигерәк тә Хәйбулла ерлегендә ошо ағай кеүек ихлас, ярҙамсыл кешеләрҙе йыш осратам. Халҡыбыҙҙың күркәм бер сифатына эйә бит улар.

***42-се күҙәтеүем.*** Һыуҙың ҡәҙерен белер өсөн һыуһыҙ сарсарға, ризыҡтың ҡәҙерен белер өсөн асығырға кәрәк, тиҙәр. Йәшәүҙең ҡәҙерен белер өсөн үлеп ҡарарға кәрәкме икән? Сарсағандан һуң һыуһындарың ҡанғансы һыу эсергә, асыҡҡандан һуң туйғансы ризыҡҡа тейенергә була. Тик үлеп ҡарағандан һуң кире терелеүе мөмкин түгел. Шуға күрә, Хоҙайға һыйынып йәшәү һәм Уның өсөн үлеү иң дөрөҫөләр ул. Шулаймы икән?..

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандан "Европа - Көнбайыш Ҡытай" халыҡ-ара транспорт маршруты үтә. "Инвестиция проекты республика биләмәһендә "Баулы - Күмертау" автомобиль юлын төҙөүҙе күҙ уныңда тота. Маршрутҡа бер миллиондан ашыу кеше йәшәгән ҙур сәнәғәт ҡалалары: Стәрлетамаҡ, Ишембай, Салауат, Мәләүез, Күмертау инделгән", - тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән. Беренсе класлы дүрт һыҙатлы тулаҡле юлдың оҙонлоғо - 283,3 саҡрым. Ул транспорт сығымдарын өс тапҡырға кәметергә мөмкинлек бирә һәм сауҙа өсөн яңы мөмкинлектәр аса.

✓Ауыл хужалығы министрлығы "АгроЙәшлек" республика ғилми-техник һәм заманса ижад конкурсын уҙғарыу тураһында иғлан итте. Ул 7-17 йәштәге мәктәп уҡыусылары һәм урта һөнәри белем биреү студенттары араһында иң яҡшы ғилми проекттар, эштәр, тикшеренеү эштәрен асыҡлауға йүнәлтелгән.

✓Башҡортостандың Мәғариф министрлығында Берҙәм дәүләт имтиханын үткәреү мәсьәләләре буйынса һыҙыу элемтә эшләй. 8 (347) 218-03-81, 218-03-28 телефондары буйынса Берҙәм дәүләт имтиханында ҡатнашыусылар, уларҙың ата-әсәләре, шулай уҡ уҡытыусылар, ойоштороусылар имтиханға ҡағылышлы һорауҙар менән ведомство хеҙмәткәрҙәренә мөрәжәғәт итә ала. Шылтыратыуҙар дүшәмбенән йомаға тиклем иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға ҡәҙәр ҡабул ителә.

✓2018 йылдың 1 февраленән Башҡортостанда ҡала яны поездарында юл йөрөү һәм йөк хаҡы артты. Башҡортостан Хөкүмәтенең ҡарар проектына ярашлы, сәфәр алыҫлығына ҡарамаҫтан, тәүге 10 саҡрым өсөн юл хаҡы 20 һум тәшкил итәсәк (хәҙер ул 19 һум тора), унан һуңғы һәр саҡрым өсөн - ике һум (хәҙер 1,9 һум).

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында сираттағы тапҡыр "Һылыуҡай-2018" республика гүзәллек бәйгеһе ойошторола. Башҡорт һылыуҙарын конкурсың һайлап алыу турына саҡыралар. Кастингты үткәреү урыны: Өфө ҡалаһы, Элеватор урамы, 13, "Версаль" рестораны. Иртәнге сәғәт 11-ҙә башлана. Ғаризалар 18 февралгә ҡәҙәр "Һылыуҡай-2018" билдәһе менән gukrcnt@mail.ru электрон адресына ҡабул ителә. Тулыраҡ мәғлүмәт өсөн телефон: (347) 289-62-00, 8-965-666-20-68 (конкурстың кураторы Әлиә Ғәйфуллина).

**"Башинформ"дан.**

✓ *Әлбиттә, улар ябай граждандарҙың мәнфәғәтен яҡлаһын өсөн баланс табырға кәрәк ине һәм беҙ быға өлгәштек тип әйтә алам. Депутаттарҙың һәр ҡайһыһы ҡаланы төҙөкләндереүгә үҙ көсәһенән аҡса һалды.*



ҠЫҪҠАСА

# ҠАР КӨТӘБЕҘ!..

✓ **Башҡортостанда әлеге ваҡытта ҡарҙа һыу запасы - норманан 30 процентҡа кәм, тип хәбәр иттеләр республиканың Экология министрлығынан авиация гамма-төшөрөү мәғлүмәттәренә таянып.** "Ағымдағы осорға оҡшаш хәл 1967, 1984, 2009 йылдарҙа күҙәтелгән. Февралдә ҡар яумаясағы билдәле инде. Әммә, беренсенән, алда март айы, икенсенән, ҡарҙың аҙ булыуы ташҡындың ҙур булмауын дәлилләмәй", - тип билдәләне министр урынбаҫары Виталий Тюр. Атап әйткәндә, республика буйлап тупраҡ - норма сиктәрендә, ә Урал аръяғында хатта норманан юғарыраҡ туңған, 1,5 метрға тиклем. Ҡапыл йылыта йәки ямғыр яуа башлау йылғаларҙы ирегән һыу менән әүҙем тәьмин итәсәк һәм һөҙөмтәлә ташҡын да юғары кимәлдә буласаҡ. Киләһе айҙа ла ҡар булмаһа, аҙ һыулылыҡ булыуы ихтимал, шул сәбәпле һыуһаҡлағыстар күп запас эшләй алмаясаҡ. Ләкин ниндәйҙер фараздар тураһында һүҙ йөрөтөргә иртә әле. Синоптиктар 2018 йылға яҙҙың тәүге күҙаллауҙарын ғәҙәттәгесә 25 мартҡа әҙерләй, тип хәтергә төшөрҙөләр республиканың Экология министрлығында.

✓ **Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары аҙыҡ-түлек именлеге тураһындағы законға үҙгәрештәр индерәсәк.** Яңыртылған закон проекты республика халҡына "туҡланыуҙың физиологик нормаларына ярашлы йәшәү өсөн мөһим аҙыҡ-түлектең эргәлә булыуын тәьмин итеп" кенә ҡалмаясаҡ, ә тәьминәттең механизмдарын да ҡараясаҡ. Республика халҡы йылына аҙыҡ-түлек өсөн 365 миллиард һум сарыф итә. Шул уҡ ваҡытта эшкәртеү предприятиелары һәм шәхси хужалыҡтар 160 миллиард һумлыҡ әҙер продукция етештерә. Баҙарҙың күп өлөшөн башҡа төбәктәрҙән һәм сит илдән индерелгән ризыҡ алып тора. Бушлыҡты тултырыу өсөн властар ауыл хужалығы продукцияһын етештереүселәргә эшкәртеү һәм баҙарға сығарыу, эре эшкәртеү предприятиеларының продукцияһын һатыу һәм иҡтисади әүҙем халыҡ йәшәгән ауылдарҙа кооперативтар ойоштороу менән ярҙам итеүҙе планлаштыра.

✓ **Былтыр Өфө ҡала хакимиәтенә граждандар 35 меңдән ашыу мөрәжәғәт яҙған, йәғни 10 мең кешегә 312 мөрәжәғәт тура килә.** Һуңғы йылдарҙа тормошобоҙға мәғлүмәт технологиялары ныҡлы килеп инеүе һөҙөмтәһендә мөрәжәғәттәрҙең күп өлөшө электрон вариантта килә. Улар дөйөм күләмдең 55,1 (19333) процентын алып тора. 7215 мөрәжәғәт муниципалитеттың рәсми сайты аша ҡабул ителә. Ғаризалар 97,5 процент булһа (34215), 803 ялыу (2,3 процент), 71 тәҡдим (0,2 процент) килә. Анализ күрһәтеүенсә, граждандар күпселек осраҡта торлаҡ хужалыҡ (22,5 процент), төҙөлөш (21,0), коммуналь хужалыҡ (20), ер менән файҙаланыу (9), йәшәү шарттарын яҡшыртыу (6,8 процент) мәсьәләләре буйынса мөрәжәғәт итә. Ғәмәлдәге ҡануниәткә ярашлы, хакимиәттең вазифалы кешеләре граждандарҙы шәхсән ҡабул итә. Былтыр уларға 4 меңдән ашыу кеше килгән.

✓ **"Башинформ" республика мәктәптәрендә белем алыусыларҙың тағы ҡасан ял итәсәген асыҡланы.** Мәҫәлән, мәктәп тормошона тулыһынса яраҡлашып өлгөрмәгән беренсе класс уҡыусыларына өсөнсө сиректең уртаһында бер аҙналыҡ өҫтәмә ял ҡаралған. Белем биреү учреждениеһы ошо датаны үҙе билдәләй, ләкин яҡынса алғанда, был 19 февралдән 25-нә тиклем булырға тейеш. Башҡа уҡыусылар иһә Ватанды һаҡлаусылар көнө уңайынан 23, 24 һәм 25 февралдә ял итә. Яҙғы каникулдар 26 марттан алып 2 апрелгә тиклем билдәләнгән. Әйткәндәй, март айында каникулдан тыш байрамдар ҙа бар. Был - Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнөнә тап килгән 8 марттан 11 мартҡаса дүрт көнлөк ял. Апрелдә байрам көндәре - 29 апрелдән 2 майға ҡәҙәр (Яҙ һәм хеҙмәт байрамы), 9 май - Еңеү көнө. Оҙайлы йәйге каникулдар 1 июндә башлана. Хәйер, 9 һәм 11 класс уҡыусылары төп һәм берҙәм дәүләт имтихандарын тапшырғас ҡына ял итә ала.

ЕТӘКСЕ ҺҮҘЕ

# ЙЫЛДЫ ЙОМҒАҠЛАП...



**Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ҡала округы Советы депутаттары алдында йыллыҡ отчет менән сығыш яһаны. Сарала Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов ҡатнашты. Эшләнгән эштәр тураһында мәғлүмәт йыл дауамында гәзитебеҙ биттәрендә донъя күреп торҙо, шулай уҡ улар менән ҡала хакимиәтенең сайтында ла танышырға мөмкин. Ғөмүмән, эшләнгән эштәрҙең һөҙөмтәһен ҡала халҡы үҙ күҙҙәре менән күреп, булдырылған уңайлыҡтарға, ҡаланың көндән-көн матурланыуына хәҙер инде өйрәнеп тә бөткәндер. Ләкин, камиллыҡтың сиге булмағандай, йомғаҡлауҙар артында һәр саҡ киләсәккә пландар тора. Әлеге ултырыштағы отчет доклады мәғлүмәттәргә ни тиклем бай һәм ентекле булыуға ҡарамаҫтан, һуңынан журналистар Ирек Ишмөхәмәт улы менән аралашырға ашыҡты һәм уға тағы бер нисә һорау бирҙе.**

➔ **Ирек Ишмөхәмәт улы, ҡала округы Советы депуттары корпусы менән хакимиәттең берлектәге эшмәкәрлеген нисек баһалайһығыҙ?**

- Беҙ бер йүнәлештә эш алып барабыҙ һәм депутаттар корпусының ныҡ үҫеш кисереүен билдәләр инем. Әгәр иҫләһәгеҙ, ҡала Советының ябыҡ булыуына бәйле бик күп тәнҡит булһа, хәҙер яйлап ҡына улар ҙа журналистарға асыла бара. Депутаттар барыһы ла уңышлы, был тормошта аяҡтарында ныҡлы баҫып торған шәхестәр. Күптәре предприятие етәкселәре, етди бизнес эйәләре. Әлбиттә, улар ябай граждандарҙың мәнфәғәтен яҡлаһын өсөн баланс табырға кәрәк ине һәм беҙ быға өлгәштек тип әйтә алам. Депутаттарҙың һәр ҡайһыһы ҡаланы төҙөкләндереүгә үҙ көсәһенән аҡса һалды.

➔ **Йылға йомғаҡ яһағанда, алда торған бурыстарҙы билдәләү ҙә - тәбиғи. Ҡала хакимиәтенең 2018 йылға пландарын нисек күҙаллайһығыҙ һәм бюджетты тулыландырыу буйынса ниндәйҙер үҙгәрештәргә өмөт итәһегеҙме?**

- Беҙ хәҙер өс йыллыҡ бюджетты планлаштырыуға күстек, шуға күрә алдағы йылдарҙы аныҡ күҙаллай алабыҙ. Шуны ныҡлы әйтәм - 2018 йыл да уҙған йылдан насар булмаясаҡ. Ә былтыр беҙ бюджетҡа республика Башлығы һәм Хөкүмәте ярҙамы менән 5 миллиард һум өҫтәмә индереүгә өлгәштек. Артабан да бындай профессиональ кимәлдәге хеҙмәттәшлек дауам итер, ҡала бюджеты яйлап үҫер, тип уйлайым. Әммә шуны ла онотторға ярамай: ҡала бюджетынан тыш, мегаполиста күп нәмә республика заказсыһы тарафынан тормошҡа ашырыла. Был да ҡаланы үҫтереүгә ҙур өлөш. Мәҫәлән, "Өфө" халыҡ-ара аэропортын ғына алып ҡарағыҙ - ул тотошлайы менән республика һәм федераль бюджет иҫәбенә реконструкцияланды һәм хәҙер уның икенсе этабы башланасаҡ. Шуға күрә, һәр саҡ бер нисә компонентты иҫәпкә алырға кәрәк. Ҡала үҙ бюджеты иҫәбенә генә үҫә тип уйларға ярамай. Шулай уҡ йылына 100 миллиард һумдан ашыу шәхси инвестициялар һалына, ә ҡала бюджеты 24,5 миллиард һум. Йәғни ҡаланың үҫешендә этәргес көс булып инвестиция сәйәсәте тора. Шуға күрә, инвесторҙар өсөн уңайлы шарттар булдырыу - тәү сираттағы бурыс.

➔ **Мостай Кәримдең 100 йыллығы республика юбилейы кеүек үк федераль кимәлдә билдәләнәсәк, был турала сығышығыҙҙа ла телгә алдығыҙ. Халыҡ яҙыусыһының юбилейы уңайынан баш ҡалала ниндәй саралар планлаштырыла?**

- Былтыр беренсе тапҡыр Мостай Кәрим һәйкәле эргәһендә Шиғриәт көнө уҙғарылғанда мин халыҡ алдында яҙыусының исемен йөрөткән урамды һәм уның эргә-тирәһендәге территорияны төҙөкләндерергә вәғәҙә бирҙем. Был, минеңсә, иң ҙур эшмәкәрлек буласаҡ һәм ул 2019 йылда тамамланасаҡ. Шулай уҡ төрлө әҙәби-мәҙәни саралар ойоштороласаҡ. Әлбиттә, республика ҡаҙанышы булған бөйөк шәхестең юбилейы федераль кимәлдә билдәләнеүе бик әһәмиәтле, был Өфө халҡы өсөн генә түгел, республика халҡы өсөн ҙур ҡыуаныс булырға тейеш.

➔ **Статистика мәғлүмәттәре буйынса баш ҡала предприятиеларында уртаса эш хаҡы 41 мең һумдан ашыу. Был һан нисек һәм нимәнән сығып билдәләнә?**

- Был сумма йәмғиәттә төрлө бәхәстәр тыуҙыра. Ҡалала 51 мең эшҡыуарлыҡ предприятиеһы теркәлгән. Улар - шәхси эшҡыуарҙар, бәләкәй һәм урта бизнес. Ғәмәлдә, мин эре һәм урта предприятиелар тураһында һүҙ йөрөтәм. Улар яҡынса 250 предприятие. Уларҙа эш хаҡы яйлап үҫеүгә табан бара. Нигеҙҙә был күренеш предприятиеларҙың гарантиялы заказдарҙы үтәүенә бәйле. Ҡайһылары хатта 2022 йылға тиклем заказ менән тәьмин ителгән. "Ростех" предприятиеһы яҡшы үҫешә, унда 36 меңдән ашыу кеше эшләй. "Башнефть" компанияһының хәле яҡшы. Шуға, ундай компаниялар үҙ эшселәренең эш хаҡын арттырыуға йүнәлеш ала. Әлбиттә, урта һәм бәләкәй бизнеста хәлдәр ауырыраҡ, сөнки уларҙа эшселәр ғәмәлдә күләгәле эш хаҡын алғанлыҡтан, анык сумманы асыҡлау мөмкин түгел. Был йәһәттән беҙҙең маҡсат - эш хаҡын күләгәнән сығарыуға өлгәшеү.

➔ **Һеҙҙең йыллыҡ эшмәкәрлегегеҙ тураһында отчет биреүегеҙ алдынан ҡайһы бер мәғлүмәт саралары ҡала Советы депутаттарының уны ҡабул итмәү ихтималлығы тураһында фараз итте. Быға нисек ҡарайһығыҙ?**

- Был традицияға әйләнеп бара шикелле, һәр отчетым һайын шундай һүҙҙәр ҡуйыра. Быға тыныс ҡарайым, сөнки ниндәй генә кимәлдә булмаһын, депутаттар халыҡ менән асыҡтан-асыҡ эшләүҙән тыш, кулуар эшмәкәрлеген дә алып бара, йәғни ниндәйҙер ҡарашты яҡлай. Әлбиттә, депутаттар ниндәйҙер консультациялар уҙғара, үҙҙәре лә халыҡ, бизнес-структуралар, партиялар, Хөкүмәт, республика Башлығы аппараты вәкилдәре менән осрашып, консультация ала. Был ғәҙәти күренеш. Шуға күрә, депутаттар корпусына бер ниндәй шигем булманы. Уларға һәр саҡ ышанам, һөйләрлек, күрһәтерлек уңыштар булғанда улар объектив тауыш бирергә тырышасаҡ, сөнки үҙҙәренә лә халыҡ алдында яуап тоторға кәрәк.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Уңайлы ҡала мөхите булдырыу буйынса һәм "Яңы ҡала киңлеген - "Ватан" паркын булдырыу" проекты сиктәрендә сараларҙы тормошҡа ашырыуҙа әүҙем ҡатнашҡаны өсөн Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов "Иң яҡшы муниципаль практика" Бөтә Рәсәй конкурсының Рәхмәт хаты менән наградланды.

✓17 февралдә "Аҡбуҙат" ипподромында Өфө ҡала хакимиәте башлығы кубогына VI Өфөнөң Ҡышҡы корпоратив уйындары үтә. Программала быйма кейеп хоккей уйнау, ҡар өҫтөндә волейбол, саңғы уҙыштары (эстафета), конькиҙа уҙыш (эстафета), пейнтбол элементтары менән күңелле стартар ҡаралған. Сара сәғәт 12-лә башлана. Шунда уҡ Масленица ла байрам ителәсәк.

✓Өфөлә балаларҙың "Йондоҙсоҡ" Беренсе республика шахмат фестивале уҙҙы. Конгресс-холда мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында тәрбиәләнеүселәр осрашты. Фестивалдә республиканың 10 район һәм ҡалаһынан килгән 72 малай, 19 ҡыҙ ҡатнашты. Иң йәш ҡатнашыусыға 4,5 йәш ине. Ҡыҙҙар араһынан беренсе урынды Красноусольскиҙан Йәсминә Әбдрәшитова яулаһа, малайҙар араһында - Өфөнән Дмитрий Кузнецов.

✓"Глобус" Балалар ижады үҙәгендә "Төньяҡ амурҙары" традицион яндан атыу буйынса клуб асылды. Сара барышында Үҙәктең уҡсылар клубы етәксеһе Урал Мортазин менән "Мәргән уҡсы" традицион яндан атыу һәм һыбай килеш уҡ атыуҙы үҫтереү буйынса ойошма рәйесе Юлай Ғәлиуллин йыйылыусыларға оҫталыҡ дәресе күрһәтте.

✓Баш ҡалала "Заманса ҡала мөхитен формалаштырыу" дәүләт программаһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә йәмәғәт территорияларын төҙөкләндереү буйынса дизайн проекттарын эшләү дауам итә. Шулай уҡ уларҙы әҙерләүсе эксперттарҙы һәм ойошмаларҙы һайлау ҙа бара. 1 мартта улар йәмәғәтселек хөкөмөнә сығарыласаҡ.

✓"Аҡбуҙат" ипподромында Бөтә Рәсәй "Рәсәй саңғы юлы - 2018" ярыштары үтте. Ҡатнашыусыларҙы Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов менән бергә РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров, Наганолағы Олимпия уйындарының биатлон буйынса бронза призеры Павел Мөслимов, Ванкуверҙағы Олимпия уйындарының биатлон буйынса бронза призеры Максим Чудов тәбрикләне.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КАНДИДАТТАРҘЫ ТЫҢЛАЙЫҠ

**Башҡортостанда Рәсәй Президенты вазифаһына кандидаттар һәм уларҙы күрһәткән сәйәси партиялар өсөн бушлай эфир ваҡыты бүленде.**

Бушлай ваҡыт һигеҙ теркәлгән кандидат һәм уларҙы күрһәткән ете сәйәси партия араһында бүленде. Сәйәси партия вәкилдәре һәм кандидаттарҙың ышаныслы кешеләре Башҡортостан Республикаһында таратыу менән "Рәсәй-1" һәм "Рәсәй-24" телеканалдарында, "Рәсәй радиоһы", "Маяк", "Вести ФМ" радиоканалдарында, Башҡортостан юлдаш телевидениеһында, "Юлдаш", "Спутник ФМ" радиоканалдарында ваҡытты бүлеп алды. "Һәр телерадиоканалға агитация уҙғарыу өсөн 510 минут ваҡыт бүленә. Рәсәй Президентын һайлауҙа бушлай агитация осоро 19 февралдә башлана һәм 16 мартҡа тиклем дауам итә. Эфир ваҡытының яртыһы, 255 минут, кандидаттарға уртаҡ агитация саралары, мәсәлән, дебаттар, өстән бер өлөшө кандидаттар күрһәткән сәйәси партияларға агитация материалдарын ҡуйыуға бүленә һәм ҡалған өлөшө - 85 минут кандидаттарға һайлау алды агитация роликтары урынлаштырыу өсөн бирелә", - тип һөйләнә партия вәкилдәренә "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһының баш юрисконсульты. Шыбаға тартыу барышында Үҙәк һайлау комиссияһы вәкилдәре һайлау алды агитацияһы сиктәрендә булған сикләүҙәр хаҡында хәтергә төшөрҙө. Улар иҫәбендә - икенсе кандидатҡа ҡарата кире фекер әйтеү, агитация материалдарында балиғ булмағандарҙың һүрәттәрен ҡулланыу, милли һәм дини ыҙғыш тыуҙырыу тыйыла. Ниндәйҙер бер кандидат уртаҡ агитация сараларын уҙғарыуҙан баш тарта ала, әммә бынан башҡа кандидаттарҙың эфир ваҡыты кәмемәйәсәк, ә уның ваҡыты был уртаҡ сарала ҡатнашыусылар араһында бүленәсәк. Агитация материалының йөкмәткеһе тыйыуға инһә, телерадиокомпаниялар кандидаттарға хәбәр итә һәм үҙгәрештәр индереүгә көнәш бирә. Бәхәс килеп тыуғанда, һәр аныҡ осраҡты Үҙәк һайлау комиссияһының мәғлүмәти бәхәстәр буйынса эшсе төркөмө тикшерә.

# КИЛӘСӘК - ЙӘШТӘР ҠУЛЫНДА

**Ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Өфө дәүләт нефть техник университетында булып, йәштәрҙең әүҙем вәкилдәре менән осрашты. Сара "КУРС - 2018" Йәштәр белем биреү форумы сиктәрендә үтте.**

Бөгөн баш ҡалала 30 йәшкә тиклемгә 475 мең кеше йәшәй. Был Өфө халҡының дөйөм һанының 42 процентынан ашыуыраҡ. 14 йәштән 30 йәшкә тиклемгеләр - 280 меңдән күберәк. Улар - тап йәштәр сәйәсәте әүҙем тормошҡа ашырылған категория вәкилдәре. Осрашыу барышында Өфөнөң йәштәр ойошмаларының эшмәкәрлеге һуңғы йылдарҙа алға китеүе, йәштәрҙең тыуған ҡалаһының абруйын Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара фәнни конференцияларҙа, олимпиадаларҙа, ижади конкурстарҙа һәм грант форумдарында күтәреүе билдәләнде.

Ирек Ялалов йәштәрҙе борсоған һорауҙарға яуаптар бирҙе. Һорауҙар, нигеҙҙә, ирекмәндәрҙе дәртләндереү, баш ҡаланы төҙөкләндереү, ҡалала йәшәүсе йәш ғаиләләрҙе социаль яҡлауҙың өҫтәмә сараларына ҡағылды. Атап әйткәндә, әүҙем ирекмәндәр "Изгелек аллеяһы" проектына, ирекмәнлекте сағылдырған символ - асыҡ устар ҡуйылған ағас урынлаштырыуҙы, 25 йылдан һуң киләсәк ирекмәндәргә төбәп яҙылған мөрәжәғәтнамә һалынған ваҡыт капсулаһын һалыуға ярҙам итеүҙе һораны. Бынан тыш, йәштәр ҡаланың төньяҡ райондарын төҙөкләндереү мәсьәләһе менән ҡыҙыҡһынды. Ирек Ялалов бынан ике йыл элек Калинин һәм Орджоникидзе районларын үстереүгә алынған йүнәлештең дауам итәсәген белдерҙе. Был "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" өстөнлөклө проекты сиктәрендә юлдарҙы ремонтлау. Былтыр ошо программа нигеҙендә ремонтланған юлдарҙың яртыһы тиерлек ҡаланың төньяғына тура килә. Быйыл да был тренд һаҡланасаҡ.

# ГЕОГРАФИК СИК ҠАЙҘА?



**2016 йылдан Өфө ҡалаһы Гиннестың рекордтар китабында Европаның географик сик нөктәһе тип раҫланған.**

Шунан алып Европаны Көнсығыштан Көнбайышҡа йәки Көнбайыштан Көнсығышҡа киҫеп үтеү буйынса барлыҡ рекордтар тап Өфөлә - Башҡортостандың баш ҡалаһында башлана йәки тамамлана. Европаның көнбайыштағы сик нөктәһе булып Португалиялағы Рок мороно тора. Ошо көндәрҙә был фактҡа Рус географик йәмғиәте ағзаһы Дмитрий Юрьевич Ерохин иғтибар итә. Был турала ул социаль селтәрҙәрҙәге үҙенең сәхифәһенә: "Һәр ҡала өсөн бындай ваҡиғалар мөһим, ә уны Гиннестың рекордтар китабы кеүек донъялағы абруйлы ойошма раҫлай икән - ул бигерәк тә әһәмиәтле", - тип яҙа һәм Өфө ҡала хакимиәтенә мөләжә файҙаланып, баш ҡалала Европаны үтеү буйынса рекорд ҡуйырға теләүселәр старт алырға тейешле урынға билдә йәки стела ҡуйырға тәҡдим итә.

Сираттағы оператив кәңәшмәлә Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ошо темаға туҡталып, идеяның көнүҙәк һәм оригиналь булыуына иғтибар йүнәлтте. "Спортсылар һәм спорт яратыусылар теге йәки был дистанцияны йәйәү, велосипедта, автомобилдә үтеү өсөн үҙҙәренә бурыс ҡуя. Шуға күрә тәҡдимде бик ҡыҙыҡлы тип һанайым. Ҡалала Өфө почтамты эргәһендә "Нуленсе километр", ҡаланың төньяҡ-көнсығыш сигендә билдәле Себер тракты башланған ерҙә "Өфө саҡрымы" бар", - тине Ирек Ялалов, Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы менән Баш архитектура идаралығына был мәсьәләне иғтибарға алырға йөкмәтте. Уның билдәләүенсә, фекер алышыуға шулай уҡ йәмәғәтселек - ябай граждандар, крайҙы өйрәнеүселәр, билдәле спортсылар һәм экспарттар, Гиннестың рекордтар китабы менән әүҙем хеҙмәттәшлек итеүсе рекордсмендар һәм идея авторы Дмитрий Ерохин йәлеп ителәсәк. Ә инде билдәне урынлаштырыу урыны турағында һүҙ йөрөткәндә, Гиннесс ҡағиҙәләре буйынса, старт йәки финиш нөктәһе булып тимер юл вокзалы тора. Тимәк, объект Өфөнөң Совет районында урынлашасаҡ.

# ТАУЫШ БИР!

**Был аҙнала муниципалитетта "Комфортлы ҡала мөхитен формалаштырыу" федераль проекты сиктәрендә йәмәғәт урындарын төҙөкләндереү буйынса тауыш биреүҙе ойоштороу мәсьәләһенә арналған йәмәғәт комиссияһы ултырышы үтте.**

2017 йылдың 29 декабренән алып 2018 йылдың 27 ғинуарына тиклем ҡала халҡы ниндәй йәмәғәт урындарының төҙөкләндереү талап итеүе турағындағы фекерҙәре менән уртаҡлашты. Бөтәһе 3061 ғариза ҡабул ителгән һәм уларҙы ҡарап сығып, 10 объекттан торған исемлек төҙөлгән. "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял итеү паркы, "Тулҡын" скверы, Максим Рыльский урамы, Өфө йылғаһы яры, "Нефтехимик" мәҙәниәт һәм ял итеү паркы, Непейцев дендропаркы, Якутов исемендәге парк, "1 Май" паркы, "Дим" мәҙәниәт һәм ял итеү паркы, "Таш йылға" скверы - әлегә исемлек ошо объекттарҙан тора. 18 мартта ҡаланың 292 майҙансығында халыҡтан һорау алыуҙар үткәргәндән һуң, быйыл төҙөкләндереү үтәсәк объекттар һайлап алынасаҡ. Өфөләр проект менән хакимиәттең рәсми сайтында "Комфортлы ҡала мөхитен формалаштырыу" тигән бүлектә таныша ала. Унда тәүге этапта һайлап алынған объекттарҙы картанан ҡарарға була. Киләһе турҙы үткән объекттарҙың дизайн-проекттары ла ошо бүлеккә урынлаштырыласаҡ, ошонда уҡ фекер алышырға мөмкин буласаҡ.

ХОҠУҒЫҢ...



# ТЕРКӘТЕП ҠУЙ!

**2018 йылдың 1 мартында шәхси торлаҡ йорттар (ИЖС) өсөн "дача амнистияһы" тамамлана.**

Тап ошо көнгә тиклем дәүләт кадастр иҫәбе һәм дәүләт хоҡуҡ теркәүе техник план нигеҙендә башҡарыла. Тик техник план составына төҙөлөшкә рөхсәт ҡағыҙы ла инергә тейеш. Әгәр ҙә "дача амнистияһы" оҙайтылмаһа, 1 марттан һуң хоҡукты теркәү өсөн объектты эксплуатацияға индереүгә рөхсәт алырға кәрәк буласаҡ.

Билдәләнгән был ваҡыт шәхси торлаҡ төҙөлөшө объекттарына ҡуйылған. Баҡсасылыҡ, үҫемлекселек, дача хужалығы өсөн бирелгән ер участкаларын, шулай уҡ был участкаларҙа төҙөлгән баҡса йорттары, хужалыҡ төҙөлөштәре, мунса, шәхси гараждарҙы 2020 йылдың аҙағына тиклем теркәргә мөмкин.

Шулай итеп, ябайлаштырылған тәртип менән йәшәп ятҡан йортоғоҙға хоҡуғығыҙҙы теркәтергә уйлайһығыҙ икән, 1 мартҡа тиклем документтар тапшырып өлгөрөгөҙ. Уны МФЦ офистарында, шулай уҡ электрон формала Росреестр порталында тапшырырға мөмкин. Түбәндәге документтар кәрәк буласаҡ:

1. Бер юлы дәүләт кадастр иҫәбе һәм дәүләт хоҡуҡ теркәүе турағында ғариза. Уны документтарҙы ҡабул итеүсе тултыра.
2. Төҙөлөшкә рөхсәте ҡушымтаһы булған законға ярашлы төҙөлгән техник план. Был документты кадастр инженеры эшләй.
3. Әгәр ҙә ергә хоҡуғығыҙ Күсемһеҙ милектең берҙәм дәүләт реестрында теркәлмәгән булһа, ер участкаһына хоҡуғығыҙҙы раҫлаған документтар.

Бынан тыш, РФ Һалым кодексында ҡаралған дәүләт пошлинаһын (физик шәхес өсөн - 350 һум) түләргә кәрәк. Кадастр иҫәбенә индереү һәм хоҡукты теркәү процедуралары икеһе айырым эшләнһә, 7 һәм 5 эш көнө, бер процедура итеп эшләнһә, 10 эш көнөндә әҙер була. МФЦ аша тапшырылған документтарҙың әҙер булыу ваҡыты тағы ла 2 көнгә оҙая.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Талсығыуҙан

❖ 1 ҡалаҡ бөпкә үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, таҫтамалға урап, ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр, ашар алдынан 1-2 ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы - 14-21 көн.

❖ 2 ҡалаҡ ҡыҙылхан (кипрей) үләненә ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 1-2 минут ҡайнатырға. Уттан алып, тағы 30 минут төнәтергә. Ашарҙан ярты сәғәт алда, яртышар стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 2-3 аҙна.

❖ 10 грамм киптерелгән юл япрағы үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 2-шәр ҡалаҡ эсергә. 15-20 көн дауаланырға.

❖ Ярты кг әстерхан сәтләүеге, 300 грамм бал, 100 мл алоэ һуты, 3-4 лимондың һуты. Бергә ҡушып болғатҡас, көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ ашарға.

❖ 1 ҡалаҡ базилик үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә. Сәй кеүек эсергә, бал ҡушырға ла ярай, тик көнөнә 2 тапҡырҙан артыҡ эсмәгеҙ.

❖ 1 ҡалаҡ ҡырҡбыуын (хвощ) үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә. 1 стакан төнәтмәне 4 өлөшкә бүлеп, көнөнә 4 тапҡыр эсергә. Дауаланыу курсы - 21 көн. Ул организмды таҙарта, һөҙөмтәлә, арыу ҙа юҡҡа сығасаҡ.

## Нервы ауырыуҙары

❖ Был сара тынысландырыусы булараҡ, хроник арыу, күтәренке нервы ҡуҙғыусанлығы ваҡытында ҡулланыла. 10 грамм балан ҡайырыһына 5 грамм мелисса япраҡтары өҫтәп, 1 стакан ҡайнар һыу өҫтәргә. Талған утта 20-30 минут ҡайнатып, ярты сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. 7 көн дауаланғас, ял итеп алырға һәм дауаны ҡабатларға.

❖ 2 ҡалаҡ балан, 2 балғалаҡ вахта үләне япрағы, 2 балғалаҡ бөтнөк япраҡтары, 3 балғалаҡ айыу ҡурайы (дягил) тамыры, 1 балғалаҡ бесәй үләнен (валериана) ҡушып болғатырға. 1 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр стакан эсергә.

Айбикә ЯҠУПОВА.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Мосолмандарҙың көсәйгәне

Ҡөрәйш ғәскәренең Мәҙинәнән китеүе була, ҡаланы һаҡлаусы өс мең яугир ҡурайза ҡәғбәһенә юллана. Ҡурайза ырыуы бер ҡайҙан да ярҙам өмөт итә алмай, уларҙың ете йөҙләп ирҙәренең өс мең кешегә ҡаршы тора алмауы, яу һөнәрен һәйбәт белгән мосолман яугирҙарының уларҙы ҡырып һаласағы көн кеүек асыҡ була.

Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙ ғәскәренә һөжүмгә күсеү әмере бирмәй, ҡәлғә эргәһендә туҡталып, көтөргә ҡуша. Шунан һуң аус ырыуы шәйехтәренең береһен ҡурайзаларға илсе итеп ебәреп, уларға бирелергә ҡуша, сөнки ҡурайза ырыуы аустарҙың ерендә йәшәй. Ләкин был шәйех, ни өсөндөр, Мөхәммәт бәйғәмбәргә ҡаршы эш эшләп ташлай - ҡурайза аҡһаҡалдары унан: "Бирелһәк, Мөхәммәт бәйғәмбәр беҙҙе ни эшләтер икән?" - тип һорағас, өндәшмәй генә усы менән боғаҙы аша үткәрә. "Үлтерәсәк", - тигәнде аңлата был. Бынан һуң ҡурайзалар, әлбиттә, бирелеүҙән баш тарта. Шәйех үҙе мәсеткә барып йәшенә лә, бик күп ваҡыт унан сыҡмай. Бер нисә ай үткәс кенә Мөхәммәт бәйғәмбәр уны ғәфү итә, һәм уны мәсеттән сығарып алалар.

Ҡурайза ырыуы аҡһаҡалдары Мөхәммәт бәйғәмбәргә ошондай шарт ҡуя: улар монафиҡтарҙың ерендә түгел, ә аус ырыуының ерендә йәшәгәнлектән, уларҙы аус ырыуы башлығы Сәәд ибн Мөәҙ генә хөкөм итергә хаҡлы. Мөхәммәт бәйғәмбәр быға риза була һәм Сәәд ибн Мөәҙ ниндәй генә хөкөм сығармаһын, шуға ризалашырға вәғәҙә бирә. Бынан һуң ҡурайзалар ҡорал һала һәм уларҙы Мәҙинәгә хөкөмгә алып китәләр. Ләкин ҡурайзалар Мөхәммәт бәйғәмбәр белгән бер нәмәне белмәй - элек ҡурайзаларға ҡарата бик итәғәтле булған Сәәд ибн Мөәҙ ҡөрәйштәр менән яуҙа ҡаты яралана һәм үлем түшәгендә ята. Аус ерҙәрендә йәшәп тә, ауыр ваҡытта ярҙамға килмәгәндәре өсөн уларға бик нәфрәтле була ул. Үҙ үлеменең сәбәпселәре тип иҫәпләй. Майҙанға ул үҙе атлап килә алмай - ишәккә атландырып, ике яҡтан тотоп алып киләләр. Уның хөкөмө лә аяуһыҙ була: хыянатсыларҙың ирҙәрен үлтерергә, ҡатын-ҡыҙҙары менән балаларын ҡоллоҡҡа һатырға. Мосолмандар Сәәд ибн Мөәҙҙең хөкөмөн ерене еткереп үтәй. Ҡурайза ирҙәре үлтерелә, ҡатын-ҡыҙҙары менән балалары ҡоралға алмаштырыла.

Әйтергә кәрәк, Сәәд ибн Мөәҙ ҡурайзаларҙы боронғо, мәжүси ҡанундар буйынса хөкөм итә. Был яза тураһында хәбәр тиҙ арала башҡа ырыуҙарға тарала. Һәм бынан һуң башҡалар, бирелергә булһа, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең үҙенә генә бирелергә тырыша. Сөнки мосолмандар мәжүсиҙәргә ҡарағанда әсир дошмандарға ҡарата йомшағыраҡ саралар ҡуллана.

Был ваҡиғаларҙан һуң бер нисә көн үтеүгә Сәәд ибн Мөәҙ үҙе лә донъя ҡуя.

Ике айҙан һуң Мөхәммәт бәйғәмбәр Зәйнәб исемле утыҙ һигеҙ йәшлек бик матур ҡатынға өйләнә. Зәйнәб бынан алда ғына Зәйедтән айырылған була. Зәйед тә, Зәйнәб тә икеһе лә иҫ китмәле һәйбәт кеше була, шуға ла ҡасандыр Мөхәммәт бәйғәмбәр уларҙы көсләп тиғәндәй өйләндерә. Тик улар бер-береһе менән йәшәй алмай. Зәйнәб сығышы менән ҡөрәйш ырыуының затлы нәҫеленән була һәм сығышы буйынса үҙенән күпкә түбән торған, ул ғына ла түгел, ҡасандыр ҡол булып та алған Зәйед менән бергә йәшәүҙе үҙе өсөн кәмһенеү тип һанай. Шуға ла Мөхәммәт бәйғәмбәргә ул шатланып кейәүгә сыға.

Ҡурайза ырыуы юҡҡа сыҡҡандан һуң Мәҙинәлә мосолмандарға ҡаршылыҡ күрһәтерлек көстәр ҡалмай. Мәжүсиҙәрҙең байтағы мосолман динен ҡабул итә. Монафиҡтарҙың да күбеһе Мөхәммәт бәйғәмбәргә ҡушыла, ҡалғандары инде сәйәси көс тәшкил итә алмай. Ҡурайзаларҙан ҡалған байлыҡҡа ҡорал, аттар һәм дөйәләр һатып алына. Бынан һуң мосолман ғәскәре бөтөн Ғәрәбстанда иң ҡеүәтле хәрби көскә әйләнә. Күсмә ырыуҙар Мәҙинәгә илселәрен ебәреп, ҡөрәйштәр менән араларын өҙөүҙәре тураһында хәбәр итергә ашыға, күбеһе мосолман динен ҡабул итә.

(Дауамы бар).

ЙӘШТӘР - ЙӘШТӘРСӘ

# ҮҘ ЭШЕНЕҢ ОҪТАЛАРЫ...

## һәр ерҙә кәрәк




**Ошо көндәрҙә республиканың Өфө, Сибай, Нефтекама, Бәләбәй, Стәрлетамаҡ ҡалаларында "Йәш профессионалдар" ("World Skills") III төбәк чемпионаты уҙғарылды. Чемпионатта 37 компетенция буйынса барлығы 242 кеше һөнәри оҫталыҡ кимәлен һынаны.**

Донъя кимәлендәге "Йәш профессионалдар" коммерция булмаған ассоциация үткән быуаттың илленсе йылдарынан алып ойошторолған һәм уның эшендә әлеге көндә 78 ил ҡатнаша. 2012 йылда Рәсәй был ойошма составына ингәс, Башҡортостандың да эшсе һөнәрҙәре үҙләштергән йәштәренә һөнәри оҫталыҡтарын камиллаштырырға, донъя кимәлендәге ярыштарҙа ҡатнашырға, тәжрибә туплауға һәм үҙҙәре һайлаған һөнәр буйынса уңыштар ҡаҙанырға тағы бер мөмкинлек асылды. Чемпионатта Башҡортостандың төрлө һөнәри колледждарынан, Әстерхан, Екатеринбург, Ҡаҙан, Тольятти, Ярославль, Әлмәт ҡалаларынан һәм Мәскәү өлкәһенән ҡатнашыусылар килде. Чемпионатта "Ижад һәм дизайн", "Транспорт һәм логистика", "Информацион һәм коммуникацион технологиялар", "Производство һәм инженер технологиялары", "Төҙөлөш һәм төҙөлөш технологиялары", "Хеҙмәтләндереү өлкәһе" йүнәлештәре буйынса өс көн дауамында ярыш барҙы. Шулай уҡ 14-16 йәшлек үҫмерҙәр ҙә "Йәштәр лигаһы"нда мәктәпкәсә белем биреү, эшҡыуарлыҡ, график дизайн, лаборатор химик анализ компетенциялары буйынса ярыша алды. Чемпионат һөҙөмтәләре баш ҡаланың "Йәштәр һарайы"нда иғлан ителде. Еңеүселәрҙе БР Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов, БР мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова, БДАУ ректоры Илдар Ғәбитов һәм республикалағы алдынғы етештереүсе предприятиеларҙың вәкилдәре тәбрикләне.

- Бергә ошо етди эште башҡарыуығыҙ өсөн Республика Хөкүмәте исеменән рәхмәт һүҙҙәрен еткерергә рөхсәт итегеҙ, - тине БР Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов. - Һәр кем юғары уңыштарға өлгәшә ала, бының өсөн һеҙҙең талант, эшһөйәрлек, остаздарығыҙҙың һүҙенә ҡолаҡ һалыу талап ителә. Башҡортостандың "World Skills" хәрәкәтенә ҡушылыуына 3 йыл ғына булыуға ҡарамаҫтан, бөтә донъяға беҙҙең илдә тормошҡа ашырылыҡ ҙур потенциал барлығын иҫбат итә алдыҡ. Элекке йыл ни бары ун компетенция буйынса йәштәрҙе әҙерләп, һәр береһен ҡатнашырға өгөтләп торһаҡ, бөгөн милли чемпионатҡа командалар туплап ебәрә алабыҙ һәм был залда ҙур еңеүҙәргә өлгәшкән йәштәребеҙ бар. Яҡын киләсәктә барығыҙҙың да донъя кимәлендәге еңеүҙәргә өлгәшеүегеҙҙе теләйем.

Әйткәндәй, Салауат Тәлғәт улы Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡабул иткән ҡарарға ярашлы, "World Skills" хәрәкәтендә юғары уңыштарға өлгәшкән йәштәргә тейешле аҡсалата премия булдырылыуы тураһында белдерҙе һәм түүге бүләкте былтыр Абу-Дабиҙа үткәрелгән "World Skills" һөнәри оҫталыҡ буйынса донъя чемпионатында бронза миҙал яулаусы Сибай күп профилле һөнәри колледжы студенты Рафаэль Яхинға тапшырҙы.

"Йәш профессионалдар" чемпионатында ҡатнашҡан йәштәр менән ярыш барышында күп аралашып булмағайны, сөнки билдәләнгән ҡағиҙәләргә ярашлы, улар ҡыҫҡа тәнәфестәргә тамаҡ ялғап алыу өсөн генә туҡтаны. Башҡа ваҡытта бары тик экспертар ғына уларҙы күҙәтеп ултырҙы. Өфө статистика, информатика һәм иҫәпләү техникаһы колледжында "Информацион һәм коммуникацион технологиялар" йүнәлешенең биш компетенцияһы буйынса ярыш майҙансыҡтары ойошторолдо. Махсуслаштырылған компетенциялар үҙәге етәксеһе Олег Агарков әйтеүенсә, "World Skills" хәрәкәтенең чемпионаттары колледждарҙа эшсе һөнәрен үҙләштереүсе йәштәргә тәү сиратта тәжрибә туплау өсөн кәрәк. Сөнки теоретик белем алыу бер, ә эш урынында шул белемде дөрөҫ ҡуллана белеү бөтөнләй икенсе. Әйткәндәй, был ярыштарҙа юғары күрһәткестәргә өлгәшкән йәштәргә уҡыуҙы тамамлағандан һуң эш урыны табыуы ла күпкә еңелерәк буласаҡ, сөнки оҫта ҡулдар бөтә урында ла кәрәк. "Селтәр һәм системаны идаралау" компетенцияһында беренсе урын яулаусы Октябрьский ҡалаһы нефть колледжының 4 курс студенты Айҙар Ниғмәтуллин был турала яҡшы белә, сөнки ул уҡыуҙан тыш, "Уфанет" компанияһында эшләп тә йөрөй. "Мин төбәк чемпионатында икенсе тапҡыр ҡатнашам, һәр ваҡыттағыса, эштәр бик ҡыҙыҡлы ла, ҡатмарлы ла булды. Хәҙер Рәсәй милли йыйылма командаһы составына инергә әҙерләнергә кәрәк", - ти Айҙар.

Йәш һөнәрселәрҙең эшен ғәҙел баһалауҙа ҡатнашҡан эксперттар ҙа чемпионат һөҙөмтәләре менән ҡәнәғәт булыуҙары, оҫта ҡуллы, үҙ эшен камил белгән йәштәр булыуы менән һоҡланыуын белдерҙе. Ҡаҙан ҡалаһынан саҡырылған төп эксперт Эмиль Сабитов менән әңгәмә-ләшкәндә, ул: "Ҡатнашыусылар өсөн әҙерләнгән эш биремдәре барыһы ла мөмкин тиклем тормошҡа яраҡлаштырылған. Мәҫәлән, "Бизнес өсөн программалар" компетенцияһында ярышҡан йәштәр тегеү продукцияһы етештергән компания өсөн бөтә кәрәкле функцияларҙы үҙ эсенә алған махсус программа төҙөй. Һөҙөмтәлә, ошондай компанияларға тәҡдим итерлек әҙер программа килеп сығырға тейеш. Конкурсанттар был заданиены бик яҡшы атҡарып сыға алды", - тип һөйләне. Ситтән килеп ҡарап торғанда, компьютер артында тик кенә ултырған кеүек тойолған конкурсанттар ысынында ябай кешегә аңлашылмаған бик күп төрлө махсус программаларҙа эшләй белә, үҙҙәре сайттар, предприятиеға кәрәкле системалы программалар эшләй, ҡатмарлы конструкторҙар төҙөй, хатта уйындар ҙа эшләй белә булып сыҡты.

"Йәш профессионалдар" чемпионаты тамамланғандан һуң, ошо көндәрҙә профориентацион программа буйынса ярыш майҙансыҡтарын ҡарап сыҡҡан уҡыусыларҙың фекерҙәренә ҡолаҡ һалдыҡ. Улар бер тауыштан: "Беҙ белгән уҡытыусы, табип, хоҡуҡ белгесе, иҡтисадсы һөнәрҙәренән тыш, әллә күпме ҡыҙыҡлы, яҡшы һөнәрҙәр барлығын белдек. Һәм ҡайҙа белем алырға кәрәк икәнен күрҙек", - тип яуап бирҙе. Ысынлап та, ҡайны саҡта беҙ күҙгә элмәгән, әммә көндәлек тормошта шул тиклем кәрәк булған һөнәрҙәр күп. "Йәш профессионалдар" III төбәк чемпионаты тағы бер тапҡыр үҙ эшенең оҫтаһы булған кеше һәр ерҙә кәрәкле булыуын һәм бөтә һөнәрҙәр ҙә бер тигеҙ мөһим икәнен төшөндөрҙө.

Сәриә ҒАРИПОВА.

*✓ Корпусты Гитлер дивизиялары ҡамауынан алып сығыу тактикаһы бер тауыштан Шайморатов ҡарамағына тапшырыла. Һәм Шайморатов был ҡатмарлы һәм үтә лә яуаплы бурысты уңышлы үтәй.*

*ҺҮНМӘҪ ДАНЛЫЛАР*

# ГЕНЕРАЛ ШАЙМОРАТОВ ҺӘМ...

## башҡорт атлылары тураһында хәҡиҡәти һүҙ

**Шайморатовтың данлы дивизияһы тураһында ҡәләм уйнатмаған журналист юҡтыр бөгөн. Һәм уларҙың барыһы ла тиерлек йә интернеттан күсереп алған, йә бығаса матбуғатта сыҡҡан яҙмаларҙан йолҡҡолап туплаған мәғлүмәттәрҙе файҙалана. Эҙләнеп, табып, етди көс һалып тороу замане түгел. Үлгәндәр һәм һәләк булғандар зарланмай, уларҙы яҡлаусы ла юҡ. Бөгөнгө гәзиттәрҙең үҙенсәлегенә таянып эш итә коллегалар: нимә яҙып баҫтырһаң да - "дөрөҫ". Бер кем инҡар итмәй, сөнки ул ваҡиғаларҙы артыҡ белгән кеше лә ҡалманы, тигәндәй...**

Ошо көндәрҙә ярайһы абруйлы ғына бер автор яҙғандарға күҙ йүгертеп сығырға булдым. Билдәле факт: 1941 йылдың декабрендә полковник Шайморатов Көнбайыш фронт командующийы Жуковтың бойороғона ярашлы, Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Мөхтәрәм автор раҫлауынса, был орден СССР Юғары Советы Президиумы Указына ярашлы бирелгән булып сыға. Ошо уҡ яҙмала теркәлеүенсә, "Шайморатов генерал" тип аталған йыр 1942 йылдың март айында яҙылған икән. Шайморатовҡа генерал-майор исеме 1942 йылдың 10 ноябрендә бирелгәнлеген белмәгәнлектән килеп сыҡҡан был хата, тип уйлап ҡуйҙым. Артабан дауам иткәндә, хата-уйҙырмаларҙың иҫәбе-һаны юҡлығына шаҡ ҡатаһың. Баҡтиһәң, 112-се Башҡорт атлы дивизияһы 1942 йылдың 2 июнендә һуғышҡа индерелгән, ул ваҡытта уҡ 16-сы гвардия дивизияһы тип йөрөтөлгән, имеш...

Икенсе бер коллеганың яҙмаларына ла туҡтап үтәйем. Әйтәйек, Миңлеғәле Шайморатовтың күп телдәр белеүе тураһында һөйләргә иткәнендә, ул инглиз телен дә һыу кеүек эскән, уның һуғышсан юлы 1919 йылда Буденный атлылары менән Колчакка ҡаршы һуғыштарҙа башланған, тип фәстергән. Билдәле булыуынса, легендар командарм С.М. Буденный Көнсығыш фронтта булмай. Шайморатов та уның армияһында байтаҡ һуң, Ҡаҙан кавалерия мәктәбендә уҡып сыҡҡас ҡына хеҙмәт итә. Батырлыҡтары өсөн Буденный ҡулынан исемле ҡылыс алып, был бүләкте ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем һаҡлап йөрөтә.

Шайморатовтың ғаилә хәленә килгәндә, ул ике тапҡыр өйләнә. Беренсе ҡатыны Людмила Степановна менән Октябрина исемле ҡыҙ бала үҫтерәләр. Утыҙынсы йылдар аҙағында Ҡытайҙа булғанында Шайморатов ғаиләһен дә үҙе менән алып китә һәм унда бер йыл бергә йәшәйҙәр. Унан һуң ул ғаиләһен Мәскәүҙә ҡалдырып торорға мәжбүр була. Үкенескә күрә, һәр саҡ хәрби юлда йөрөгән ирҙе ҡатыны көтмәй, икенсе кешегә әүрәй һәм уға тормошҡа сыға. Ҡыҙҙары Октябринаны ла әсә үҙе менән ала. Ошо хәлдән һуң



Шайморатов икенсегә өйләнә. Ҡатыны Ольга Павловнаның ҡыҙы Нинаны үҙ балаһылай итеп тәрбиә ҡыла. Ә әлеге мәҡәлә авторы, яңылышып, икенсе ғаиләһендә лә уның балаһы була, тип яҙа.

Беренсе авторҙың хаталары архив материалдарын ерена еткереп тикшермәй һәм ашыҡ-бошоҡ күсереп яҙыуҙан килеп сыҡһа, икенсе автор иһә кемдәндер ишеткән имеш-мимешкә генә таянған, буғай. Бына ошо еңел-елпелек, тарихи шәхестәребеҙ яҙмышына шулай аумаҡай ҡарау әрнетә йөрәкте...

Ошо урында туҡталып, Шайморатов дивизияһының 1942 йылдың май башында Тула һәм Орел өлкәләрендә, фронт шарттарына яраҡлаштырып, учениелар, күнекмәләр башлап ебәреүе тураһында ҡыҫҡаса ғына яҙып үтмәксемен. 112-се Башҡорт атлылар дивизияһы 8-се корпус составына инә, корпус командиры генерал-майор П.П.Корзун була. Ул корпус кимәлендә "Дивизии в обороне" тигән тема буйынса учение уҙғарырға уйлағас, Шайморатов дивизияһын һайлап ала (корпуста тағы ике - 21-се һәм 55-се кавдивизиялар була). Учение уңышлы үткәс, генерал Корзун бер төркөм командирҙарға һәм һалдаттарға, шул иҫәптән Шайморатовҡа ла рәхмәт белдерә. Артабан Корзун 25-се армия командующийы итеп күтәрелгәс, корпус командиры вазифаһына генерал-майор А.С. Жадов тәғәйенләнә. Ул учениеларҙы тамамлау осорона тап килә һәм шулай уҡ ыңғай фекер туплай, рәхмәттәр белдерә.

А.С. Жадов яҡташыбыҙ Шайморатовтың академияла уҡыған осорондағы яҡын дуҫы була. Фронт шарттарында ла улар ихлас мөнәсәбәттә аралашып йәшәй. Алексей Семенович Жадов дивизия командиры полковник Шайморатовҡа "генерал-майор" званиеһын юллау ҡағыҙҙарын үҙ ҡулдары менән яҙа һәм: "Документтарҙың тейешле урынға тотҡарлыҡһыҙ барып етеүен тәьмин иттем", - тип әйтә. Ошо 1942 йылдың авгусында, армия командующийы булып күсерелгәндә лә Шайморатовты күреп, хушлашып китеү мөмкинлеген таба.

Корпус командирҙарының барыһы ла булдыҡлы һәм юғары әҙерлекле булған, тип раҫларға урын бар. Артабан Жадов биләгән вазифаға полковник Лунев килә. Ул да үҙ урынында уңышлы эшләй һәм ул да Шайморатовҡа Ленин ордены юллап, документтар тултырта. Шайморатовҡа орден биреү тураһындағы тәҡдим ҡәнәғәтләндерелә, әммә ул генерал-майор Борисов мәленә тура килеп, яҡташыбыҙ ҡулына тапшырылмай ҡала. 1942 йылдың ноябрь башында командалыҡ итә башлай корпусҡа Борисов. 1 ноябрҙә дивизияға вәкәләтле һәм бай күстәнәсле Башҡортостан АССР-ы хөкүмәте делегацияһы килгәнендә Борисов оло ҡунаҡтар араһында була һәм Башҡорт дивизияһына ҡарата маҡтау һүҙҙәре яуҙыра.

1942 йылдың 10 ноябрендә Шайморатовҡа генерал-майор званиеһы бирелә һәм ул 8-се кавкорпус командующийының 1-се урынбаҫары итеп үрләтелә. Бәлки, уның вазифа баҫҡыстары буйынса үҫеүе бының менән генә сикләнмәҫ тә ине, сөнки Мәскәү Шайморатовтың командир һәләттәрен күргән һәм баһалаған бит. Әммә...

1943 йылдың февраль айында 8-се кавкорпус Девальцево районында була. Генерал Борисов "ауырып" китеү (йәғни, эскелек менән шөғөлләнеүе) сәбәпле, 19 февралдә хәрби ултырыш үткәреү һәм уны алып барыу Шайморатовҡа йөкмәтелә. Дөрөҫөрәге, дивизия командирҙары Чаленко һәм Якунин шуны талап итә. Корпусты Гитлер дивизиялары ҡамауынан алып сығыу тактикаһы бер тауыштан Шайморатов ҡарамағына тапшырыла. Һәм Шайморатов был ҡатмарлы һәм үтә лә яуаплы бурысты уңышлы үтәй. Архив документтарында ла был хаҡта: "Он выполнил эту задачу блестяще и с меньшими потерями", - тип яҙыла.

Ошо көндәрҙә Борисов һәм корпус штабы Башҡорт атлылары дивизияһына тағылып хәрәкәт итә һәм 23 февралгә ҡаршы төндә тейешле урынға килеп етә. Борисов иң ҡатмарлы ваҡытта командованиеның үҙ ҡулынан алынып, Шайморатовҡа тапшырылыуын кисерә алмай, әлбиттә. Ошо төндә уның мәкерле бойороғо буйынса 112-се (16) гвардия атлылар дивизияһы фашистарҙың ут һыҙығына ҡаршы барып, һәләк булырға тейеш була. "Впереди нас слабые части противника, разведка произведена. Идите вперед, не останавливайтесь!" тип әмер бирә Борисов Шайморатовҡа. "Ғәскәрҙең артта ҡалған өлөшөн туплайыҡ. Разведка үткәрәйек", - ти Шайморатов. "Выполняйте приказ. Не то..." - тип, иҫерек Борисов хатта биленән ҡоралын тартып сығара. Бында ла зирәк хәл итә Шайморатов. Дивизияны икегә бүлеп, икеһенә ике командир тәғәйенләп, үҙе бер нисә яугир менән немецтарҙың йәшерен ут һыҙығына ташлана. Дошмандың 67 орудиенан торған оборонаһының бер юлы хәрәкәткә килеүенә сәбәпсе була. Әгәр ҙә Борисов бойороғо буйынса эш итһә, данлыҡлы корпустан мәйеттәр өйөмө генә ятып ҡалыр ине. Ә корпус штабы тотошлайы менән немецтар ҡулына төшә. Юғары дәрәжәләге офицерҙар һәләк була, Борисов үҙе имен-аман пленға төшә...

**Фәрит ВӘХИТОВ.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

## БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Башҡорт-мадьяр концепцияһы

Макс Бриндт мадьярҙарҙың тәүге йәшәгән ерҙәре хаҡында аныҡ мәғлүмәттәр булмауы хаҡында яҙа. Һундарҙың көнбайышҡа табан хәрәкәтенән һуң тағы ла бер нисә йыл буйына Европаға халыҡтар ағылыуынан сығып, венгрҙарҙың 565 йылда хәҙерге Венгрияға барыуы хаҡында фаразларға мөмкин. Был хәрәкәт 796 йылда Пононияның яуланыуы менән тамамлана. Ателькузу ҡәбиләләре 9-сы быуат буйына хазарҙарға буйһоноп йәшәй. Сальмучиның (Альмустың) йәш улы Арпад 862 йылда һигеҙ ырыуҙан торған мадьяр халҡының Хазар ҡағаны итеп һайлана. Шулай итеп, Дунай буйында 886 йылда дәүләт барлыҡҡа килә.

739 йылда Маркварти Геродот ҡулланған "унгры" (ungari, гунгари, агарены) атамалары "Мадьяр" ҙың тәүге атамаһы булыуы хаҡында белдерә, сөнки славяндар һәм көнбайыш Европа ғалимдары артабан уларға ҡарата "уғырҙар" атамаһын ҡуллана башлай. Был артабан "унғыр" халҡының атамаһын "уғыр"ға үҙгәреүенә алып килә.

"Уғыр-башҡорттар" менән "уңғар-мадьярҙар" араһында бер ниндәй ҙә туғанлыҡ бәйләнеше юҡ, улар - икеһе ике халыҡ. Немец ғалимы Генрих Влислоцкий яҙыуынса: "Мадьярҙар оҙаҡ ваҡыт түбәнге Дунай тигеҙлектәрендә йәшәгән. Мөслим бен Әбү Мөслим әл-Ғәрим (830-845 йылдар тирәһе) мадьярҙарҙы башҡорттар менән бутай, Урал менән Каспий арауығындағы далаларҙа бәшәнәктәр, төньяҡта, Кама буйында Иҙел болғарҙары көн иткән. Уға эйәреп башҡа ғәрәптәр ҙә был ике халыҡты бутай. Шуның һөҙөмтәһендә Рәсәйҙең Көньяғында мадьярҙар тәүләп йәшәгән "Magna Hungaria" иле хаҡында легенда барлыҡҡа килә. Ысынында иһә, улар аландар, хазарҙар һәм болғарҙар менән күрше булып Азов диңгеҙе буйында, Кавказдың төньяҡ-көнбайышынан алып Ҡубанға тиклем ерҙәрҙә көн иткән. Башҡа ғалимдар IX быуатта уғыр-башҡорттарҙы өс өлөшкә бүлеп ҡарай: эсегтар, берсулалар, маджарҙар. Һуңғылары Себерҙән көнбайыш Себергә, Венгрияға китә.

Беҙ юрматы, юрмый башҡорт ырыуҙары өлөштәренең мадьярҙар менән берлектә Панонияла, уғыр ҡәбиләләре берлегендә йәшәү ихтималлығы хаҡында һүҙ алып бара алабыҙ, әммә улар араһындағы туғанлыҡ ептәре табылмаған. Хәҙерге көндә лә юҡ улар. 2014 йылдың 26 июнендә Башҡортостан телевидениеһының "Тамыр" каналында Венгрия Республикаһы хаҡында тапшырыу булды. Видеояҙмалар Будапешт ҡалаһында һәм уның янында 200 километр радиус майҙанда төшөрөлгән. Тапшырыуҙа күсмә тормош менән йәшәгән мадьяр-венгрҙарҙың тормошо асыҡ сағылыш таба. Был халыҡ вәкилдәре менән йәнле аралашыу, уларҙың музыкаһы, бейеүҙәре, йолалары, теле башҡорт халҡы менән ниндәйҙер уртаҡлыҡтың булмауын күрһәтә. Тапшырыуҙы ҡарағандан һуң тағы ла шундай һығымтаға киләһең: мадьярҙар һәм башҡорттар - икеһе ике төрлө халыҡ. Хәҙерге венгр телен анализлау мадьярҙарҙың иран телле ҡәбиләләр, икенсенән, палеотюрк телдәре (болғар, сувар, хазар) менән бер тамырҙан икәнлеген раҫлай.

**(Дауамы бар).**

*✓ Шул хаттар аша мин уның ниндәй кеше икәнлеген асыҡланым да. Тыуған яҡтарын өҙөлөп яратыуын, тәбиғәт күренештәрен күҙәтеүен, мәктәптәге эшенә бирелгәнлеген, ата-әсәһенә илтифатлылығын төшөндөм.*

# ХАЛЫҠ

## өйрәнеүсе һәм

**Беҙ билдәле кешеләрҙе, ғәҙәттә, уларҙың ижады һәм хеҙмәте аша ғына беләбеҙ. Ә шәхес булараҡ улар беҙҙең күҙҙән ситтә ҡала. Шундай әҙибәләребеҙҙең береһе - Сәрүәр Сурина. Был көндәрҙә уның менән осрашып, ошо рубрикала һөйләшеү өсөн сәбәбе лә табылды: ул матур ғына юбилейын билдәләне. Әммә Сәрүәр апай был һөйләшеүгә бик һаҡ ҡына килде, хистәргә бирелеп, ҡәҙерле кешеләремдең исемдәрен дә, хәтирәләрен дә рәнйетеп ҡуймайым, тине. Әммә һөйләшеү барышында ихлас асылып, күңелендә тағы ла күркәмерәк, һоҡланғысыраҡ донъя барлығын күрһәтте. Был донъя менән һеҙҙе лә таныштырабыҙ, дуҫтар.**

**Ниндәй кеше ул - Сәрүәр Сурина?**

- Бик ябай... яратырға теләгән кеше. Ғүмер буйы мин мөхәббәткә сарсап йәшәйем. Үҙемде яраталармы-юҡмы - униһында артыҡ эшем дә юҡ. Ҡабул итмәгәнде мин шундуҡ һиҙәм дә, ситләшәм. Мине яратмаған кешеләр араһына йөрөмәйем, яратмаған эште башҡармайым, яратмаған хәбәрҙе һөйләмәйем, яратмаған әҫәрҙе уҡымайым. Мин бына шундай әҙәммен. Ҡасандыр мине башҡалар белмәгән, мин дә уларҙы белмәгәнмен, тора-бара улар мине белмәгәндә лә, мин уларҙы белгәнмен. Хәҙер инде ғүмеремдең шундай этабына еткәнмен, күптәр мине белә һәм мин дә уларҙы беләм. Шунда ла мин тик яратҡандарҙы һәм үҙемә оҡшағандарҙы ғына һайлайым.

Тәүге хеҙмәт көнөмдән алып телевидениела эшләнем, башта ун өс йыл балалар һәм үҫмерҙәр өсөн тапшырыуҙар өлкәһендә, унан ун һигеҙ йыл "Хазина" ижад берекмәһендә, әлеге көнгәсә "Тыуған яҡты өйрәнеү һәм тарихи тапшырыуҙар" редакцияһында. Йәмғеһе утыҙ алты йыл телевидение журналисы булып йөрөлгән, был йәһәттән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһында рекорд ҡуйғанмын. Коллективымда "Сәрүәр Сурина үҙе яратҡанды һәм теләгәнде генә эшләй ул" тигән лаҡап та йөрөй. 36 йыл буйына бындай фекергә лайыҡ булғанмындыр инде, тип уйлайым. Ошо дәүерҙә етәкселегемдә ете генераль директор һәм әллә күпме телевизион студия директоры, режиссерҙар, мөхәррирҙәр алышынды, әммә береһе лә минең эшләргә теләгәнемә ҡаршы килмәне. Баҫым яһаусылар ҙа, икенсе юҫыҡҡа төшөрөргә теләгәндәр ҙә булманы түгел, әммә мин берәү менән дә ауыҙ күтәреп талашманым, хаслашманым, бары көлөп яуап бирҙем дә, үҙемдең юлымды дауам иттем. Һәм шул йомшаҡлығым менән еңдем дә. Ғөмүмән, миңә ошо "йылмайыу" ҡоралын бер дин әһеле өйрәтте. Бер "ударҙан" һуң төшөнкөлөккә бирелеп ултыра инем, көтмәгәндә кабинетҡа килеп инеп, "Ихлас сәләм - донъя асҡысы", тигән бер кәңәш ҡалдырып китте был ағай. Хәҙер шул аҡылды тотам, яман һүҙгә, яман ҡарашҡа көлөп кенә ҡарайым. Сарыф итмәйем энергиямды, ундайҙар янында йөрөргә лә тырышмайым. Ҡайҙа яратыу һәм хөрмәт бар - мин шунда.

**Һеҙ үҙегеҙ билдәле шәхес булыуҙан тыш, билдәле һәм абруйлы шәхестең - Артур Суриндың хәләл ефете лә булдығыҙ. Бындай ике кешенең осрашып-танышыуы, бергә йәшәүе нисегерәк булды икән?**

- Аллаһы Тәғәлә миңә тормош иптәше итеп бик яҡшы кешене ебәрҙе. Ә осрашыу шулай булды. Өфө - Сибай поезында бер төркөм ҡыҙҙар практикаға китеп барабыҙ. Йоматау станцияһында саңғы ярышынан ҡайтып барған егеттәр ултырҙы. Улар Йылайыр ауыл хужалығы техникумы студенттары икән. Егеттәр беҙҙең ун ике ҡыҙҙы уратып алып, бергәләп сәй эсеп, кәрт уйнап, уйын-көлкө менән бөтөн купены йәмләп, йәнләндереп барҙы. Ә мин уларҙы ситтән генә күҙәтеп, китап уҡып ултырҙым. Айырылышыр алдынан егеттәр беҙҙе үҙҙәренең уҡыу йортона ҡунаҡҡа саҡырҙы. Февраль айының сатлама һыуығында, хатта автобустар йөрөүҙән туҡтатылғанда, беҙ, ҡыҙҙар, егеттәр саҡырған ергә барырға әҙерләнеп бөткәйнек әле. Тик транспорт тапманыҡ, һәм ул юлы осрашыу килеп сыҡманы. Беҙҙең төркөмдән Тамара исемле курсташым Хәйбулла районының Әбеш мәктәбенә эшкә барҙы һәм күпмелер ваҡыттан һуң теге поезда осратҡан егеттәрҙең Артур атлыһынан сәләм алып килде. Сәләме артынса, тиҙҙән егет кеше үҙе лә Өфөгә килеп төштө. Телестудияға инеп, мине эҙләп тапты. Ихлас һөйләшеп киттек. Әйтерһең, бер-беребеҙҙе күптән беләбеҙ. Һәм шул саҡ бер ҡыҙыҡ хәл-асыш булды: ярты сәғәттәй аралашҡас, мин был кешенең күптән көткән буласаҡ ирем икәнлеген асыҡ ҡына аңланым да ҡуйҙым. Белмәйем, кем, нисек әшкәрткәндер был уйҙы, әммә мин уны ҡабул иттем һәм яҙмышымдың бындай боролошона буйһондом. Кискә, эшең тамамланыуға, килеп етермен, тип сығып китте Артур. Әйткән сәғәте-минуты менән ишек төбөндә тора ине инде. Урам буйлап киттек. Башта Телеүҙәктән Ауыл хужалығы институты ятағына хәтле йәйәүләп, уның Рәзилә тигән һеңлеһенә барҙыҡ, шунан минең Фәрҙәнә һылыуыма - педагогия институты ятағына юлландыҡ. Шулайтып, беренсе көндә үк туғандарыбыҙ менән дә таныштырыштыҡ. Өсөнсө көндә Артур миңә өйләнешергә тәҡдим яһаны. Мин ризалаштым. Йәрәшелгән йәр булып, шул статуста бәхетле мәлдәр кисереп, хаттар алышып торҙоҡ. Шул хаттар аша мин уның ниндәй кеше икәнлеген асыҡланым да. Тыуған яҡтарын өҙөлөп яратыуын, тәбиғәт күренештәрен күҙәтеүен, мәктәптәге эшенә бирелгәнлеген, ата-әсәһенә илтифатлылығын, күп һанлы туғандары өсөн өҙөлөп тороуын төшөндөм. Шулай итеп, барыһы ла ыңғай һәм уңайлы ҡоролоп, биш айҙан никах уҡытып, өйләнешеп ҡуйҙыҡ.



**Телевидениелағы бөткөһөҙ командировкалар, йәмәғәт эштәре, ижад емештәре, шуларҙың араһында дүрт бала - быларҙың барыһын бергә ҡушһаң, бер ҡатын ғүмеренә артыҡ күп булып китә түгелме? Нисек өлгөрҙөгөҙ барыһына ла? Ғаилә мәшәҡәттәренә ваҡыт ҡалдымы?**

- Бер-бер артлы ике улыбыҙ тыуҙы. Балалар бәләкәй, эштән арып ҡайтам, етмәһә, өйөбөҙҙән кеше өҙөлмәй, өлгөрә алмай йөҙәйем... Шундай саҡтарҙа ирем: "Әйҙә, ултыр әле, һөйләшеп алайыҡ", - тип ҡаршыһына ултыртып, иңбашымдан ҡосоп, арҡамдан ҡағып, күҙҙәремә яратып ҡарап, яҙып-әпәүләп ала ине. Хатта һөйләшкең килмәгәндә лә, ул һине ташламай, насар кәйефең менән яңғыҙ ҡалдырмай ине.

Ун өс йыл ятаҡта йәшәнек. Бер ҙә уфтанманым. Үҙем бикләп сығып китәм, асып килеп инәм. Ирем яҡшы, балаларым һау. Артур бик ҙур коллективта - Өфөнөң 2-се педагогия училищеһында эшләне, етәкселек итте. Коллегалары, дуҫтары, туғандары яратты, хөрмәт итте үҙен. Уның янында һәр ваҡыт кемдәрҙер булды, кемдәрҙер эҙләп килде, һүҙенә, кәңәшенә мохтаждар, ярҙамына өмөт итеүселәр, йылы һүҙенә сарсаусылар аҙ булманы. Ишек төбөбөҙгә бик йыш йәшәр мөйөш табалмай алйыған-арыған яҡташтар, бигерәк тә йәш үҫмер балалар китаплы ҡумталарын, кейем-һалымын күтәреп килеп торор ине. Бер кешегә файҙа итһә лә, ат менгәндәй ҡыуаныр ине Артурым. Иремә бер ваҡытта ла "Нишләп һаман фатир юҡ? Машина кәрәк!" тип йәки башҡа нәмә һорап, ауыҙ асманым. Сөнки уның былай ҙа тырыш, тик үтә лә намыҫлы һәм ғорур икәнен белә инем. Балалар ғына "фатирҙа йәшәһәк, балкондан һабын ҡыуығы осорор инек", тип хыялланып алалар ине. Унан, Аллаға шөкөр, Сипайлово биҫтәһенән фатир алып, ғаиләбеҙ тағы ла артып, ишәйеп китте.

**Абруйлы, күренекле, сибәр ир-егеттәргә ҡатын-ҡыҙ ҙа битараф булмай бит. Көнләшеү тойғоһо кисерткәне булдымы ағайҙың?**

- Бер тапҡыр ғына булды.... Тәүге балабыҙ тыуғас, Артур мине ике айлыҡ бәпәй менән үҙенең ауылына алып барып ҡалдырҙы. Унда әсә-атаһы өҙөлөп тора, бәләкәй туғандары ҡулыма эш тейгеҙмәй, бәпесте лә көтөшә, рәхәтләнеп ял ит тә ят. Тик миндә ял ҡайғыһы булманы. Иремдең фотоальбомында уны армияға оҙатып ҡалған йәшлек мөхәббәтенең кәртешкәһе тора ине. Ул уны миңә үҙе күрһәткәйне. Был киткәйне, альбомдағы теге фото ла юҡҡа сыҡты бит. Йөрәгемде көнләшеү уты сыйҙы шул мәл. Фотоны үҙе менән алып киткәндер, унда, мин юҡта ҡарап ултыралыр, йәнәһе. Ҡара янып йөрөйөм, бер нәмәгә әүрәй алмайым, эстән көйөүҙән ябығып, һурылып киттем. Артурҙан хат өҫтөнә хат килә, яуап яҙмайым, үсеккәнмен. Ай тигәндә был ҡайтып төштө. Урамға инеү менән: "Ҡайҙа еңгәгеҙ? Нимә булды? Ни эшләп хатҡа яуап бирмәй?"- тип һораша һалды. Береһе бер нәмә әйтә алмай. Мине ултыртып һөйләтеп алды был. Әйттем сәбәбен. Фото хаҡында ул бер нәмә лә белмәй булып сыҡты. Шул саҡ беҙҙең бәхәскә бейемем иғтибар итте. Баҡтиһәң, мин ҡарап борсолмаһын өсөн фотоны ул алып ҡуйған икән. Барыһы ла асыҡланғас, шундай уңайһыҙланыу кисерҙем. Аллаһы Тәғәлә алдында, имсәк балам алдында, өлтөрәшеп йөрөгән ҡайным-ҡәйнәм, минең күңелемде табыу өсөн йүгерешкән бикәстәрем алдында ныҡ оялдым. Шулай түбән уйҙар уйлап, иремде кәмһеткәнем өсөн үкенеп бөтә алманым. Был миңә бик яҡшы һабаҡ булды. Ошо хәлдән алып күңелемә көнсөллөк бесәйен яҡын ебәрмәнем.

Бынан тыш, иремдең матур кеше генә түгел, тыйнаҡ кеше лә икәнлеген белә инем. Етәксе булып киткәс, ундай-бындай байрамдарға китер алдынан "Директор булып йәмерәйеп, кәперәйеп, ситтә баҫып торма, уйнап-көлөп ҡайт", тип ебәрә инем. Бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата йомшаҡ, алсаҡ бул, тип тылҡыйым. Эштә ни хәтле генә арып-талһам да, кис өйгә ҡайтҡас, иремдең көнө буйы ни эшләгәнен, яңылыҡтарын һорашам. Бигерәк тә яуаплы йыйылыш, конференциялар ни менән бөтөүе, ниндәй ыңғай хәл йә ҡаршылыҡ булыуы тураһында ҡыҙыҡһынам, уны тыңлар өсөн бөтә эшемде ситкә ҡуям. Был беҙҙең бер ғәҙәткә ингәйне, ахыры. Минең уны тыңлауым уға бик кәрәк ине. Уның берәй фекере йә ҡылығы менән килешмәһәм дә, иремә ҡаршы уйхисемде ҡыҫтырмайым һәм гел уның яҡлы булыуымды белгертеп ҡуям...

Хәбәрҙәргә, имеш-мимешкә килгәндә иһә, улар аҙ булманы. Әле лә, ағайығыҙ ысын донъяла ятҡанда ла, килеп етә тора улар. "Шуның балаһы шунан икән", тигәндәре лә, "Шул уны бик һөйгән икән", тигәне лә бар. Бер ҙә иҫем китмәй. "Яҡшы булған! Шундай иргә лә ғашиҡ булмағас!" йәки "Бик һәйбәт! Быуыны һайын ҡатын тотһа ла, еткәндәй ир ине!" тип ебәрәм. Беҙ өйләнешкәндә икебеҙ ҙә егерме ике йәшлек тиңдәштәр инек. Был йәшкә хәтле егеттең яратҡан ҡыҙы, ҡыҙҙың һөйгән егете булмауы ғәжәп, әлбиттә. Икебеҙҙең дә йөрәктәрҙә мөхәббәт уты дөрләгән, кем өсөн, ни өсөн,

*✓ Дүрт бала менән ултырғанда ла бала менән ир ҡулын тотҡарламаным. Уларҙы атайҙарынан биләтмәнем, уны төндә торғоҙманым, дауаханаларға ҡуша эйәртеп алып барманым, юлда ла үҙем тотоп ултырҙым.*



# ИЖАДЫН...

## яратыусы ғына мин

унының үткән заман тигән дәрйә ялмаған. Ләкин "яратыу" тигән мөғжизәле тойғо һәр ваҡыт изге ут кеүек - йәнде, рухты таҙарта. Яратҡан кеше икенсе кешенең һөйөүен һиҙә һәм баһалай-ҡәҙерләй белә. Мин нишләптер шулай уйлайым.

Хәтеремдә, Салауат Юлаевтың Әминәнән тыш тағы ҡатыны булғанды уҡып белеп, бик аптырағайным. Йәш саҡта шулай уйлайһың бит инде: нисек инде, ул бит Әминәне ярата! Шуны Артурға һөйләйем. Ул әйтә: "Ә ниңә? Уның урынында булһам, мин әллә нисә ҡатын алыр инем әле", - ти. "Ай-бай, хәтәр икән..." тигән булһам да, йәшәй-йәшәй был тормош хәҡиҡәтенең дөрөҫ икәнлеген аңланым. Ир-егеттең ҡатын-ҡыҙға ҡарата ҡайта-ҡайта хистәре уяныусан, шуға ла улар ҡатын-ҡыҙға иғтибар итеүсән. Ирҙәр физиологияһын яҡшы белгән халҡыбыҙ күп ҡатынлылыҡты йола ла иткән. Көнләшеп, донъя туҙҙырып, балаларҙы ҡурҡытып, бер-берендең нервыларын бөтөрөп талашып йәшәүгә сәбәпсе түгел был күренеш, минеңсә. Һәр хәлдә, беҙҙең осраҡта, мин үҙемде ҡыйырһытылған йәки яратылмаған ҡатын итеп тойманым. Һәр саҡ иремдең иғтибарында, хөрмәтендә, ҡурсыуында йәшәнем, Аллаға шөкөр, йәне йәннәттә булһын. Йәш саҡта артына шиғыр яҙып бүләк иткән кәртешкәмде ғүмер буйы түш кеҫәһендә йөрөттө, яҙмаһын да яттан белде...

**Һеҙ бала саҡта ла өс малайға апай булғанһығыҙ, үҙегеҙ ҙә өс малай үҫтергәнһегеҙ. Ошолар хаҡында һөйләшәйек әле?**

- Күгәрсен районы Үрге Һаҙ ауылындағы атай-әсәй йортонан иртә сығып киткәс, эй, шул энекәштәр ныҡ һағындыра торғайны. Мин киткәндә уларға ике, өс, дүрт йәштәр генә булып ҡалғайны. Каникулдарҙа нимә етте, шуға әләгеп, ашығып ҡайтыуҙар, булыр-булмаҫ аҡсаларға бүләктәр алып маташыуҙар... Ҡайтып инһәң, улар һине шаугөр килеп ҡаршы ала, сумканды күтәрешеп индерә лә, урындыҡ уртаһына ҡуйып, ҡутарып ташлайҙар. Бәләкәй генә бүләктәренә ат менгәндәй булып ҡыуанышалар... Э-эй, ул ҡабатланмаҫ мәлдәр! Шулай гел ҡырҙа йөрөп, туғандарымды яратып туя алмай ҡалдым. Шул һағышым йәнемә ҡуша ҡатты. Ана шул ҡанмаған таңһығымды ҡандырам тип таптым да инде мин балаларымды бер-бер артлы. Балаларға булған һөйөүҙән әллә күпме илһам, көс алып йәшәнем.

Ваҡытында мине эшкә алған етәкселәрем- Телевидение һәм радиотапшырыуҙар дәүләт комитеты рәйесе Тәлғәт Ниғмәтулла улы Сәғитов менән телевидение студияһы директоры Ғата Шәйхетдин улы Имаев тигән ағайҙар мине хеҙмәттә лә күтәрҙеләр, күрә белделәр һәм аллы-артлы декретҡа китеүемде лә хупланылар. Элек бит эш урындарында декретҡа китеүгә ҡырын ҡарауҙар булды. Беренсе баланан һуң эшкә сығып, ун биш көн эшләгәс, яңынан декретҡа китергә йыйыныуымды берәүгә лә әйтергә ҡыймай, Имаев ағайға инеп, тартынып ҡына аңғартҡайным, ағай һикереп килеп торҙо ла: "Афарин! Ҡалай яҡшы иткәнһең! Бар, ҡайт, өйҙә бул, балаң менән ултыр!" - тип ҡулымды ҡыҫты. Тәлғәт Ниғмәтулла улына ла ҡайһы берәүҙәр ғәйеп итеп: "Сурина тағы икенсегә декретҡа китә", - тигән икән, ул: "Ай-да, Сурина! Ай-да, молодец!" - тип һөрәнләп ебәргән, тип, хуплап һөйләнеләр. Шул хәлдән һуң телевидениелағы бала табыусы, декретҡа йыйыныусы ҡатын-ҡыҙға ҡарата мөнәсәбәт тә үҙгәрҙе. Ҡатындарҙың бала табыу өсөн айырым ғүмерҙәре бармы ни? Улар шул йәш саҡта, эш араһында табып үҫтерә инде баланы. Быны йәмғиәт тә, етәкселәр ҙә аңларға һәм хупларға ғына тейеш.

Дүрт бала менән ултырғанда ла бала менән ир ҡулын тотҡарламаным. Уларҙы атайҙарынан биләтмәнем, уны төндә торғоҙманым, дауаханаларға ҡуша эйәртеп алып барманым, юлда ла үҙем тотоп ултырҙым. Мин йәш баланы иремә йәбештереп тотторop бармаһам да, ул үҙе ифрат бала йәнле, ярҙамсыл булды. Бала бағыу - әсәйҙең бурысы, атайҙың ҡулына ул үҙ аяҡтарында йүгереп барып менерлек булғанда ғына эйәләшһен, тиһәм дә, балаларҙы күберәк ул ҡарағандыр, ул тәрбиәләгәндер әле, тип тә ҡуям. Ир булған өйҙә бала уның барлығынан, уның ҡарашынан, тауышынан, холоҡ-фиғеленән, мөнәсәбәтенән былай ҙа күрәген ала ул.

**Балалар үҫә бара уларҙың мәшәҡәте лә үҫә, тибеҙ. Беренсе тапҡыр ҡәйнә булған мәлегеҙҙә ниндәй тойғолар кисерҙегеҙ? Унан ейәндәр ниндәй хистәргә солғаны?**

- Эйе, бер-бер артлы малайҙар ир етә башланы, танауҙарына еҫ инде. Беҙ бер нәмә лә уйламай йөрөй бирәбеҙ. Бер мәл Салауат улыбыҙ, өсөнсө курста уҡып йөрөй ине, ҡайтып инде лә: "Әсәй, дүрт йөҙ һум аҡса бир әле", - тип һораны. "Нимәгә ине?" тиһәм, "Ләлә-тюльпан мәсетенә барып, никах уҡытабыҙ", тисе был. "Кем менән?" тип кенә һорай алдым. "Юлиә менән", ти. Белеүемсә, Юлиә менән яңыраҡ ҡына танышҡайны, 19 йәшлек кенә ҡыҙыҡай. Шул саҡ минең башта "келт" итте. Унан улымды ҡаршыма ултыртып алдым да һүҙ башланым: "Балам, - мин әйтәм,- ғәфү ит, мин һинең бәлиғ булып, ир еткәнеңде аңламай йөрөйөм бит, эш тип... Егерме йәшең тула. Тимәк, өйләнәһең. Бик мәслихәт. Юлиә берәүҙең ҡәҙерле балаһы, һин беҙҙең баш бала. Икегеҙ ҙә фатихалы, бер Хоҙайҙан һорап ҡына алған ғәзиз балалар. Ул ҡыҙ бит урамда йөрөгән етем бәрәс түгел, һин дә - йола йоҡмаҫ йонбай түгелһең. Уны ата-әсәһе үҫтергән, көс һалған, нишләп һин уны берәүҙән рөхсәт, фатиха алмайынса, мәсеткә алып барып никах уҡытаһың әле? Һинең ата-әсәң юҡмы? Бына мин һиңә кәләш алыу тәртибен аңлатам. Башың булһа, йөрәгең етһә, нисек кәрәк, шулай дөрөҫ итеп башҡараһың..." Улымдың күҙҙәре ялтырап китте. Бәйнә-бәйнә ҡыҙ һоратыу, никах, туй йолалары тураһында һөйләп сыҡтым быға. Шулай итеп, беҙ буласаҡ ҡоҙалар менән башта күрешеп-танышып, унан килешеп-һөйләшеп, ҡоҙалашып-туйлашып ҡуйҙыҡ. Барыһын да йола ҡушҡанса башҡарҙыҡ, шартына килтереп туй яһаныҡ.

Ҡәйнә булараҡ, мин үҙемдең ҡәйнәмә оҡшағанмындыр. Мин уны, бейем, тием. Бик матур аһәңле, мәғәнәле, боронғо һүҙ. Үҙемдең килендәрем дә миңә, бейем, тип өндәшә, рәхмәт яуғырҙары. Бейемем Хәҙисә исемле, ул бик сабыр, ипле, әммә әйтергә теләгәнен өҙөп кенә әйтеп ҡуя белгән ҡатын. Теләктәрен, кәңәшен әйтеп йөрөнө. Мине күҙ алдында маҡтап барманы, кеше хуплағанда "ярай, шөкөр" тип ултырҙы. Холҡо бик йомарт, ҡулы мул булды. Балаларын өйөрөп, ойошторop алып йөрөнө. Оло ағайҙарын, йәғни минең иремде һәм шуға ҡушып мине лә, хөрмәт иттерҙе. Геройәсә бит ул, ун балаһы араһында саҡ ҡына сыр-сыйыш сыҡһа ла, ипле һүҙе менән баҫты, татыулыҡ талап итте. Береһенә бер нәмә булһа, барыһын аяҡҡа баҫтырып, шул яҡҡа аяҡландырҙы, ярҙам иттерҙе. Килен булараҡ, миңә бер ауыр һүҙ әйтмәне, рәнйетмәне. Әле йәш саҡта уҡ, бикәстәр берәй нәмә эшләйек йәки бешерәйек, тиһәләр, "Еңгәгеҙҙән һорағыҙ, еңгәгеҙ аҡыллы, ул вис белә", ти ҙә ҡуя ине. Шул саҡта белмәһәң дә "беләһең" инде, тырышаһың.

Минең әсәйем дә бөтә килендәренә иғтибарлы булды. Ҡайҙа ғына алып барһам да, килендәренә бүләк ҡарап, шуларҙы һағынып, "Рәйлә киленем, Рәйсә киленем" тип һөйләп тик йөрөй торғайны. Килендәре лә яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ менән яуап бирә белде. Әле лә бөтәбеҙҙе йыйып, әсәйемдең аят кисәләрен уҙғара килендәре. Бейемдең төҫө, тип, уның әйберҙәрен һаҡлайҙар, рәхмәт яуғырҙары.

Шуға мин дә үҙем белгән бейем-ҡәйнәләр кеүек булырға тырышам. Килендәремдең яҡшы яҡтарын ғына күреп, шуларын маҡтап-күтәрмәләйем. Һәр кемгә йылы һүҙ килешә, һәр кем йылыға йылыша. Йәштәрҙең шәхси тормоштарына ҡыҫылмайым, әммә күҙ уңында тотам. Ваҡытым еткән тиклем ейәндәремде ылыҡтырам, ҡәрсәйле-өләсәйле булып, әкиәт-йырҙар тыңлап, һамаҡ-әйтемдәр ишетеп, тупылдатып һөйөләп үҫһендәр, тием.

**Бер бөртөк ҡыҙығыҙ тураһында ла ишетке килә?**

- Хоҙайға рәхмәт, миңә бер бөртөк кенә булһа ла ҡыҙ бала биргәне өсөн. Ошо ҡыҙ мине наҙлы итте. Атаһы кеүек иғтибарлы, ҡыҙҙарса иркә, мине - әсәһен, түшенә ҡыҫып-ҡыҫып һөйөп ала торған бала ул. Ҡәнәғәтмен, бик ҡәнәғәтмен ҡыҙлы булыуым менән. Ҡыҙым әлегә уҡый, тиҙҙән "дөйөм терапия буйынса табип" тигән диплом алып ҡайтыр, тип көтәм. Уның эшкә урынлашаһы, аҡыллы, мөхәббәтле егеткә кейәүгә сығып, эйәле-башлы булаһы бар әле. Ҡыҫҡаһы, ғүмеренең рәхәт бер мизгеле - ҡыҙ сағы, иркәле дәүере. Әйҙә, рәхәтен күрһен. Ғүмерҙең һәр осоро - үҙ йәме менән.

**Бөтөн хеҙмәтегеҙ халыҡ ижадына бағышланған. Ни өсөн был юл һайланды һәм киләсәк быуындар тормошонда халыҡ ижады ниндәй роль уйнар икән, нисек уйлайһығыҙ?**

- Мине халыҡ ижады буйынса белгес, тип һанайҙар, ә мин бер нәмә лә белмәгәнемде генә беләм. Ул хәтле киң, төрлө һәм төпһөҙ-тәрән диңгеҙҙе нисек белеп бөтмәк кәрәк. Мин бит уны яратыусы, өйрәнеүсе, тасуирлаусы ғына. Яңыраҡ Мәсетле районында "Башҡорт милли кейемдәре" буйынса ағинәйҙәр ҡоронда ҡатнашырға тура килде. Ауыл-ауылы менән төрлө кейемдәр әҙерләп кейеп, күлдәк ҡотлатып, сәхнә тултырып илгә һөйөнсөләне ҡыҙҙар. Сәхрәлә, уйында йә эштә кейә торған ситса күлдәктәр түгел, тамбур ҡайыулы күркәм килен-кәләш кейеме, яугир һәм даугир тархан ҡатын-ҡыҙҙары, ерҙәр хужаһы аҫаба башҡорт байы ҡатындары, уҡымышлы мулла-хәҙрәт ҡыҙҙары кейемдәре... Һәммәһе лә шау көмөш тәңкәле муйса, ҡайыулы балитәк, яурынса-ҡанат (погон) һәм бик килешле ҡыя ҡалпаҡ-таҡыя менән тулы кейем әҙерләгән. Мин дә теләгемде еткерҙем: башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ошо төбәктә айырыуса ныҡ һаҡланған баш кейеме өлгөһөн мәсетлеләр тергеҙеп, халыҡҡа күрһәтһен ине: ҡыя-ҡалпаҡ, сикә-ҡалпаҡ, тәңкәле ҡалпаҡ, ҡайыулы ҡалпаҡ, тупый-ҡалпаҡ тигән әллә нисә төрлө ҡалпаҡтарыбыҙҙы кейеп йөрөгәбеҙ килә, тинем. Төньяҡ-көнсығыш Башҡортостан халҡы - дыуан, әйле, балаҡатай, ҡөҙәй, ҡошсо, өпәй, терһәк, олоҡатай башҡорттары - мине һәр ваҡыт һоҡландыра: ғәжәп аҡыллы, тоғро фекерле шәхестәре күп. Тотороҡло күңел менән бергә ынтыматлыҡ - маҡсатлы һәм ныҡышмалы холҡ та бар ул яҡта. Тамбур йәки элмә менән ҡайылған кейемдәре, урын-йорт биҙәү ҡаралтыһы өлгөләре был төбәк ҡатын-ҡыҙҙарының ҡул эше оҫталығын музейҙар түренә ҡуйҙы, башҡорт этнография фәнни-тикшеренеү институты фондтарына, каталогтарға индерҙе һәм иң юғары халыҡ-ара күргәҙмәләргә сығарҙы. Хәҙер Башҡортостанда иҫе бар кеше, барҙы бар итеп күрә алған кеше ҡайыулы башҡорт халыҡ кейемдәрен бик яҡшы таный. Әй, Йүрүҙән,Танып, Ыҡ, Өфө йылғаһы буйында ултырған ауылдарҙа һәр башҡорт ҡатын-ҡыҙының унар-ун бишәр (!) ҡайыулы күлдәк-альяпҡысы булғанын, ҡалпағын, яулығын, ситеген, хатта эске кейемен ҡайып кейгәнен был төбәктә экспедицияларҙа йөрөгән ғалимдар һоҡланып яҙа.

Минең халыҡ ижады менән ҡыҙыҡһыныуым ҡәрсәйем менән өләсәйемдең тәрбиәһенән тип уйлайым. Ҡайҙа барһам да, аҡыллы һөйләшкән, күркәм холоҡло кешегә хөрмәт менән ҡараным, тап шундайҙарҙы яраттым, рәхмәт уҡыным һәм онота алманым. Аллаһыға мең шөкөр, ундай аҫыл заттар бик күп осраны - әле мәктәптә уҡыған саҡтан уҡ башлап уйлаһам, күҙ алдыма йылмайып килеп теҙелеп торалар... Дәүләкән районы Боранғол ауылында әхирәтем Рәмилә Ҡорбанғәлиеваның нәнәйе һәм инәйҙәре, Учалы районы Сәфәр, Иманғол, Байрамғол, Муса, Сураман ауылдарында фольклор экспедицияһында танышҡан һәм ғүмерлеккә ятаҡан кешеләрем, Белорет районы Шығай ауылында йәшәгән Мәһәҙи апа (олатайҙы был яҡта шулай тиҙәр) менән Фатима инәйҙең күңелемдә юйылмаҫ матур иҫтәлеге, Баймаҡ районы Төркмән, Күсей, Бәхтегәрәй, Ниғәмәт, Иҫән, Икенсе Этҡол ауылдарындағы йәнемде йәмләндергән, рухымды күтәргән дуҫтарым, Әбйәлил, Миәкә, Балаҡатай, Ғафури яҡтарында осраҡан аҫыл заттарҙы әйтеп тә бөтөрөрлөк түгел, ә үҙ тыуған яғымдың һәм килен булып төшкән Һаҡмар буйымдың ғәжәп күркәм халҡы - минең үҙебеҙҙең башҡорт халҡыбыҙҙан күргән мең-мең яҡшылығым өсөн бер Хоҙайға мең-мең-мең шөкөр итәм. Ә киләсәк быуындар өсөн халыҡ ижады бына беҙ бөгөн уларҙы нисек тәрбиәләйбеҙ - шундай роль уйнаясаҡ.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Сәрүәр апайҙың башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына ғына хас булған сифаттары - сабырлығы, аҡылы, һүҙҙе гел матурлыҡ һәм ыңғайға ғына йүнәлтеүе, теләһә ниндәй кире күренеште лә аҡлап, һылап-һыпырып ҡуя белеүе һоҡландырҙы. Бының сере, моғайын да, уның ана шул халҡыбыҙҙың рухи ҡомартҡыһын, аҫыл асылын һаҡлаған кешеләр уртаһында ҡайнауҙан да киләләр. Хәйер, ул бит бала саҡтан ана шундай рухи хазиналы олатай-өләсәйҙәр уратыуында үҫкән. Шундай мөхиттә тәрбиәләнгән Сәрүәр Суринаның халыҡ ижадын өйрәнеү юлын һайлауы, милләтебеҙ ҡатын-ҡыҙҙарының иң гүзәл һыҙаттарын үҙендә сағылдырыуы, эйе, ғәжәп түгел шулай булғас...**

**Миләүшә ХӘБИЛОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Ҡайтҡан да, ҡото осоп: "Ҡара әле, беҙҙең малай дәрестәргә йөрөмәй икән, уны мәктәптә хатта уҡытыусылар ҙа белмәй",- ти. Ә мин әйтәм: "Ахмаҡ, беҙҙең малай әле балалар баҡсаһына ғына йөрөй!"*



*СЦЕНАРИЙ*

# ЯРАТҠАН МАТУР БУЛА



**Уҡыусыларыбыҙ менән осрашыуҙар мәлендә йыш ҡына "Гәзитегеҙҙә теге йәки был байрамға арналған сценарийҙар ҙа бирһәгеҙ ине", тигән тәҡдимдәр ҙә ишеткеләйбеҙ. 8 март, Ҡатын-ҡыҙҙар көнөнә бер ай самаһы ғына ваҡыт ҡалып бара. Шул матур байрам мәлендә, моғайын, Миләүшә Ҡаһарманованың һеҙҙең иғтибарға тәҡдим ителәсәк был сценарийын сәхнәләштереүселәр табылыр, тип ышанабыҙ.**

**Алып барыусылар:**
**4 егет, 4 ҡыҙ.**

**Егеттәр блогы**

- Хәйерле кис, хөрмәтле тамашасылар!

-Һаумыһығыҙ, ҡалабыҙҙың Зөһрәләре, Шәүрәләре, Зөлхизәләре, Айһылыуҙары, Алмабикәләре...

- Анжелалары, Кариналары, Зариналары, Аделиналары, Альбиналары һәм Сузанналары!

- Әсәйҙәр, өләсәйҙәр, апайҙар, һеңлеләр, еңгәләр, ҡоҙағыйҙар, ҡоҙасалар...

- Ҡатындар, ҡатын булмағандар, ҡыҙҙар, ҡыҙ булмағандар, һөйәркәләр һәм әлегә һөйәркә булмағандар!

***(Барыһы ла уға борола, ул ниндәй һүҙ ысҡындырғанын аңлап, ауыҙын ҡаплай).***

- Ҡыҫҡаһы, таяҡҡа таянғандан алып, ултырып шыуғанға тиклемге гүзәл заттар!

- Һеҙҙең барығыҙҙы ла күкрәп, урғылып килгән яҙҙың тәүге һәм иң матур байрамы - Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө менән ҡотлайбыҙ!

- Яҙ байрамы менән!

***(Йыр).***

-Ни өсөн бөгөн тамаша залы аллы-гөллө сәскәле баҡсаны хәтерләтә тиһәм, беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ шулай гөл кеүек сәскә атҡан икән.

- Ә һауала ниндәй хуш еҫ, йәйге болондамын тип хис иттем хатта үҙемде (еҫкәнә). Бына, быныһы "Нуаж", быныһы "Мисс О" хушбуйы, был яҡтараҡ "Красная Москва" буғай *(еҫкәнеп йөрөй)*.

- Ә ҡупшы ҡолаҡтарҙа, зифа муйындарҙа күҙҙәрҙең яуын алып йымылдашҡан биҙәүестәрҙең нурынан баш әйләнә хатта.

- Әйләнә инде, залда тотош бер ювелир магазины тауарҙары бергә йыйылған бит - беҙҙең кеүек йөҙҙәрсә бахыр ир-егеттең хеҙмәт емеше инде улар...

- Туҡта, туҡта! Һин ҡатын-ҡыҙға ҡаныҒырға ғына торма әле, уларҙың да йөҙ төрлөһө була. Бына мин, ҡустылар, ҡатын-ҡыҙ знатогы булараҡ, һеҙҙең кеүек "һары ауыҙҙарға" ҡатын-ҡыҙ хаҡында бик файҙалы бер фәнни-ғәмәли конференция үткәрә алам. Притом - бушлай!

- Ысынмы, ағай! Был бит минең яратҡан темам!

***(Барыһы ла уртаға йыйылыша).***

- Йә, һөйлә...

- Ҡатын-ҡыҙҙар улар төрлө төркөмдәргә бүленә, быны бик күп ғалимдар тикшергән, шуларҙан үҙеңә тура килгән төркөмдәге ҡыҙҙы һайлап алаһың инде.

- Йәғни, үҙеңә 100 процент тап килгән ҡыҙҙы һайлаһаң, бер ҡайғыһыҙ, тауыш-тынһыҙ йәшәргә лә йәшәргә.

- Эйе, эйе, тап шуны әйтергә теләгәйнем.

- Ә ниндәй төркөмдәр инде улар?

- Улар күп ул, мәҫәлән, "ҡоралай", "рауза", "төлкө", "күркә", айыу"...

- Бәәәәй, был үҙе бер "в мире животных и растений" була ла ҡуя түгелме һуң?

- Нишләп инде, уның рәтен белергә кәрәк. Бына миңә - "ҡоралай" төркөмөндәге ҡатын-ҡыҙ оҡшай. Улар шундай тәбиғи, бер ҡатлы, алдаша белмәҫ, хәйләһеҙ генә булалар. Уларҙы һәр саҡ яҡлап, ҡурсалап ҡына торорға кәрәк. Ҡыҫҡаһы, бындай ҡатын-ҡыҙға минең кеүек яҡшы тәбиғәт һаҡсыһы кәрәк.

- Һинең кеүек браконьер, тиһәң, дөрөҫөрәк булыр ине.

- Эх, егеттәр, булһын ине миңә лә шундай бер ҡоралай!

***(Ҡапыл музыка, егеттәр тертләшеп ситкә ташлана һәм аптырашып ҡарап тора, сәхнәгә ҡоралай йә боландар елеп килеп сыға. Дәртле ҡоралай йәки болан бейеүе)***.

- Дә-ә, егеттәр, бындай ҡоралайҙы тотоуҙары белмәйеем. Киләһе төркөм ниндәй?

- "Рауза" төркөмөнә ингән ҡатын-ҡыҙ, егеттәр! Эх! *(Бармаҡтарын үбеп һоҡланған ишара яһай)*. Был төркөм ҡыҙҙары барыһының да һушын алыуға һәләтле. Улар шундай матур, шундай камил булалар *(кәүҙәгә, йөҙ-башҡа ишара)*. Һәр саҡ модалы кейенергә яраталар. Уларға ҡиммәтле бүләктәр, матур гөлләмәләр бүләк итергә һәм ресторандарға ғына йөрөтөргә кәрәк.

- Ә-ә, беләм-беләм, ундай ҡатын-ҡыҙ үҙ баһаһын белеп, тыҡылдата баҫып ҡына йөрөй *(йөрөп күрһәтә)*. Уларға арнап шиғырҙар яҙыла, йырҙар йырлана...

***(Музыка, сәхнә артынан уҡ йырлап "Ҡыҙыл розалар" йырына пародист килеп сыға. Егеттәр костюм түштәренән розалар сығарып, иҙәнгә ташлай)***.

-Ай-һай, ҡимməтка төшәсәк бындай рауза ҡатын, егеттәр. Мин бит әле студент ҡына, был төркөм ҡатын-ҡыҙына профессор йәки директор булғас ҡарармын инде.

- Дә-ә, ысынлап та *(елкәһен ҡашый)*, ә киләһе төркөм кем әле?

- Киләһе төркөм - "күркә", егеттәр!

- Ҡабарып китеп баҫтырмайҙыр ул *(ҡабарып күрһәтә)* ...

- Баҫтырыуға баҫтырмай, әммә ҡабарынып бар нәмәгә үҙе алдан йөрөргә ярата. Тиҙ генә ҡыҙып китеүсән, ҡаршы һөйләшкәнде яратмай, үҙе хәл итә, үҙе эшләй, үҙе йүнләй...

- Уға ир нимәгә кәрәк улай булғас?

- Ныу... үҙе кеүек күркәләрҙе үрсетеү өсөн кәрәктер инде.

- Күркә төркөмөнә ҡараған ҡатын-ҡыҙҙар хатта көслө заттың ла үҙҙәре һайлап ала, тигән.

- Аллам һаҡлаһын, шундай берәй күркә килеп һайлап алып китһә...

- Алһа ней, йөрөйһөң инде маршҡа ғына баҫып! Айт-два!, Айт-два!

**(Шуға ярашлы берәй бейеү йәки йыр)**.

- Юҡ, егеттәр, былай килешмәй, нисек инде ир башың менән ҡатындар үксәһе аҫтында йөрөргә мөмкин?

- Ярай, быныһы бармай икән...

- Бармай! Бармай! *(Барыһы ла бергә ҡысҡыралар)*.

- Улайһа, "айыу" төркөмөнә ингән ҡатын-ҡыҙҙы алайыҡ. Айыу гүзәл заттары, ғәҙәттә, дәү кәүҙәле, ғәйрәтле, сабыр холоҡло була. Яратҡандары тәм-том ризыҡтар бешереү. Кейем-һалымды матурлығына түгел, ә файҙалы, сифатлы булыуына ҡарап һайлайҙар. Улар тиҙ генә үсегеп, үпкәләп бармайҙар. Тоғро ҡатын, яҡшы әсәй булалар.

- Бына бит, ҡалай шәп төркөм булған!

- Тик бер яғы: айыу ҡатын-ҡыҙҙарға юлығып, улар менән ғаилә ҡораһың икән - йә риза булып йәшәйһең, йә ҡосағында һығылып үләһең. Улар үҙҙәренекен бер ваҡытта ла ситкә ебәрмәй. Территорияһына берәй гүзәлкәйҙең күҙ атҡанын һиҙһә, ысын йыртҡысҡа әйләнә.

- Дә-ә, быныһы ҡурҡынысыраҡ икән шул...

- Ҡарағыҙ әле, егеттәр, ошо төркөмдәрҙең барыһын да ҡушып, берәй яңы сорт төркөм ҡатын-ҡыҙҙар затын уйлап сығарып булмай микән?

- Мәҫәлән, ниндәй?

- Ниндәйме? Ниндәйме?.. Мәҫәлән...ана анауы сибәркәй кеүек.

***(Егеттәр сәхнәгә сығып килеүсе йырсы ҡатын-ҡыҙ яғына боролоп, уға һоҡланып ҡарап, юл бирәләр. Йыр).***

* * *

**Ҡыҙҙар блогы**

***Асыуланышып, аптырашып ҡыҙҙар сыға.***

- Ишеттегеҙме, ҡыҙҙар, ишеттегеҙме ир-аттың ни һөйләгәнен?

- Провакация бит был!

- Беҙҙе әллә ниндәй төркөмдәргә бүлеп бөттөләр. Ҡоралай, рауза, айыу, имеш...

-Ҡоралай ҙа, рауза ла кәрәк булһа аждаһаға әйләнә ала ул, шуны белеп ҡуйығыҙ!

- Эй, ҡуй инде, ҡыҙҙар, беҙгә төшкән өлөштө. Уларҙың бер ниҙә эштәре юҡ. Бына минеке кисә ни эшләй? "Берәй тапҡыр улыбыҙҙың ата-әсәләр йыйылышына барып ҡайт", тип ебәргәйнем, ҡайтҡан да, ҡото осоп: "Ҡара әле, беҙҙең малай дәрестәргә йөрөмәй икән, уны мәктәптә хатта уҡытыусылар ҙа белмәй",- ти. Ә мин әйтәм: "Ахмаҡ, беҙҙең малай әле балалар баҡсаһында ғына йөрөй!"

- Ә минеке һуң, минеке. Мин уға "Ҡәҙерлем, кухняла бөгөн һинең сират, ниндәй тәмлекәстәр әҙерләп һыйларһың икән?" тиһәм, ул: "Һөйөклөм, һин бит күптән икмәкһыуға ғына ултырып, ябығып алырға хыяллана инең. Әйҙә, шул ниәтеңде бөгөндән башлап атҡар әле", - ти.

- Ә мин, ҡыҙҙар, һәр төрлө аудио-видео-көнкүреш техникаһын йүнәтеү һәм теләһә ниндәй мебелде ҡоршау оҫтаһына әйләндем. Шундай таһыл, шундай көс үҙемдә. Иҙән йыуғанда иремде борсоп тормайым, диван менән ҡуша шылдырам да ҡуям. Ул да ярҙам итә былай, аяҡтарын күтәреп ултыра.

- Һуң шундай көнитмештә нисек итеп рауза кеүек хуш еҫле, ҡоралайҙай ыҫпай булып йөрөмәк кәрәк!

- Ә үҙҙәренә ҡатын иркә лә, наҙлы ла, баҫалҡы ла, егәрле лә булһын бит әле!

- Үҙҙәрен, үҙҙәрен һуң шулай сортҡа бүлгәндә нисек булыр, ҡыҙҙар?

- Сортҡа бүлһәң, шул икенсе лә, өсөнсөгә генә үтә инде улар. Беренсе сорты бар тиһеңме уларҙың?

- Шулай шул. Йәш кенә бер сибәре осраһа, уныһы мотлаҡ бер тинһеҙ студент булып сыға. Фатиры, машинаһы барҙың йә башы пеләш, йә тәпәш. Аҡылы булғандың холҡо юҡ, холҡо барҙың күрке юҡ, тигәндәй.

***Йыр "Өс егет"***

* * *

**Егеттәр блогы**

- Һеҙҙең күп ҡатынлылыҡ тураһында уйланғанығыҙ бармы, егеттәр?

- Бар! Бар! *(Барыһы ла ҡысҡырып ебәрәләр)*.

- Ха-ха-ха! Һеҙ әллә ни "һары ауыҙ"ҙар түгел икән әле!

- Ә нишләп, бындай уй һәр ир-егет күңеленең иң-иң йәшерен бер мөйөшөндә йәшәйҙер ул.

- Насармы ни, бер ҡатының һине иркәләй, береһе ашарға бешерә, береһе кер йыуа...

-Береһе өҫ-башыңды ҡарай, икенсеһе балаларҙы тәрбиәләй...

- Бушҡа хыялланмағыҙ, егеттәр, беҙҙең эш хаҡы менән ошо ҡатындарыбыҙ сығып ҡасмағас та яҡшы әле.

- Шулай шул, өс ҡатын өс яҡтан ашарға, кейенергә, биҙәнергә таптыра башлаһа...

-Ә уларҙан тыуған балалар нисәү булып китә икән?

- Ә ул өс ҡатын өс яҡтан әрләшә-талаша башлаһа - сыҡ та ҡас инде!

- Ә шулай ҙа, егеттәр, никах яңыртып, шығырҙап торған йәш кәләш менән урамдан ҡултыҡлашып үтһәң, хәтәр булыр ине ул.

- Ә шулай ҙа ҡатын-ҡыҙ күңелен аңлауы ауыр, егеттәр, шулай бит?

- Ауыр, ауыр...

- Һин уны таңғы ел кеүек кенә наҙланып килеп инер тип көтһәң, ул ураган булып килеп бәрелә лә, үтекләп үтеп китә...

- Нисек кенә асыуланһа ла үҙ һүҙемдә торам тип уйлаһаң, ебәк кеүек булып елбәгәйләнә һәм минут эсендә күңелеңде лә, кеҫәләреңде лә бушата.

- Ҡатын-ҡыҙҙың күңелен аңлау өсөн ҡатын-ҡыҙ булып ҡарарға кәрәк шул...

- Нисек инде?

- Ну, ҡатындар кейемен кейеп, улар үтәгән мәшәҡәттәрҙе күтәреп ҡарарға...

- Ысынлап та, әйҙәгеҙ, кемде һынап ҡарайбыҙ?

- Давай мине, һуңғы ваҡытта ҡатынымды аңлай алмай аҙапланам, бәлки, берәй нәмә төшөнөрмөн.

- Йәгеҙ йә! Кемдә нимә бар?

***(Һәр береһе тиҙ генә сәхнә артында әҙерләп ҡуйған әйберҙәрҙе алып, егетте уртаға ҡуйып ҡаплайҙар, ул тиҙ генә кейенә. Егеттәр түңәрәкте асҡанда уртала мини юбка, ялбыр парик, үксәле туфлиҙар кейгән, иренен ҡып-ҡыҙылға буяған, бер ҡулына аҙыҡ-түлек тултырылған ҙур пакет тотҡан бер "ҡатын" тора. Үксәле туфлийҙарҙа баҫырға тырышып аҙаплана, тигеҙ генә тора алмай, йә бер, йә икенсе яҡҡа ҡыйшая. Егеттәр уны төҙәйтергә тырышалар)***.

- Тигеҙ йөрөһөн өсөн сумкаһын ике ҡулына ла тотторорға кәрәк. Ике ҡулда ла ауыр йөк

*✓ - Тәк-тәк, көмөрәймәһен өсөн арҡаһына рюкзак менән балаһын йәбештерегеҙ. Мин ҡатындарҙың балаларын шулай йөрөткәндәрен күргәнем бар. Бик уңайлы, ҡулдарына әллә күпме сумкалар күтәрә алалар.*



булһа, шәп йөрөйһөң ул ***(Икенсе ҡулына ла ҙур сумка тоторалар, ул тигеҙләнә, әммә сумкалары ауырлығынан алға бөксәйә).***

- Тәк-тәк, көмөрәймәһен өсөн арҡаһына рюкзак менән балаһын йәбештерегеҙ. Мин ҡатындарҙың балаларын шулай йөрөткәндәрен күргәнем бар. Бик уңайлы, ҡулдарына әллә күпме сумкалар күтәрә алалар. ***("Ҡатындың" арҡаһына рюкзак менән бала (ҡурсаҡ) алып килеп бәйләйҙәр).***

- Ә хәҙер бар, йөрөп әйлән әле!

***("Ҡатын" саҡ-саҡ атлап сығып китә, егеттәр шаҡ ҡатып ҡарап ҡалалар).***

- Ҡалай ҡурҡыныс...

- Ҡот осҡос...

- Бахыр ҡатындар эштән һуң өйгә ошондайыраҡ хәлдә ҡайтып инәләр түгелме, ә?

- Эйе шул, магазиндар буйлап сабып, аҙыҡ-түлек йыйып, баҡсанан балаларҙы алып...

- Егеттәр, һеҙ, бәлки, көлөрһөгөҙ, ә мин ҡапыл ҡатынымдың күҙ ҡараштарын иҫләнем. Улар миңә берсә үпкәләп, берсә һағышланып ҡарайҙар кеүек. Ә шулай ҙа ул күҙҙәрҙең иң төпкөлөндә мөхәббәт бар.

***(Егеттәр уйға ҡала. Ошо һүҙҙәрҙе әйткән егет ҡатын-ҡыҙға бағышланған йыр йырлай. Егеттәр бер аҙ тыңлап тора ла иплəп кенә сығалар. Йырлаусы егет йыр барышында залда ултырыусы ҡатынын бейергә саҡыра, сәскә бирә).***

* * *

**Ҡыҙҙар блогы**

- Ҡарағыҙ әле, ҡыҙҙар, бөгөн ир-егеттәрегеҙ сәйерерәк тойолмаймы һеҙгә?

- Сәйер, ҡыҙҙар, сәйер, мин дә шуны аңғарҙым. Ирем тиктомалдан "Һинең әсәйеңә нимә оҡшай: сүллектә үҫкән кактусмы, әллә Африка пальмаһымы?" тип һораны, аҡсаһын да йәшертен генә һанап-һанап ҡарай...

- Ә минеке, ҡыҙҙар, косметика журналдарын ҡарап ултырасы. Етмәһә, "Орифлейм яҡшыраҡмы, әллә "Амвэй"мы тип ҡыҙыҡһына...

***(Араларында бер ҡатын һүҙгә ҡатышмай, йылмайып, уларҙы тыңлап тора. Барыһы ла уға борола).***

- Һинеке һуң, сәйер ҡыланмаймы?

- Минеке ялтырап торған ситлектә иҫ киткес матур тутыйғош алып ҡайтҡан, минең күптәнге хыялым...

- Тутыйғош алып ҡайтҡан? Тимәк, ул һине тутыйғош менән һөйләшһен, мине ялҡытмаһын, ти!

- Тутыйғош менән һөйләшкәс, һине анра тип һынай.

- Анра икән, тимәк, һарыҡ!

- Ишетәһеңме, һине ирең һарыҡ тип атаған, ә һин шуға ҡыуанып тораһың!

- Юҡ инде, ҡыҙҙар, юҡ! Ул тутыйғош шундай матур итеп "Ҡәҙерлем, байрам менән!" тип әйтә белә.

- Байрам менән? Ниндәй байрам менән?

- Һуң, ҡыҙҙар, ир-егеттәрҙең сәйерлектәре һеҙгә таныш түгелме ни?

- Таныш кеүек тә...

- Былтыр ҙа бер шулай ҡыланманымы ни улар, унан алда ла?

- Шулай, ахыры...

- Һуң, ҡайһы мәлдәрәк шулай булды һуң?

- Тап ошо мәлдә!

- Тап ошо мәлдә нимә һуң, ҡыҙҙар, ниндәй байрам?!

- Ҡатын-ҡыҙҙар байрамы!

- Эйе шул, ҡатын-ҡыҙҙар байрамы! Ҡалай онотҡанбыҙ, ҡыҙҙар! Әйтәм, ир-ат сабыша!

- Тимәк, минең ирем әсәйемдә Африкаға олаҡтырырға түгел, ә уға бүләккә кактус эҙләй! Ә нимәгә уға кактус? Туҡта, кәрәклерәк берәй нәмә ҡаратырға кәрәк *(Сығыуға йүгайлай).*

- Миңә лә косметика кәрәкмәй, улар менән шкафтар тулған, ҡайта һалып дөрөҫ йүнәлеш биреп ебәрәйем әле *(Сыға).*

- Мин дә шулайтайым, кәрәкле әйберҙәремдең исемлеген яҙып, өҫтәленә яңылыш ҡына һалып киткән булайым *(Сыға).*

- Бына бит, ир-егет беҙһеҙ нимә эшләй ала, бөтөн нәмәгә өйрәтеп торорға кәрәк!

- Тә-әк, миңә алһыу розалар... замш сумочка... итек... *(Бармаҡтарын бөгә-бөгә һанап сыға).*

***Музыкаль номер.***

* * *

**Егеттәр блогы**

- Ҡарағыҙ әле, егеттәр, мин уйлап-уйлап йөрөнөм дә "Шулай ҙа ҡатын-ҡыҙҙың ниндәй төҫлө, ниндәй холоҡло булыуы түгел, ә беҙҙе, ир-егетте, яратыу-яратмауы мөһимерәк" тигән фекергә килдем.

- Нисек инде?

- Нисек булһын, бына һине ҡатының яратамы?

- Белмәйем...

- Ну, "яратам" тип әйтәме һуң?

- "Яратам" тип һүҙмә-һүҙ әйтмәһә лә "Һинә ғашиҡ булған мин алйот" тип көнөнә бер булһа ла әйтә белай.

- Улай тип әйткәс, ярата, тимәк.

- Ә һинеке... яратамы?

- Ярата, егеттәр, ярата. Затлы әйберҙәр бүләк иткән һайын "Нисә ухажерымдың араһынан бушҡа ғына һине һайламаным шул, үлеп яратҡанға һайланым", тип ебәрә.

- Һинең хәлдәр был фронтта нисек?

- Керҙәремде әсәйемдән йыуҙырып, тамағыма ҡәйнәмдә ашап йөрөгәнемдә һанамағанда, минең ҡатын идеальный бит ул, егеттәр!

- Шулай булғас, нимәгә зарланабыҙ һуң беҙ? Һуң шул үҙебеҙҙең илаҡ, енмеш, бер һүҙ менән әйткәндә, шайтан да түҙеп торғоһоҙ ҡатындарыбыҙһыҙ бер көн дә йәшәгә килмәй.

- Эйе шул, егеттәр, теге көн ҡатыным әсәһенә ҡунаҡҡа киткәйне, әллә нишләнем дә ҡуйҙым. Ул өйҙә сакта, унан әрләнә-әрләнә, егеттәр менән балыҡҡа, футболға барыла торғайны, ә ул өйҙә юҡта бер ҡайҙа ла күңел тартмай.

- Миңә лә таныш ул тойғо. Әллә ниндәй бер ҡәҙерле генә әйберендe юғалтҡан кеүек булып тик тора, ивет.

- Шул хаҡта ҡатыныңа әйттеңме әллә?

- Юю-уүк!

- Кит, улай тиһәң, ҡатының аптырар...

- Ә, минеңсә, аптырамаҫ, егеттәр! Ундай һүҙҙәрҙән һуң ҡатындарыбыҙ март ҡояшы кеүек балҡып китер ҙә, өйөбөҙгә урғылып яҙ килеп инер!

***Музыкаль номер.***

* * *

**Ҡыҙҙар һәм егеттәр блогы**

***Башта ҡыҙҙар сыға.***

- Ҡыҙҙар, бөгөн беҙҙең өйҙә шундай күнелле, шундай күнелле! Өҫтәлдә сәскәләр гөлләмәһе, ирем ҡулыма бер эш тигеҙмәй.

- Минеке лә, улыбыҙ менән бергәләшеп, алъяпҡыстар быуып тороп бешеренгән булалар. Бөгөнгә уларҙың бешергәнен нисек тә ашап, арттарынан кухняны таҙалап алырға тура килһә лә, игтибарлы, ихтиярлы булыуҙары үҙәкте өҙә бит, ҡыҙҙар!

- Шулай инде, ҡатын-ҡыҙға бер йылы ҡараш, бер матур һүҙ етә...

***(Шул ваҡыт ҡулдарына сәскәләр тотҡан егеттәр килеп сыға ла һүҙҙе эләктереп алып, дауам итәләр).***

- Сөнки ул һүҙҙәр беҙҙең күнелдәребеҙҙән иң төпкөлөнән, йөрәк түренән сыҡҡан һүҙҙәр.

- Беҙ ул һүҙҙәрҙе һеҙҙең өсөн, берҙән-берҙәребеҙ өсөн күнелдәребеҙҙә йөрөтәбеҙ ҙә, яратҡандарыбыҙ өсөн генә әйтәбеҙ.

- "Яратҡандарыбыҙ" тибеҙ, сөнки беҙ бөгөн бары тик яратҡандарҙың ғына донъяла иң матуры булыуын тағы ла бер тапҡыр иҫбатланыҡ!

***Ҡыҙҙар:***

- Ә беҙ ышандыҡ! Сөнки беҙ ир-егеттәребеҙҙең беҙҙең өсөн утҡа ла, һыуға ла инәсәк икәнен беләбеҙ.

- Ҡайҙан беләһегеҙ?

- Сөнки беҙ - ҡатын-ҡыҙҙар! Ә беҙҙең данлыҡлы интуиция менән логика бер ваҡытта ла яңылышмай, шуны онотмағыҙ!

- Әлбиттә, ҡыҙҙар, әлбиттә!

- Бөгөнгә, Һигеҙенсе март көнөндә, һеҙҙең менән бөтә нәмәлә лә килешәбеҙ, ҡәҙерлеләребеҙ!

- Йәғни, бер көнгә килешеү - перемирие.

- Ни өсөн бер көнгә?

- Сөнки ир-егет менән ҡатын-ҡыҙҙың килешеп кенә йәшәүе бер көндән дә артыҡҡа мөмкин түгел.

- Ирҙәр менән ҡатындар донъяһы - ул мәңгелек бәхәс, төрлөлөк, ҡапма-ҡаршылыҡ, көрәш, килешмәүсәнлек һәм... һәм... мөхәббәт!

- Мөхәббәт?

- Әлбиттә, мөхәббәт! Был донъяла ҡатын-ҡыҙ бар икән, тимәк, мөхәббәт тә, наҙ ҙа, яҙ ҙа бар!

- Байрамығыҙ менән, ҡатын-ҡыҙҙар!

***(Егеттәр ҡыҙҙарҙы ҡотлай, яҙ хаҡында дәртле йыр яңғырай).***

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*

# ХӘЙБУЛЛА МӘҘӘКТӘРЕ

## Күстәнәскә - ойоҡтар

Бер ваҡыт күрше ауылда больницала ятҡан Нуретдин ағайымдың ялға ҡайтҡанын ишетеп, Миңлегөл апай шулай уҡ дауаланып ятҡан әсәһенә ағайым аша күстәнәс ебәрмәксе булды. Бер аҙҙан машина килеп туҡтағанын ишеткән ағайым:

- Ярай, мин киттем,- тине лә сығып йүгерҙе. Әсәйем уның артынан:

- Миңлегөлдөң күстәнәсен онотоп ҡуйма! - тип ҡысҡырып ҡына өлгөрҙө. Аҙаҡ әсәйем соланға сыҡҡас, стенала элеүле торған күстәнәстәрҙе күреп, көйөп китте:

- Һай был Нуретдинде! Миңлегөлдөң күстәнәсен ҡалдырып, урҙала эленеп торған моҡсайҙы эләктергән дә киткән. Эсе тулы ямарға тип һалған ойоҡтар ине бит!

Был ваҡиғаны иҫкә төшөргән һайын ағайыбыҙ әле булһа ла оялып ҡуя. Бигерәк тә күстәнәс өмөт итеп көткән ауылдашының иҫке-моҫҡо ойоҡтарҙы моҡсайҙан сығарған һайын:

- Эшһеҙ ятҡансы, ямап ултырһын тип ебәрҙеме икән!- тип илай-илай һәр ойоҡто һөйрәп сығарып ултырыуын күҙ алдына килтергәндә уңайһыҙланып китә ағайыбыҙ.

## Беҙҙең һыйыр ултыра..

Ауылда йәшәүселәр мине аңлап торалар,ҙыр, моғайын. Берәй яҡҡа барып киләйем тиһәң, малыңды ҡалдырырға кеше тапмай аҙапланаһың. Мин дә шулай эҙләнә торғас, курсташым Татьянаға юлыҡтым. Ул һыйырымды һауырға ризалашҡас, шат булып, баш ҡалабыҙға юлландым. Ҡайтҡас, мәрйә курсташымдан һыйырымдың "тәртибен" һорашам.

- Ой, знаешь, - ти был, - сначала никак не давала доить. Кричу: "Стой!" Нет, не может стоять спокойно. Вдруг вспомнила, что твоя корова-то башкирка и как закричу на башкирском: "Ултыр!" Сразу успокоилась. Вот так каждый день её так и успокаивала на башкирском языке,- тип ҡәнәғәт йылмая башҡорт телен "оҫта" белеүсе мәрйә әхирәтем.

## Беҙгә Брежнев килеп өлгөрмәне

Үткән быуаттың етмешенсе йылы. Уҡытыусыларҙың август кәңәшмәһенә үҙ ғүмеремдә тәүге тапҡыр барырға йыйынған көн. Район үҙәгенә барып еткәс тә, юл туҙанынан һаҡлар халаттарыбыҙҙы сисеп, өҫ-башыбыҙҙы рәтләштерҙек тә район мәҙәниәт йортона инеп ултырыштыҡ. Бына бер ваҡыт миңә таныш түгел ағай микрофондан: "Приглашается президиум во главе с Генеральным секретарем Леонидом Ильичом Брежневым",- тимәһенме! Мин шаҡ ҡаттым. Ҡара һин уны, уҡытыусылар кәңәшмәһе тип, Аҡъяр һынлы Аҡъярға килеп етһен сәле! Ҡайһылай өлгөр кеше икән! Мин белмәгән тағы әллә ниндәй яҡшы яҡтары барҙыр әле Генеральный секретарҙың! Сәхнәгә сыҡҡан президиум ағзаларынан район мәғариф бүлеге етәксеһе менән Брежневты ғына таныясаҡмын, тип көтөп ултырам. Әммә Генеральный секретарҙан башҡалары барыһы ла сыҡты, ә ул... юҡ.

- Нишләп һаман сыҡмай икән?- тип һорайым күршемдән.

- Белмәйем, сисенеп өлгөрә алмай яталыр, бәлки, Мәскәү һынлы ерҙән килеп етә алмағандыр, көтәләрҙер,- тип өмөтләнә күршем дә. Ул көндә тағы кемдәр өмөттәре аҡланмай ҡайтҡандыр, уныһын әйтә алмаһам да, ошо ваҡиға иҫкә төшкән һайын, үҙемдең генә түгел, элекке етәкселәрҙең дә бер ҡатлылығына, юҡты бар итеп күрергә маташыуҙарына көлөп тә, асыуланып та ҡуям ҡайсаҡ.

## Ҡартайғас ниҙәр күрербеҙ?

Подольск ҡасабаһынан Сибай-Аҡъяр автобусына ингән Хәнифә апайҙың, ултырыр урын эҙләп, ян-яғына ҡаранып торғанын күргән автобустағы ҡатын:

- Улым, оло кешегә урын бирһәнсе,- ти эргәһендә тәҙрәгә терәлеп бер ни ишетмәмешкә, күрмәмешкә һалышып ултырған егеткә.

Егеттең ишетергә теләмәгәнен һиҙгән Хәнифә апайыбыҙ:

- Ярай, ярай, борсома егетте. Ҡартайғас, уға ла баҫып йөрөргә тура киләсәк бит. Йәш сағында ултырып ҡалһын,- тип баҫып торорға риза була.

## Ике иш буҙа

- Өләсәй, буҙа эсәм,-ти өс йәшлек ейәнсәрем Камила.

Өҫтәлдә торған ике өс литрлыҡ банканың тәүгеһенән буҙа ҡойоп бирәм.

- Юҡ, быныһын эсәм,-тип тиҫкәреләнә ейәнсәрем.

- Улар бер иш бит, эс биргәнде, - тием. - Юҡ, мин ике иште эсәм, - тип икенсе банкалағы буҙаға төртөп күрһәтә ейәнсәрем. Ни хәл итәһең, балаларымды һөйөп ултырырлыҡ ваҡыт та булманы йәш саҡта, исмаһам, ейән-ейәнсәрҙәремде туйғансы иркәләтеп, "шаштырып" алайым, тип, һораған "ике иште" ҡойоп бирергә тура килде. Үәт шулай.

**Нәзиә НУРҒӘЛИНА.**
**Хәйбулла районы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ТАҪТАМАЛ...

## сир сығанағы

■ Лондон иҡтисад һәм сәйәси фәндәр мәктәбе смартфондар һәм интернеттың ата-әсәләр һәм балаларҙың үҙ-ара мөнәсәбәтендәге ролен өйрәнгән. Заман технологияларының ыңғай яғын тапҡан ғалимдар. Интернет менән смартфондар ярҙамында балаға яҡыныраҡ булырға һәм тығыҙ бәйләнеш булдырырға мөмкин икән. Белгестәр 18 йәштән кесерәк балаһы булған 2 мең ата-әсәнән һорау алған. Мәсәлән, ҡайһы бер ата-әсәләр ғаиләнең традицион йолаларын юғары технологиялар менән берләштергән, ҡайһылар аҙна һайын балалары менән фильмдар ҡарай. Күптәр интернеттан бала сәләмәтлеге тураһында мәғлүмәттәр эҙләй, кемдәләр тәрбиә мәсьәләһенә ҡағылғандары ҡыҙыҡһындыра. Балалар, үҙ сиратында, ата-әсәһенә яңы технологияларҙы үҙләштерергә ярҙам иткән.

■ Табиптар иҫкәртә: аш бүлмәһендә ҡул һөртөү өсөн ҡулланылған ябай таҫтамалдар эсәк таяҡсаһы инфекцияһы сығанағы була ала. Әгәр ҙә таҫтамалды һирәк йыуһағыҙ, уның аша сир йоҡторорға була, ти Аризона университеты ғалимдары. Аш бүлмәһендә ҡул, һауыт-һаба, өҫтәлдәрҙе һөрткән таҫтамалдарҙы йыйып, ғалимдар ентекле анализ үткәргән. Эксперттарҙы таҫтамалда микроорганизмдар нисек үрсеүе ҡыҙыҡһындырған. Америка һәм Канадала йәшәүсе ғаиләләрҙән йыйып алынған 82 таҫтамалдың 89 процентында төрлө бактериялар, 25,6 процентында эсәк таяҡсаһы табылған. Эсәк таяҡсаһы оҙаҡ йыуылмаған таҫтамалдарҙа йышыраҡ осраған. Тикшеренеүҙәрҙең авторы билдәләүенсә, күптәр ҡулдарын яҡшылап йыуымай, шуға ла фактик рәүештә улар таҫтамалға бактериялар һөртөп ҡалдыра. Ике көндән бындай таҫтамалда бактериялар һаны арта.

■ Данди университеты билдәләүенсә, яман шеш осрағында генетик мутацияларҙы гәйепләүҙән файҙа юҡ. Бында иммун системаһы үҙенсәлеге мөһим. Мәсәлән, онкология үсешенең иң төп факторы булып иҫәпләнгән генетик мутациялар ни өсөн ир-егеттәрҙең яман шеш менән йышыраҡ ауырыуын аңлата алмай. Иммун системаһы быға асыҡлыҡ индерә ала. Бактиһәң, ир-егеттәрҙең иммун системаһы ҡартайыуға ҡаршы насар көрәшә. Ә был осраҡта яман шеш хәүефе арта. Бындай һығымтаға ғалимдар яман шеш менән ауыраған 18-70 йәштәге 2 млн кешенең мәғлүмәттәрен өйрәнгәндән һуң килгән. Иммун системаһы ҡартайыуының төп сәбәбе - боҙаҡ бизенең кибеүе. Һаҡлаусы Т-күҙәнәктәр ошо биҙҙә барлыҡҡа килә. Күҙәтеүҙәр буйынса, был биҙҙең үлсәме 16 йыл һайын ике тапҡырға кәмей. Был иһә Т-күҙәнәктәрҙең кәмеүенә һәм яман шеш хәүефе артыуына килтерә.

■ Һөттөң составындағы кальций уны кеше сәләмәтлеге өсөн файҙалы итә. Үҙәк Флорида университеты ғалимдары һөттөң зыянын асыҡлаған, улар һөт эсеү менән ревматоидлы артрит араһында бәйләнеш бар, тип иҫәпләй. Һөттә, һыйыр итендә осраған үҙенсәлекле бактерия төрө ошо ауыруға килтерә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашҡан артрит менән сирләгән 100 пациенттың 40 проценты был бактерия менән зарарланған булған. Бынан тыш, был микроорганизмдар Крон ауырыуы хәүефен арттыра. Шуға ла бындай сирҙәр менән яфаланған өлкән йәштәге кешеләргә һөттө һәм һыйыр итен аҙыраҡ ҡулланырға тырышырға кәрәк.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



**Донъя шундай матур һәм сағыу! Бер-береһен алыштырған миҙгелдәр генә әллә күпме төҫтәре менән күҙҙәрҙе иркәләй. Әгәр ҙә күреү һәләте насарайһа, тирә-яҡ тоноҡлана, тормош сифаты түбәнәйә. Сибай үҙәк ҡала дауаханаһының офтальмология бүлеге мөдире, юғары категориялы табип Амур МОТАЛЛАПОВ раҫлауынса, күҙҙәр ҙә һаҡлауға мохтаж. Гәзит уҡыусыларыбыҙға уның менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ**

# КҮҘҘӘРҘӘ...

## бәхет нуры сағылһын

**➔ Амур Хөрмәт улы, һеҙҙең бүлектә халыҡҡа ниндәй төр медицина ярҙамы күрһәтелә?**

- Күҙ ауырыуҙарын дарыуҙар ярҙамында дауалайбыҙ һәм операция яһайбыҙ. Башлыса, катарактаға зарланып киләләр. Катаракта - күҙ яҫмығының (хрусталик) тоноҡланыуы, халыҡ әйткәнсә, күҙгә аҡ һалыуы ул. Яҡтылыҡ нурҙары тотҡарлыҡһыҙ үтһен өсөн күҙ яҫмығы үтә күренмәле булырға тейеш. Ул тоноҡланһа, күреү һәләте кәмей. Уның үҙгәреүе әкрен бара, тәүҙә күҙ бәбәге һорғолтлана, унан күҙ күрмәй башлай. Катарактанан операция ярҙамында ғына ҡотолоп була. Был ауырыу, ғәҙәттә, 60 йәштән өлкәндәрҙе яфалай.

Әгәр ҙә күҙҙә ҡан баҫымы юғары булһа, глаукома тигән сир барлыҡҡа килә. Тәүге осорҙа күҙ тамсылары, дарыуҙар ҡулланыла. Әгәр ҙә пациенттың хәле яҡшырмаһа, операция яһала. Был сирҙе шулай итеп һүрәтләргә мөмкин: йылға үҙәне ҡаплана, һөҙөмтәлә ул һәйбәтләп аҡмай (күреү һәләте насарая), яры бысраҡ һыу менән тула. Оператив юл менән шул йылға йырыла, һөҙөмтәлә һыу аға һәм таҙара (күреү һәләте һаҡланып ҡала). Күҙ күргән саҡта операция яһап өлгөрөргә кәрәк. Югиһә, нервы күҙәнәктәре һәләк була һәм кеше тома һуҡыр булып ҡала. Һунынан уға бер нисек тә ярҙам итеп булмай.

**➔ Бөгөн тормошобоҙҙо компьютер-гаджеттарһыҙ күҙ алдына ла килтереп булмай. Йәш ата-әсәләр ҙур проблема менән осраша: бәләкәстәр телефон, планшет, компьютер даулай. Бирмәһәң, күҙ йәштәре, үпкәләүҙәр. Нимә эшләргә?**

- Был осраҡта ата-әсә үҙе өлгө күрһәтергә тейеш. Әгәр ҙә әсә, балаһы менән шөғөлләнеү урынына, туҡтауһыҙ телефонына текәлһә, ә атаһы эштән ҡайтып, компьютер алдында донъяһын онота икән, баланың талабын аңларға була. Кескәйҙәр ололарҙың һәр аҙымын ҡабатларға ярата бит. Саф һауала йөрөү, бергәләшеп мауыҡтырғыс уйындар уйнау, китап уҡыу ғаиләләге мөнәсәбәтте нығыта, бәләкәсте лә насар ғәҙәттән аралаясаҡ. Кесе йәштән үк күҙгә күп көс төшһә, киләсәктә күреү һәләте түбәнәйәсәк. Телефон һорап мыжыған балаға теләгәнен тотторор алдынан шуны онотмағыҙ. Ете йәшлектәргә көнөнә 10-15 минут компьютер алдында ултырырға мөмкин. Бәләкәйҙәргә заман гаджеттарын бөтөнләй бирмәгеҙ.

**➔ Бөгөн бар йәштәрҙең ҡулында кеҫә телефоны. Күҙгә-күҙ ҡарашып аралашыу, йәнле осрашыу урынына һәр береһе телефон экранына текәлә. Был ҙур социаль проблема. Уның тағы ла икенсе яғы бар - күҙҙәргә зыян киләлер...**

- Ысынлап та, һуңғы осорҙа йәштәрҙең күреү һәләте түбәнәйеүе күҙәтелә, күҙлек кейеүселәр йылдан-йыл артыуға табан бара. Әлеге заманда күптәрҙең эше компьютер менән бәйле, унан бер нисек тә баш тартып булмай, әлбиттә. Әммә ябай ғына талап үтәлһен: ике сәғәт һайын 15 минут ял булырға тейеш. Телефондың сағыу экранына оҙаҡ текәлеү күҙгә насар йоғонто яһай. Йоҡлар алдынан ятҡан килеш ҡараңғыла телефондан оҙон-оҙаҡ уҡып ятыу хатта һуҡырайға илтеүе бар. Шуға күрә, мотлаҡ ут ҡабыҙырға кәрәк һәм сама тураһында онотorға ярамай. Телевизорҙы ла ҡараңғы бүлмәлә ҡарамағыҙ. Ваҡыты-ваҡыты менән күҙ гимнастикаһы эшләп алырға була.

**➔ Контакт линзаһы бик уңайлы. Ә уның зыяны бармы?**

- Гигиена шартын теүәл үтәһәң, линзаны дөрөҫ һаҡлаһаң, уның тик уңайлы яғын ғына тойорһоғоҙ. Әгәр ҙә юҡ икән, конъюнктивит, күҙ бәбәге елһенеүе кеүек күңелһеҙ хәлдәр барлыҡҡа киләсәк. Минән кәңәш - уны иртәнән-кискә тиклем йөрөтмәгеҙ. Мәсәлән, эш ваҡытында - линза, кискеһен күҙлек кейегеҙ. Күҙҙәргә ял кәрәк.

**➔ Гәзит уҡыусыларға ниндәй теләктәрегеҙ булыр?**

- Күреү, ишетеү, тойоу, атлап йөрөү кеүек үк, ҙур бәхет ул. Ана шуның ҡәҙерен белегеҙ. Үкенескә, арабыҙҙа Хоҙай биргән байлыҡтан - күҙ нурынан яҙғандар бар. Ниндәйҙер проблема барлыҡҡа килһә, бар эштәрегеҙҙе ситкә ҡуйып, тиҙ арала күҙ табибына барығыҙ. Ваҡытында мөрәжәғәт итмәү арҡаһында, күңелһеҙ хәлдәргә тарығандар булды. Мәсәлән, күҙгә насар инфекция эләкһә, дауаханаға һуң килеү арҡаһында, уның менән көрәшеп булмай. Алдан әйтеп үтеүемсә, глаукоманың эҙемтәһе насар. Шәкәр диабеты менән ауырыусыларға һаулығына айырыуса игтибарлы булырға кәрәк. Унан иң алда күҙҙәр эҙләгә. Хатта йәштәр араһында ла ошо сир арҡаһында күреү һәләтен юғалтыусылар бар. Ғөмүмән, табип ҡушҡандарҙы теүәл үтәгеҙ, донъяға һау күҙҙәр менән бағып, йылмайып йәшәгеҙ!

**Гүзәл БИКМӘТОВА**
**әңгәмәләште.**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# ҒАШИҠТАР - ИҢ СӘЛӘМӘТ ХАЛЫҠ



**Уртаҡ мөхәббәт төрлө бәләләрҙән ҡотҡара. Немец табибтары шуны асыҡлаған: хатта грипп эпидемияһы ваҡытында ла ғашиҡтар ауырымай икән. Хистәр ташҡыны, күңел күтәренкелеге ялҡынһыныуға ҡаршы торорға һәләтле кортизон гормоны бүлеп сығарыуға булышлыҡ итә. Ә Италия белгестәренең раҫлауынса, яңғыҙлыҡ -йоҡоһоҙлоҡтоң иң төп сәбәбе. Татыу йәшәүселәр йоҡоһоҙлоҡтоң ни икәнен белмәйҙәр.**
**Кемдәндер һине аңлауын һәм ҡыйын саҡтарҙа ҡул һуҙырға әҙер тороуын тойоп йәшәү һәр төрлө күңелһеҙлектәрҙән һаҡлай.**

### Тауышыңды ишетәйем

Бер немец профессоры ҡатын-ҡыҙҙың тауышы буйынса характерын, килешмәгән яҡтарын билдәләүсе тулы бер система булдырған. Бына уларҙың ҡайны берҙәре:

- эскерһеҙ һәм тәрән хистәргә һәләтле булған ҡатын-ҡыҙҙың тауышы һәр ваҡыт таҙа, асыҡ, сабыр һәм һис шикһеҙ, матур яңғырашлы була;
- ягымлы, түбән тауышлы ҡатын-ҡыҙ әңгәмәсеһенә тынысландырғыс тәьҫир яһай. Уға, ғәҙәттә, шулай уҡ эгоистлыҡ сифаттары ла хас. Улар күбеһенсә аҡыллы, талантлы һәм нескә зауыҡҡа эйә була;
- тәбиғи булмаған түбән, тупаҫ яңғырашлы әсе тауыш асыҡ, тура характерлы кеше тураһында һөйләй. "Үҙ дөрөҫлөгөн " дөрөҫләү өсөн ул хатта артыҡ киҫкен дә булырға мөмкин;
- эс бошорғос һалмаҡ тауыш менән һөйләү ғәҙәте сикләнгән аҡыл һәм хистәр ярлылығын күрһәтә;
- үтә яңғырауыҡлы, әсе, киҫкен тауышлы ҡатын-ҡыҙҙан ҡурҡырға кәрәк. Улар хатта матур ғына һөйләшкәндә лә ҡысҡырып һөйләшәләр. Үндәйҙәр бәйләнсек ҡатын, ғауғасы, әрепләшеүсән хужабикә һәм һәр ваҡыт шелтәләп тороусы әсәй буласаҡ.

### Үҙемдеке итәм тиһәң

Ҡатын-ҡыҙ тормошонда төҫ ғали йәнәптәре бик мөһим урын тота. Әгәр уларҙың мәғәнәһен аңлап, белеп һайлаһаң, теләгеңә ирешерлек, һөйгәнеңде ҡоралһыҙландырырлыҡ

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# АРҒЫМАҠЛЫ ХАЛЫҠ БЕҘ!

**Көтмәгәндә танышым сирләп китте. Бармаған дауаханаһы, эсмәгән дарыуы ҡалманы, ә сире сигенергә уйламай ҙа. Тамам аптырауға ҡалған был ханымдың әсәһе миңә шылтырата: "Ҡыҙым, бигерәк ауыр бит әле баламдың хәле. Ни ашауы, ни йоҡоһо юҡ. Йүнләп бер кем менән аралашмай. Ни эшләргә икән?"**



Был ғаилә менән күптән таныш булһам да, донъя мәшәҡәттәренән арына алмау сәбәпле, өйҙәрендә һуңғы тапҡыр ҡасан булғанымды аныҡ ҡына иҫләй ҙә алмайым. Аралашыуыбыҙ ҙа яйлап ҡына телефон бәйләнешенә ҡалып бара ине инде. Киттем хәлен белергә. Бығаса нур бөркөп торған донъяһы ҡотон юғалтҡан, шау сәскәнән торған тәҙрә төптәре бушап ҡалған, көләкәс, күҙҙәре үк көлөп торған танышымдың үҙен дә танырлыҡ түгел. Яурындары төшкән, бер туктауһыҙ уфтана, күп ваҡыт үҙ-үҙен ҡосаҡлап, билдәһеҙ нөктәгә ҡарап уйға бата.

Ул сәй әҙерләгән арала өҫтәл өҫтөндәге китаптарҙы аҡтарам. Луиза Хей, Наталия Правдина, Дейл Карнегиҙыҡылар икән. Кәштә тулы "Нисек бәхетле булырға?", "Үҙеңде тап!", "Үҙеңде ярат!" тигәнерәк китаптарҙы күреп, баш сайҡайым. Аңланым шикелле мин был ҡатындың ауырыуын. Күңел төшөнкөлөгө йәки заманса итеп әйткәндә, депрессия тип атала ул сир. Күп кенә тетрәнеүҙәр кисерергә тура килгәйне шул үҙенә, шулар эҙһеҙ үтмәгән, күрәһең, һаулығында сағылыш тапҡан.

- Ярҙам итәме был китаптар? - Был һорауымдан танышым ҡыйылһыныып, башын ситкә бора.

- Юҡ шул. Күпме аҡсамды һиуға һалдым, ваҡытымды әрәм иттем, ә файҙаһы юҡ. Тәфсирләп, матур итеп яҙылған, тик унда яҙылғандар минә барып етмәй. Был китаптарҙа аҙым һайын "Үҙеңде ярат", "Ошо минуттан алып ярата башла", тигәнерәк һүҙҙәр осрай. Тик...

- Тик үҙеңде ярата башлап булмаймы?

- Был һорауымды уға көләмһерәберәк бирәм, сак ҡына булһа ла кәйефен күтәргем килә. Унан кире, студент саҡта Карнегизы ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡыныҡ, ул автор менән танышлыҡ бар, һуңынан, оло тормошҡа аяҡ баҫҡас, төрлө сетерекле хәлдәр килеп тыуғанда, үҙем дә Хей менән Правдинанан ярҙам эҙләнем. Уларҙың ана шул "Һин - берҙән-бер!", "Бөтә донъя - һинеке!" кеүегерәк һүҙҙәре башта әйләнһә лә, төпкө аңға, күңелгә барып етмәүен аңлап, башҡаса ул китаптарға үрелмәнем. Әллә улар русса булғанға аңламайыммы, тигән уйҙар ҙа булғыланы. Юҡ, рус телен белмәгәнгә түгел, ә беҙҙең уйҙарыбыҙ барыбер иң тәүҙә башҡортса, үҙ телебеҙҙә тыуа бит, шуға күрә лә психология буйынса тап башҡортса яҙылған йәки тәржемәләнгән китап эҙләнем. Тик ул табылманы.

Байтаҡ ваҡыттан һуң ғына ҡулыма Мәрйәм апай Бураҡаеваның "Арғымағы" килеп эләкте. Уның йөкмәткеһен белмәһәм дә, бары тик Мәрйәм апайҙыҡы булғаны өсөн генә күтәреп ҡайтҡайным китапхананан. Сөнки мәктәптә уҡығанда "Тормош һабаҡтары"н алтын урынына күреп ҡосаҡлап йөрөгәнем хәтерҙә, ул китап өйөмдә әле лә һаҡлана.

"Арғымаҡ"тың беренсе битендә яҙылған "Туғаным! Минең йәштәшемме, әллә балам йәшендәһеңме..." тигән һүҙҙәрҙе үҙемде аңлаған, яратҡан иң яҡын кешемдән ишеткәндәй булғайным. Иҫемдә, ул көндө мин бер ҡайҙа ла сыҡманым, берәү менән дә аралашманым, хатта ашауымды онотоп, китапҡа сумдым. "Арғымаҡ"ты уҡый барам, күңелем имләнә, донъям бөтәйә бара. Ул бит шундай ябай, аңлайышлы телдә яҙылған, авторҙың үҙе менән һөйләшеп ултырғандай булаһың. Тормоштағы һәр осраҡҡа, хәл-ваҡиғаға ҡарата бирелгән кәңәштәре ҡайһылай урынлы! Хәҙер күп ваҡыт һорауҙарыма яуап таба алмай, юғалып ҡалырлыҡ мәлдәрҙә, ярай, ана Мәрйәм апай шулай тип өйрәткән бит, ул сабырлыҡ, аҡыл менән еңгән, йә киреһенсә, кәрәк саҡта һүҙен йомоп ҡалмаған, тип күңелемә урынына ултыртам, уйҙарҙы ыңғай итеп көйләй һалам. "Арғымаҡ" күптән инде минең өҫтәл китабыма әйләнде. Ҡат-ҡат асып уҡыйым уны.

Ошоларҙы иҫләп, икенсе юлы танышыма ла "Арғымаҡ"ты алып барҙым. Бер-ике көндән үҙе шылтырата:

- Китаптың тәүге битендә автор: "Туғаным! Дауылдарҙа, бурандарҙа юлдан яҙлығып аҙашҡан кеше кеүек, аптырап, үҙеңә тынысланыр урын таба алмай йөрөгәнеңдә..." - тип, минең үҙемә өндәшкәндәй булды, шул һүҙҙәрҙе уҡығас, ҡыҫҡырып илап ебәрҙем. Югиһә, бәгерем ҡатып илай ҙа алмай башлағайным бит. Әйтерһең дә, автор минең кисерештәремде белеп, йәнемде имләргә тырыша. Минең күптән берәй аҡыллы кеше менән һөйләшеп, уның кәңәштәрен ишеткем килә ине. Авторҙың үҙе менән ошо китап аша аралаштым, күп һорауыма яуап таптым. Һиңә лә ҙур рәхмәт, был китаптың барлығын да белмәй йәшәгәнмен, югиһә...

Был шылтыратыуҙан һуң әллә ниндәй еңеллек кисерҙем үҙем. Танышымдың һауығырына ныҡлы ышандым. Кем белә, бәлки, арабыҙҙа тап уның кеүек хәсрәт кисереүселәр, кәрәк кенә һүҙ көткәндәр барҙыр? Минең кәңәшем шул: һәр кем "Арғымаҡ"ты уҡып сыҡһын ине. Һәм был китап мотлаҡ рәүештә һәр башҡорт уҡырға тейешле йәки китап исемлегенә инергә тейеш, сөнки беҙ тәү сиратта үҙебеҙҙе аңларға, күңелебеҙҙе үҫтерергә, рухыбыҙҙы ныҡытырға, ҡотобоҙҙо һаҡларға өйрәнергә тейешбеҙ. Шул саҡта ғына телебеҙҙе, милләтебеҙҙе һаҡлап ҡала алырбыҙ. Аңлы, аҡыллы, рухлы балалар үҫтерербеҙ. Тормош ауырлыҡтарына ҡаршы тора алмай, күңел төшөнкөлөгөнә, өмөтһеҙлеккә бирелеп ултырыр кешеләрме ни беҙ! Беҙ бит көслө халыҡ! Арғымаҡлы халыҡ. Арғымаҡлы, тимәк, аңлы, рухлы, гәмле, ырыҫлы, моңло, аҡыллы һәм ҡотло!

**Лена ХӘЙРУЛЛИНА.**

көскә эйә булырға мөмкин. Ошо хәйләләрҙең бер нисәһенә күҙ һалып үтәйек.

- Әгәр дуҫығыҙ күңелһеҙләнһә, һеҙҙең менән ҡыҙыҡһынмаһа, ҡуйы һары төҫкә кейенегеҙ. Мөғжизә тиерһегеҙ - ул йоҡонан айныгандай булыр. Етеҙлеге, тормошҡа мөхәббәте кире ҡайтыр.

- Әгәр кемгәлер башығыҙҙы юғалтырлыҡ дәрәжәлә ғашиҡ булһағыҙ, аҡ күлдәк, аҡ костюм кейегеҙ! Аҡ төҫ - яҡтылыҡ, тимәк, тирә-йүндәгеләрҙе гүзәллегегеҙ менән ҡаплап китерһегеҙ.

- Ирегеҙ йоҡоһоҙлоҡтан интекһә, түшәк-ҡаралтыны зәңгәр төҫләнһенә алыштырығыҙ. Зәңгәрһыу төҫ тынысландырыусы, күңелһеҙлектән дауалай торған үҙенсәлеккә эйә.

- Һалҡын кистәрҙә осрашыуға барырға йыйынһағыҙ, ҡыҙыл төҫтәге кейемде һайлағыҙ. Ут төҫө ир-атты йылыта, уның һеҙҙе ҡосаҡларға, иркәләргә теләген уята.

- Әгәр бик зауыҡлы, зыялы кешене үҙегеҙҙеке итергә ниәтләнһәгеҙ, һары кейем кейегеҙ. Нәтижә иҫ киткес булаҫаҡ!

-Бер ваҡытта ла һоро төҫкә төрөнмәгеҙ! Ир-ат яҡты, ҡысҡырып торған матур төҫтәргә генә "ҡаба".

Гүзәл заттар! Тормошоғоҙҙо төҫтәргә байытығыҙ! Үҙ кәйефегеҙҙең рәссамы булығыҙ!

## Мөхәббәт нисек тыуа

Был - ғүмерлек тема! Немец психологтары мөхәббәт бер миҙгел эсендә тыуа, тип иҫбатлай. Улар белдереүенсә, флирттың беренсе өлөшөнә ни бары һигеҙ секунд етә. Шул ваҡыт эсендә ҡатын-ҡыҙ шундайыраҡ мәғлүмәт туплап өлгөрә: оҡшарлыҡмы, ышаныслымы, күҙҙәре ни тураһында һөйләй. Ә ир-ат иһә, ғәҙәттә, уның сибәрлегенә, кәүҙәһенә, аяҡтарына иғтибар итә, эске донъя әле уны ҡыҙыҡһындырмай. Икенсе миҙгелдә инде ҡыҙыҡһыныу уяна. Баш мейеһенә үҙенән-үҙе мәғлүмәт сигналдары килә (ҡулдарын күкрәгенә ҡаушырырға ярата, бер аҙ алға бөкөрәйә төшкән, башын бик юғары тота, ҡулдарын һелтәп һөйләй һ.б.). Был мәғлүмәттәр әле аңлы түгел. Һуңғараҡ ир-егеттең ҡатмарлыраҡ һорауҙар борсой башлай: уны нисек үҙемә ҡаратырға? Ләкин ҡатын-ҡыҙ ярҙамынан башҡа ул бер ни ҙә эшләй алмаясаҡ, сөнки һәр икенсе егет был мәсьәләлә наҙан һәм ҡыйыуһыҙ.

Ҡатын-ҡыҙҙарға, ғәҙәттә, үҙен текә тоторға тырышҡан егеттәр оҡшамай. Ә ир-егеттәр иһә артыҡ ғорур ҡатын-ҡыҙҙы яратмай. Шул уҡ ваҡытта үҙ баһаһын яҡшы белгән гүзәл заттар көслө заттың иғтибарын күберәк йәлеп итә. Ҡыҙыҡһыныу уянған һәм үҙен көслө тип уйлаған ир-егеттәр ундайҙарҙы "һындырыу" уйы менән яна башлай. Йыш ҡына бындай ярыш мөхәббәткә әүерелә. Ләкин ир-егеттәр көслө ихтыярлы ҡатын-ҡыҙҙан ҡурҡа. Тик көслө ҡатын-ҡыҙҙы бындай тормош тиҙ туйҙыра. Сөнки нимә генә тиһәң дә, барыбер ҡатын-ҡыҙҙар көсһеҙ һәм хисле зат. Уларҙың 87 проценты комплименттар ишетергә, сәскәләр алырға, театр-концерттарға саҡырғанды ярата. Ҡатын-ҡыҙҙың көсһеҙ сағынан дөрөҫ файҙаланған ирҙәр мөхәббәттә үҙ бәхеттәрен табырға мөмкин.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

Физик тормоштан һуң тағы ла нимәлер булыуы тураһында клиник үлем кисереүселәрҙең дәлилдәре лә һөйләй. Үҙегеҙ шундай хәлдә ҡалмаһағыҙ ҙа, туғандарығыҙҙан, таныштарығыҙҙан кемдер шундай торошто кисергәндер. Беҙ физик тәндән генә тормайбыҙ һәм үлгәндән һуң "тән" булмаған өлөшөбөҙ нимә эшләй һуң?

Эйнштейнды һәм клиник үлем кисереүселәрҙе тыңлап, тормоштоң үлем менән генә тамамланмауына инанаһың. Көнбайыш һәм көнсығыш фекер мәктәптәре "аяҡ һуҙғандан һуң" тағы нимәләр өйрәнергә тейешлегебеҙ менән килешә. Әммә шул турала тулы ышаныс менән әйтергә була: тормоштоң теге яғында нимә көткәнен белмәгәнлектән, үлем, мөмкинлек булғанда, тормоштоң барлыҡ ҡыуаныстарын алып ҡалыу өсөн стимул булырға тейеш. Әйтергә кәрәк, бик аҡыллы система.

"Был тормошта интекһәм, күктә рәхәтләнермен", тип уйларға ярамай. Иң ҡулайы: "Мәңгелек миңә ниҙәр генә әҙерләһә лә, бөгөнгө бурысым - тормоштан бөгөн һәм хәҙер ҡәнәғәтлек алыу!"

Ҡыҫҡаһы, был тормошта туплаған барлыҡ һәләттәрең һәм сифаттарың - яратыу, маҡсатыңа ынтылыш, башҡаларҙың хәленә инә белеү, хатта кәрзиндәр үреү - беҙҙең менән "теге донъяла" ла ҡаласаҡ. Шуға күрә, был тормошта нимә эшләргә мөмкин - үҙ ҡеүәтеңде һәм мөмкинлектәреңде тулыһынса асып, бөтөн белгәнеңде үҙең менән алыу мөмкинлегенә инаныу.

Нимә ул кешеләрҙе яратыу? Уларҙы нисек барҙар - шулай ҡабул итеү

## Ни өсөн был ергә ебәрелгәнбеҙ?

Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ: ниндәйҙер яратҡан ризығығыҙҙы һатып алдығыҙ ти, ә унда конкурс һәм бүләктәр тураһында мәғлүмәт бар - бары тик түбәндәге һорауға яуап бирергә кәрәк: "Ундан артыҡ һүҙ ҡулланмай ғына тормош мәғәнәһе нимәлә икәненә яуап бирегеҙ". Нимә яҙырһығыҙ?

- Йорт, машина, модалы кейемдәр алыу?
- Миллион эшләп Бермудҡа китеү?
- Гольф уйнағанда тупты соҡорға төшөрөргә өйрәнеү?

Һәр кем күңеле менән тормошта был нәмәләрҙең ул тиклем мөһим түгеллеген аңлай. Беренсе урында һәр саҡ кешеләр торорға тейеш, ә текә машина, модалы аяҡ кейеме - улар бары тик тормош өсөн мотлаҡ булмаған бонус ҡына. Әммә ҡайһы бер ваҡыт төп маҡсаттан айырылып, залға күн мебель йәки яңы стереосистемаға иғтибар йүнәлтә башлайбыҙ. Миллионлаған ирҙәр нимә тип йырлана, нимә тураһында кинолар төшөрәләр? Мөхәббәт һәм битарафыҙлыҡ хаҡында. Шулай булғас, ни өсөн ошо мәңгелек ҡиммәттәр тураһында ниндәйҙер фажиғәнән һуң ғына иҫебеҙгә төшә? Үҙеңең һуңғы минутын йәшәгән кешенең: "Йәл, тағы ла шунса аҡса эшләй алмайым", - тип үкенгәнен ишеткәнегеҙ бармы? Бындай минутта кешеләр ғәҙәттә: "Балалар, әсәйегеҙҙе онотмағыҙ", - ти. Шулай итеп, "Ни өсөн был донъяға килгәнбеҙ?" тигән һорауға төп яуап: "Бер-беребеҙҙе яратырға өйрәнер өсөн".

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**



## 19 ФЕВРАЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 XXIII зимние Олимпийские игры в Пхенчхане. Фигурное катание. Танцы (короткая программа).
10.10 "Жить здорово!" (12+).
11.00, 03.05 "Модный приговор".
11.50, 23.30 XXIII зимние Олимпийские игры в Пхенчхане.
14.00, 15.15, 16.45, 18.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.45 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Вольная грамота". 1-я и 2-я серии. Исторический сериал (16+).
02.00 "Медсестра". 9-я и 10-я серии. Драматический сериал (12+).
03.00 Новости.
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.50 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00, 03.25 "Тайны следствия". Сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Кровавая барыня". 1-я и 2-я серии. Историко-драматический сериал (16+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.00 "Чуркин". Худ. фильм (12+).
02.30 "Поцелуйте невесту!" Мелодраматический сериал (12+).

### БСТ

**Профилактика на канале.**
**14.00 Итоги недели.**
**14.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 22.00 Новости.**
**16.45 "Интервью" (12+).**
**17.00 "Наши годы" (12+).**
**17.20 "Выборы-2018" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**18.30, 22.45 Новости (на башк. яз.).**
**19.00 "Полезные новости" (12+).**
**19.15 Хоккей. Товарищеский матч. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Нефтехимик" (Нижнекамск).**
**22.30 "Герои спорта" (6+).**
**23.15 "Автограф" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Вариант "Омега". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бәхетнамә" (12+).**

## 20 ФЕВРАЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00, 09.15 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
10.15 "Жить здорово!" (12+).
11.05, 03.55 "Модный приговор".
12.15, 23.35 XXIII зимние Олимпийские игры в Пхенчхане.
14.25, 04.50 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
15.15, 18.25, 03.05 "Время покажет" (16+).
16.15 XXIII зимние Олимпийские игры в Пхенчхане. Биатлон. Смешанная эстафета.
18.05 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Вольная грамота". 3-я и 4-я серии. Исторический сериал (16+).
01.55 "Медсестра". Драматический сериал (12+).

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
06.00 XXIII зимние Олимпийские игры в Пхенчхане. Фигурное катание. Танцы. Произвольная программа.
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
13.00 XXIII зимние Олимпийские игры в Пхенчхане. Фигурное катание.
14.50 "Тайны следствия". "Гоп-стоп". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Кровавая барыня". 3-я и 4-я серии (16+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.00 "Поцелуйте невесту!" Мелодраматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 12.00, 17.20 "Выборы-2018" (12+).**
**10.05 "Кортик". Сериал (6+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.15 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму".**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ" (6+).**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.00 "Дознание" (16+).**
**17.45 "Орнамент".**
**18.00 "Бай" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Автограф" (12+).**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Башкорт йыры представляет..." (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Вариант "Омега". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бәхетнамә" (12+).**

## 21 ФЕВРАЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 XXIII зимние Олимпийские игры в Пхенчхане. Фигурное катание. Женщины (короткая программа). Фристайл. Ски-кросс. Мужчины.
11.00 "Модный приговор".
11.50, 23.35 XXIII зимние Олимпийские игры в Пхенчхане.
13.00 XXIII зимние Олимпийские игры в Пхенчхане. Лыжные гонки. Мужчины. Женщины. Командный спринт.
14.00 Новости (с субтитрами).
14.20 XXIII зимние Олимпийские игры в Пхенчхане. Лыжные гонки. Мужчины. Женщины. Командный спринт.
16.00, 04.05 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
16.55, 18.25 "Время покажет" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Вольная грамота". Исторический сериал (16+).
01.55 "Медсестра". Драматический сериал (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.50 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 16.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". "Не сидите на столе". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Кровавая барыня". 5-я и 6-я серии (16+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым". Ток-шоу (12+).
02.00 "Поцелуйте невесту!" Мелодраматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 12.00, 17.20 "Выборы-2018" (12+).**
**10.05 "Кортик". Сериал (6+).**
**11.00, 12.05, 17.00 "Это мы!" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 12.30 "Орнамент" (6+).**
**12.45 Хоккей. Товарищеский матч. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Нефтехимик" (Нижнекамск).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра".**
**16.45 "Интервью" (12+).**
**17.45 "Йөрәк һүҙе". Политический альманах (6+).**
**18.00 "Тел асҡысы" (6+).**
**18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Алтын тирма".**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Йөрәк һүҙе". Итоговый вечер поэтического поединка (6+).**
**01.30 "Вариант "Омега". Худ. фильм (12+).**

## 22 ФЕВРАЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00, 09.15 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
10.15 "Жить здорово!" (12+).
11.05, 04.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет" (16+).
13.15 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.10 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 XXIII зимние Олимпийские игры в Пхенчхане. Шорт-трек. Мужчины. 500 м. Финал. Женщины. 1000 м. Финал.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.35 "Голос. Дети". Новый сезон.
23.25 "Вечерний Ургант" (16+).
00.20 "Исчезнувшая". Худ. фильм (16+).
03.15 "Любовное гнездышко". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.50 "О самом главном". (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Кровавая барыня". 7-я и 8-я серии (16+).
243.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым". Ток-шоу (12+).
02.00 "Поцелуйте невесту!" Мелодраматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 12.00, 17.20 "Выборы-2018" (12+).**
**10.05 "Кортик". Сериал (6+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (12+).**
**12.05 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Бай" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ" (6+).**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.00 "Моя Республика" (12+).**
**17.45 "Современник".**
**18.00 "Автограф" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Башкорттар" (12+).**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Вариант "Омега". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
02.00 "Бәхетнамә" (12+).

## 23 ФЕВРАЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.20 "Россия от края до края" (16+).
07.05 "Маршалы Победы" (16+).
09.15 XXIII зимние Олимпийские игры в Пхенчхане. Фристайл. Ски-кросс. Женщины. Финал.
10.55 "Черные буллаты". Сериал (16+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Черные буллаты". Продолжение сериала (16+).
15.15 "Двадцать восемь панфиловцев". Военная драма (12+).
17.15 Концерт, посвященный фильму "Офицеры", в Государственном Кремлевском Дворце".
19.10 "Офицеры". Военная драма.
21.00 "Время".
21.30 "Три дня до весны". Военная драма (12+).
23.25 "Полярное братство". Фильм Валдиса Пельша.
00.35 "Единичка". Худ. фильм (12+).
02.40 "Все без ума от Мэри". Мелодрама (16+).
04.55 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1

04.00 "Опять замуж". Худ. фильм (12+).
06.00 XXIII зимние Олимпийские игры в Пхенчхане. Фигурное катание. Женщины. Произвольная программа.
11.00, 19.30 "Вести".
11.20 "Третья жизнь Дарьи Кирилловны". Сериал (12+).
15.10 Праздничный концерт ко Дню защитника Отечества (12+).
17.10 XXIII зимние Олимпийские игры в Пхенчхане. Хоккей. 1/2 финала. Фигурное катание.
20.25 "Салют-7". Драма (12+).
22.50 "Экипаж". Фильм-катастрофа (6+).
01.30 "Охота на пиранью". Боевик (16+).

### БСТ

**07.00 "С праздником, защитники Отечества!" Концерт (12+).**
**07.45, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Фиксики".**
**08.45 Спектакль "Мальчишки" (6+).**
**09.15 "Конная гвардия: умирает, но не сдается..." (12+).**
**10.05 "Кортик". Сериал (6+).**
**11.00 "Хазина о Хазине".**
**11.30 Песни маленьких солдат.**
**12.00 В.Распутин. "Живи и помни" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.15 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Дети-герои" (6+).**
**16.30 "Генерал М.Шаймуратов" (12+).**
**17.00 "Йома".**
**17.30, 19.00 "Легенды Урала". Концерт этнической музыки (12+).**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Страна Северных Амуров". Победитель Всероссийского конкурса "СМИротворец" (6+).**
**20.45 "Герои спорта" (6+).**
**21.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Взять живым". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 24 ФЕВРАЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 08.00 Новости.
06.10 "Двадцать восемь панфиловцев". Военная драма (12+).
08.10 XXIII зимние Олимпийские игры в Пхенчхане. Сноуборд. Мужчины. Женщины. Параллельный гигантский слалом. Финал. Лыжные гонки. Мужчины. 50 км. Масс-старт.
14.00 Новости (с субтитрами).
14.15 XXIII зимние Олимпийские игры в Пхенчхане.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.50, 21.20 "Сегодня вечером" (16+).
21.00 "Время".
23.00 "Поклонник". Триллер (18+).
00.45 "Вечное сияние чистого разума". Драма (16+).
02.45 "Россия от края до края" (16+).
03.30 "Модный приговор".
04.25 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1

05.25 "Срочно в номер! На службе закона". Сериал (12+).
07.10 "Живые истории".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 "Вести".
11.20 "Экипаж". Фильм-катастрофа (12+).
14.00 "Салют-7". Драма (12+).
16.25 "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика".
18.00 "Привет, Андрей!". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Двойная ложь". Драматический сериал (12+).
00.55 "Дама пик". Триллер (16+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 17.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00, 15.50, 20.50 "Выборы-2018" (12+).**
**08.10 "Богатырша" (6+).**
**09.30 "Аль-Фатиха" (12+).**
**10.00, 22.00 "Свой вес" (16+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15, 13.15 "Учу башкирский язык" (6+).**
**11.30 "Следопыт" (12+).**
**12.00 "Тәмле" (12+).**
**13.00 "Йөрәк һүҙе". Поэтический альманах (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байык" представляет..." (12+).**
**16.45 "Угатар". Конкурс на кубок "Тамыра" по стрельбе из традиционного лука (6+).**
**17.55 Волейбол. Чемпионат России. Суперлига.**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сенгелдэк".**
**20.30 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**21.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.30, 02.15 "Итоги недели" (на башк. яз.).**
**23.15 "Башкорт йыры представляет..." (12+).**
**24.00 "Че. Аргентинец". Худ. фильм (16+).**

## 25 ФЕВРАЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.30 XXIII зимние Олимпийские игры в Пхенчхане. Бобслей. Четверки. Мужчины.
08.30 "Дачная поездка сержанта Цыбули". Худ. фильм.
10.00 Новости.
10.20 "В гости по утрам" с Марией Шукшиной.
11.20 "Дорогая переДача".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 На XXIII зимних Олимпийских играх в Пхенчхане.
14.00 "Я могу!" Шоу уникальных способностей.
16.00 Церемония закрытия XXIII зимних Олимпийских играх в Пхенчхане. Прямой эфир.
18.00 "Что? Где? Когда?". "Дети XXI века".
19.10 "Звезды под гипнозом" (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Клуб веселых и находчивых". Высшая лига (16+).
00.45 "Девичник в Вегасе". Комедия (18+).
03.05 "Один дома: праздничное ограбление".

### РОССИЯ 1

04.10 "Сам себе режиссер".
05.00, 03.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
05.30, 17.00 XXIII зимние Олимпийские игры в Пхенчхане. Фигурное катание. Показательные выступления.
08.05 "Утренняя почта".
08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.25 "Сто к одному".
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 "Вести".
11.30 "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика".
13.10 "Яблочко от яблоньки". Мелодрама (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Забег" (12+).
01.25 "Там, где есть счастье для меня". Мелодрама (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00, 15.50, 20.50 "Выборы-2018" (12+).**
**08.10 Сборник советских мультфильмов.**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Перекличка" (6+).**
**10.15 "Выше всех!" (6+).**
**10.30 "Ал да гөл" (6+).**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Байтус" (6+).**
**11.15 "Фанташ" (6+).**
**11.30 "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Алтын тирма".**
**12.30 "Итоги недели" (на башк.яз.).**
**13.15 "Учу башкирский язык" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Еще вьется над крышей дымок..." (12+).**
**15.30 "Башкорттар" (6+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 Презентационный концерт телеканала "Курай" (12+).**
**20.15 "Полезные новости" (12+).**
**20.30 "Моя Республика" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 "Итоги недели".**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Че. Партизан". Худ. фильм (16+).**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ЯҢЫ ДИСК




**Өфөлә Башҡортостан Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры "Ел тыуҙырған моң" тип аталған компакт-дискыһының презентацияһын үткәрҙе.**

Оркестр уйнаған көйҙәрҙе дискыға яҙҙырыуға Халыҡ уйын ҡоралдары оркестры етәксеһе һәм төп дирижеры Линар Дәүләтбаев, композиторҙар Урал Иҙелбаев менән Шәүрә Сәғитова, ҡурайсы, оркестрҙың солисы Артур Ғайсаров, саун-продюсер Михаил Кузмичевтың хеҙмәте һалынған. Диск Нур Дауытов, Илдар Хисаметдинов, Урал Иҙелбаев, Шәүрә Сәғитова кеүек башҡорт композиторҙары эшкәрткән башҡорт халыҡ йырҙары һәм көйҙәренән, шулай уҡ Урал Иҙелбаевтың композитор әҫәрҙәренән тора. Солистар - Башҡортостандың һәм Татарстандың атҡаҙанған артисы Илһам Вәлиев, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Артур Ғайсаров, төрлө бәйгеләр лауреаты Аяз Нухов.

Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө менән берлектә лә альбом яҙҙырырға планлаштыра. Бөгөн иһә улар оркестрҙың видео-презентация клибын төшөрөү менән мәшғүл. Былтыр "Ел тыуҙырған моң" Халыҡ-ара фестивалендә ҡатнашыусы Үзбәкстан, Монголия, Молдова, Ҡырғыҙстан һ.б. артистарын саҡырып, махсус концерттар эшләргә лә уйлайҙар. Был көндө баш ҡала тамашасыһы иғтибарына 2016-2017 йылдарҙа бөтөн Рәсәйҙе урап сыҡҡан уникаль проект - "Ел тыуҙырған моң" тәҡдим ителде.

# БӨЙӨК РӘССАМ ИНЕ УЛ



**Нестеров исемендәге Башҡорт дәүләт художество музейында күренекле башҡорт рәссамы Әхмәт Фәтҡулла улы Лотфуллиндың күргәҙмәһе эшләй. Күргәҙмә бөйөк рәссамдың тыуыуына 90 йыл тулыуға арналған.**

Сараны асыу тантанаһында БР мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова ла ҡатнашты һәм Әхмәт Лотфуллиндың исеме Башҡортостанда ғына түгел, тотош донъяға билдәле булыуын хәтергә алды. "Рәссамдың тыуған еренә, халҡына сикһеҙ һөйөүе, Башҡортостанына тоғролоғо уның ижадының төп темаһын билдәй. Был күргәҙмә сәнғәтте яратыусылар өсөн мөһим ваҡиға", - тине ул. 2018 йылда Башҡортостан Башлығы грантына Өфөлә Әхмәт Лотфуллинға һәйкәл ҡуйыласаҡ. Ул Пушкин урамында, Өфө сәнғәт училищеһы эргәһендә буласаҡ. Сарала рәссамдың яҡташтары - әбйәлилдәр, тормош иптәше Луиза Лотфуллина, уҡыусылары - Башҡортостандың атҡаҙғанған рәссамдары Йәлил Сөләймәнов, Әмир Мәзитов та булды. Күргәҙмә Нестеров музейында һаҡланған картиналарҙан һәм шәхси коллекцияһынан бер нисә эштән тора. Хронологик йәһәттән экспозиция оҫтаның ярайһы ҙур ғына ижади осорон - 1956-1998 йылдарҙы үҙ эсенә ала. Унда портреттар, пейзаждар, натюрморттар һәм төрлө жанрҙағы композициялар урын алған. Беренсе башҡорт рәссамы Ҡасим Дәүләткилдиевтың ижади традицияларын дауам итеүсе булараҡ, Әхмәт Лотфуллин уны тағы ла киңәйтеп, башҡорт кешеһенең тормошон тағы ла нескәрәк асыуға өлгәшә алған оҫта.

# ЕТЕМ БАЛАЛАР ЯРЫША



**Өфө ҡалаһынан Анжелика Лазарева "Ты - супер!" вокал конкурсында сығыш яһаны. Анжелика - ғаиләгә тәрбиәгә алынған етем бала. "Ты - супер!" йыр бәйгеһендә уңышлы сығыш яһап, ул артабанғы турға үтте.**

Анжелика Элла Фицджеральд репертуарынан джаз стилендәге йыр башҡарып жюри ағзаларының күңелен арбаны. Тәүҙә йәшел төймәгә Сергей Лазарев һәм Юлианна Караулова баҫты, артабан композитор Игорь Крутой ҡушылды. Ә композитор һәм продюсер Виктор Дробыш Анжеликаны йәшел төймәгә баҫырға үҙен саҡырҙы. Жюри ағзаларынан рөхсәт алғас, ҡыҙыҡай тағы бер йырҙың өлөшөн йырлап күрһәтеп, артабанғы турға үтте. Анжелика өс йәштән ғаиләгә тәрбиәгә алынған. Биш йәштән музыка менән шөғөлләнә һәм йырлай. Егерме икенсе һанлы мәктәптә уҡыуынан тыш, Нариман Сабитов исемендәге 1-се музыка мәктәбендә фортепиано класында шөғөлләнә. Унан тыш, сәнғәт училищеһындағы музыкаль мәктәптә джаз һәм эстрада вокалы класында белем ала. Бик күп конкурстарҙа ҡатнашҡан. "Ты - супер!" - ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балалар өсөн халыҡ-ара вокал конкурсы НТВ телеканалында үтә. Быйыл балаларҙың сығыштарын композитор һәм продюсер Игорь Крутой һәм Виктор Дробыш, билдәле йырсылар Сергей Лазарев һәм Юлианна Караулова баһалай.

# БӘЙГЕЛӘ ҠАТНАШ



**БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге һәм Үҙәктең Мәҙәниәт һарайы Башҡортостан Республикаһында Ғаилә йылы сиктәрендә "Тере һүҙ" тип аталған Республика йәштәр поэтик оҫталыҡ конкурсы иғлан итә.**

Конкурс һәләтле йәштәрҙе асыҡлау, художестволы ижад саралары ярҙамында йәштәрҙә зауыҡ тәрбиәләү маҡсатында үткәрелә. Нәфис һүҙ өҫтөндә эшләүҙең традицион һәм инновацион формаларын һәм ысулдарын үҫтереү, нәфис һүҙ жанрын популярлаштырыу, йәштәрҙе нәфис һүҙ сәнғәтенә ылыҡтырыу, милли йолаларҙың күсәгилешлеген һаҡлау, йәш быуынды милли әҙәбиәттең иң күркәм өлгөләре менән таныштырыу маҡсатында ойошторолған бәйгенең тәүге этабы 23 февралгә тиклем дауам итә. Икенсе этап 3 мартта, Гала-концерт һәм бәйгенең еңеүселәрен билдәләү 4 мартта буласаҡ.

Конкурста 15-35 йәшлек йәштәр ҡатнаша ала, улар һөнәре буйынса профессиональ актер йәки мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһе белгесе булмаҫҡа тейеш. Бәйгелә ҡатнашыу өсөн ике төрлө жанрҙағы поэтик әҫәр әҙерләп, видео төшөрөргә кәрәк, уларҙың дөйөм оҙайлығы 6 минуттан артмаһын. Әҫәрҙәрҙең темаһы - әсәлек, аталыҡ, бәхетле балалыҡ, һөйөү һәм ғаилә ҡиммәттәре. Ғаризалар 23 февралгә тиклем fest.rcnt@mail.ru электрон адресына ҡабул ителә.

# ТАҒЫ БЕР БӘЙГЕ




**"Ҡош юлы" йәштәр хәрәкәте һәм "Тамыр" балалар-үҫмерҙәр телеканалы "Ҡош юлы. Балалар" башҡорт бард йыры яңы телевизион конкурсы өҫтөндә эшләй.**

Ошо көндәрҙә проекттың тәүге сығарылыштары төшөрөлдө. Ете остаз: Артур Кәбиров, Минзәлә Яхина, Тимур Ямалов, Альбина Шәмсетдинова, Ришат Сөләймәнов, Ринат Абдулов һәм Тимур Йосопов социаль селтәрҙә һайлап алыу турын үткән балаларҙан үҙ командаһын төҙөнө. "Ошондай дәррәү һәм һәләтле йәмәғәтселәрҙе күргәнем юҡ ине, - ти "Тамыр" телеканалы директоры Гөлназ Ҡолһарина. - Артур Батыршин матур логотип эшләгән, балалар ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә шәп видеороликтар төшөргән. "Самрау" нәшриәте балалар өсөн футболкалар әҙерләгән. Билдәле фоторәссам Эдуард Дилмөхәмәтов та ҡушылды. Проекттың режиссеры - Ләйсән Мәзитова. Минеңсә, балалар араһында башҡорт телен популярлаштырыуға йүнәлтелгән заманса проект килеп сыҡты". Ете остаз һәм 16 үҫмер бард алышына әҙерләнә башлаған да инде. Башҡортостан юлдаш телеканалында проект 2 мартта - "Тамыр"ҙың тыуған көнөндә башлана.

# БЕЗРУКОВ КИЛДЕ...



**Башҡортостан балалар театрҙарына ярҙамға федераль ҡаҙнанан 5 миллион һум ала. Был турала республикаға сәфәре барышында Рәсәйҙең халыҡ артисы, актер Сергей Безруков хәтергә төшөрҙө.**

Владимир Путиндың ышаныслы кешеһе, Мәскәү губерния драма театрының художество етәксеһе менән осрашыу Рәсәй Президенты вазифаһына дәғүәсенең төбәк һайлау штабында үтте. Нәҡ артистың башланғысы буйынса Рәсәйҙә балалар театрҙарына күберәк ярҙам итә башланылар. Былтыр Сергей Безруков "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Театрҙар - балаларға" проекты инициаторы булып сығыш яһаны. Ул проекттың йәмәғәт советын етәкләне. Быйыл ул "Кесе Ватан мәҙәниәте" берләшкән проектының бер өлөшөнә әйләнде. "Иң мөһиме өс проектты берләштерҙеләр, әммә уларҙың финанслауын түгел. Финанслауҙы берләштерһәләр, балалар театрҙарына ҡалған аҡсалар ғына тейер тип ҡурҡҡайным. Әлегә Башҡортостанға биш миллион һум самаһы бүленгән, әммә өҫтәмә финанслау буласаҡ", - тип аңлатты Безруков. Бөгөн балалар театрҙары заманса кинотеатрҙар менән бер тиң кимәлдә үҙен күрһәтә алһын өсөн, уларға ярҙам итеү айырыуса көнүҙәк, тигән фекерҙә артист. "Күп кенә театрҙарға ҡиммәтле спектаклдәр генә түгел, капиталь ремонт та кәрәк. Балаларҙың театр хаҡында тәьҫораттары ниндәй залда булыуынан, ниндәй ултырғыстарҙа ултырыуынан башланырға тейеш. Балалар өсөн бөтә нәмәне ныҡ матур һәм ҙур итеп эшләргә кәрәк, сөнки был уларҙың сәнғәт һәм театр хаҡында тәүге тәьҫораты", - тине актер.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Февраль (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 19 (3) дүшәмбе | 7:01 | 8:31 | 13:30 | 16:59 | 18:29 | 19:59 |
| 20 (4) шишәмбе | 6:59 | 8:29 | 13:30 | 17:01 | 18:31 | 20:01 |
| 21 (5) шаршамбы | 6:57 | 8:27 | 13:30 | 17:03 | 18:33 | 20:03 |
| 22 (6) кесе йома | 6:55 | 8:25 | 13:30 | 17:05 | 18:35 | 20:05 |
| 23 (7) йома | 6:52 | 8:22 | 13:30 | 17:07 | 18:37 | 20:07 |
| 24 (8) шәмбе | 6:50 | 8:20 | 13:30 | 17:09 | 18:39 | 20:09 |
| 25 (9) йәкшәмбе | 6:48 | 8:18 | 13:30 | 17:11 | 18:41 | 20:11 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ИҒЛАН*

В связи с утерей квитанции 99/002371, выданную СПАО РЕСО-ГАРАНТИЯ, считать недействительной.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**17 февраль "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия 12+

**18 февраль "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия 12+

**20 февраль "Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим) 12+

**21 февраль "Бер мәл санаторийҙа..."** (Н. Ғәйетбаев), комедия 12+

**22 февраль "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. Башлана 11.00 6+

**22 февраль "Ике төш"** (М. Багаев), драма 12+

**23 февраль** "Ул бит кисә ине" (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**20 февраль "Йәләлетдин атай"** (М. Кәрим), уйланыу 12+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**21 февраль "Вәғәҙә итәм"** - йырсы, халыҡ-ара һәм республика конкурстары лауреаты Рифат Шәрәфетдиновтың концерты. Ҡатнашалар: Фәдис Ғәниев, Лилиә Биктимерова, Ришат Төхвәтуллин, Гөлназ Асаева, Хәлит Фәтихов, Азат Биксурин һ.б.

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**17 февраль "Маша и Медведь"** (Г. Ландау, В. Швембергер) 0+

**18 февраль "Муха-Цокотуха"** (И. Романов) 0+

**Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00**

**17, 18 февраль "Принцесса Крапинка"** (А. Шмидт). Башлана 16.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**17 февраль "Һөйәрҙәргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов), комедия 12+

**21, 22 февраль Премьера "Аһ, ошо ғашиҡтарҙы!"** (Р. Кинйәбаев), комедия 12+

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҠАМУСЫБЫҘ БАР...



**Энциклопедия - ул китаптарҙың китабы, тиҙәр. Материалдарҙы әҙерләү, уларҙы дөрөҫ итеп бирә белеү йәһәтенән дә был баҫмалар китап-нәшер оҫталығының иң юғары үре иҫәпләнә. Шулай ҙа энциклопедистика фәне үҫешенең мөһим үҙенсәлеге шунда - ул теге йәки был милләттең дөйөм мәҙәни һәм фән кимәленең юғарылығы күрһәткесе. Был йәһәттән беҙ үҙебеҙҙе бәхетле халыҡ тип иҫәпләй алабыҙ. Сөнки республикала "Башҡорт энциклопедияһы" тип аталған дәүләт ғилми-нәшриәт комплексы эшләп килә. 25 йыллыҡ юбилейын ниндәй уңыштар менән ҡаршылай, ниндәй уй-ниәттәр менән йәшәй комплекс, ошо турала уның директоры Уйылдан Ғилман улы СӘЙЕТОВ һөйләй.**

- Төбәк ғилми-нәшриәт комплексы ошо ваҡыт эсендә төрлә энциклопедиялар, һүҙлектәр һәм башҡа баҫмалар әҙерләне. Уларҙың һәр береһе уҡыусыға яҡшы таныш. Әйтәйек, "Башҡортостан. Ҡыҫҡа энциклопедия" башҡорт һәм рус телдәрендә баҫылды, уларҙың онлайн-версияһы ла эшләнде. Шулай уҡ был баҫмаларҙың CD форматы ла бар. Ете томдан торған "Башҡорт энциклопедияһы" башҡорт донъяһында уникаль күренеш булды, быйыл уның етенсе томы сығасаҡ. Шулай уҡ уның электрон версияһы ла бар. Милли батырыбыҙҙың тормошона һәм ижадына арналған "Салауат Юлаев" энциклопедияһы, Йылайыр, Баймаҡ, Ишембай, Хәйбулла, Әбйәлил райондарына, Сибай ҡалаһына арналған энциклопедиялар, тематик энциклопедиялар - "Башҡорттарҙың хәрби тарихы", "Башҡортостан халыҡтары", "Салауат газпром нефтехим", "Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты", "Башҡорт комсомолы" ғилми учреждениеның эшмәкәрлеген яҡшы күрһәтеп тора.

Былтыр Рязань ҡалаһында үткән "Читающий мир" Төбәк-ара милли китап фестивале сиктәрендә үткән "Йыл китабы" конкурсы лауреаты булдыҡ. "Башҡорт комсомолы" энциклопедияһы "Йәштәрҙең патриотик тәрбиәһенә өлөш индергән өсөн" дипломы менән бүләкләнде. Фестивалдә илдән 21 төбәгенән 52 нәшриәт ҡатнашты. Был баҫмала Башҡортостан территорияһында комсомол барлыҡҡа килеүе һәм уның үҫеше тарихы сағылған. Хронологик сиктәр XX быуат башындағы ваҡиғаларҙан башланып, 1990 йылдарҙы үҙ эсенә ала. Республикалағы комсомол үҫеше тарихы ил тарихына бәйләп бирелә, унда комсомолецтарҙың хәтирәләре, комсомол наградалары, плакаттары, хатта йырҙары бар. Энциклопедия шуныһы менән үҙенсәлекле, унда архивтарҙа эшләү һөҙөмтәһендә табылған яңы мәғлүмәттәр күп, был иһә башҡорт комсомолы тарихына яңыса ҡарау мөмкинлеге бирә.

Шулай уҡ 2017 йылда Киров ҡалаһында "Гуманитар өлкәлә иң яҡшы ғилми китап" Халыҡ-ара конкурсында профессор Нәзир Ҡолбахтиндың 5 китаптан торған һайланма әҫәрҙәре "Тарих; археология; этнография" номинацияһында еңеүсе булды. Авторға һәм уның китаптарын нәшер иткән "Башҡортостан энциклопедияһы" комплексына дипломдар тапшырылды. 5 китаптан торған был баҫма уҡыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты, тип ышанам. "Рус батшаларының башҡорттарға грамоталары", "Башҡортостандың тау сәнәғәте. XVIII быуат", "Башҡорт тау-сылары Тасимовтар", "Башҡортостан халҡының 1767-1768 йылдарҙағы Ҡанундар йыйылмаһы комиссияһына наказы", "Юлай-атаман, сардар Салауат, Кинйә Арыҫланов" - китаптарҙың исемдәре үҙе үк саҡырып тора.

2015 йылдан "Башкирская энциклопедия.рф" сайтында рус телендәге күп томлы "Башҡорт энциклопедияһы"-ның электрон версияһы эшләй ине. Хәҙер ошонон нигеҙендә киң масштаблы проекттарҙың береһе - "Башҡортостан" ғилми порталы өҫтөндә эш бара. Был ресурс республиканы федераль һәм халыҡ-ара кимәлдәге мәғлүмәти киңлектә танытасаҡ. Мәғлүмәттәр башҡорт, рус, инглиз телдәрендә буласаҡ. Был портал аша онлайн-энциклопедияларға, башҡа мәғлүмәт базаларына сығып буласаҡ, тимәк, уларҙы ла берләштерәсәк. Был әлегә төбәк ресурсы буласаҡ. Киләсәктә иһә ул Рәсәй милли интерактив порталына тоташа аласаҡ.

Шулай уҡ "Республика Башкортостан" тигән рус һәм инглиз телдәрендәге энциклопедия әҙерләнә. Бынан тыш, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы "Мостай Кәрим" тип аталған энциклопедия донъя күрәсәк. Был комплекс тарихында беренсе тапҡыр әҙәби энциклопедия буласаҡ ул. 2020 йылдағы Бөтөн донъя фольклориадаһына "Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының фольклоры" тигән баҫма әҙерләйбеҙ.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ҺҮҘ - ҺУҒАН ҠАБЫҒЫНДАЙ...

Бала уңған ҡатындың бер ҡулын бәйләй, уңмаған ҡатындың ике ҡулын да бәйләй.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

"Аҙна буйы бер генә донъя һәләкәте лә булманы - был гәзиттәрҙе ниңә һатып алам һуң мин?!" тип ҡысҡырған ти бер гәзит уҡыусы.

**(Карел Чапек).**

Хыянат үҙе үк мөхәббәт тураһында һөйләй. Былай таныш ҡына булған кешегә хыянат итеп булмай бит.

**(Марина Цветаева).**

Мин ғәйбәттәргә ҡаршы түгелмен. Ғәйбәт кешегә ҡыҙыҡһыныу уята.

**(Оливер Хассенкамп).**

Һине өндәшмәгәндә аңламаған кеше һөйләшкәндә аңлармы икән?

**(Эльберт Хаббард).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше кәңәш һорап аҡһаҡалға килә һәм:**

**- Мин түҙемлегем һуңғы сиккә еткән кешемен. Ҡатыным, балаларым һәм туғандарым менән бергә бәләкәй генә, бер бүлмәнән торған йортта йәшәйбеҙ. Бер-беребеҙгә ҡысҡырышабыҙ, асыуланабыҙ, талашабыҙ. Аҡылдан яҙып барам, нервылар шартлап өҙөләргә тора. Ни эшләргә миңә, әйтсе, аҡһаҡал?- ти ул.**

**Бер аҙ уйлап торғандан һуң аҡһаҡал шулай ти:**

**- Һин мин кәңәш иткәндә эшләргә вәғәҙә бирәһеңме?**

**- Вәғәҙә бирәм, - ти кеше, - һеҙ әйткәндәрҙең барыһын да үтәйәсәкмен...**

**- Ярай, улайһа. Ҡуранда малдарың бармы?**

**- Бар. Һыйыр, кәзәләр, тауыҡтар...- тип һынап китә кеше.**

**-Уларҙың барыһын да үҙегеҙ йәшәгән өйгә күсер. Бер аҙнанан килерһең, - тип һүҙен тамамлай аҡһаҡал.**

**Кеше аптырап ҡала, әммә хөрмәтле аҡһаҡалға вәғәҙә биреп өлгөргән бит, уны үтәмәй сараһы юҡ. Шуға ла өйөнә ҡайта ла аҙбарҙағы хайуандарын йортона ҡыуалап индерә. Бер аҙна үткәс, тағы аҡһаҡалға килә. Уға ҡарап тороуы ҡыҙғаныс була: йонсоған, хәлһеҙләнгән.**

**- Мин башҡаса булдыра алмайым, хөрмәтле аҡһаҡал. Беҙҙең йорттағы шау-шыу, бысраҡтан барыбыҙ ҙа аҡылдан яҙыу сигендәбеҙ, - ти кеше.**

**- Хәҙер өйөңә ҡайт, малдарыңды кире аҙбарыңа ҡыуалап сығар, - ти аҡһаҡал.**

**Теге кеше йортона йүгереп ҡайта. Икенсе көндө ул аҡһаҡалға тағы килә һәм: "Тормош шул тиклем матур икән! Малдарҙы сығарғас, барыһы ла яҡшы, таҙа булып ҡалды. Өйөбөҙ ожмахҡа әйләнде..." - ти ул шатлыҡтан балҡып. Бына шулай, һығымтаһын үҙегеҙ яһағыҙ, хөрмәтле уҡыусылар".**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туктамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

***91.* *Ибраһим Абдуллин "Хуш, Рим!" романы.*** Ибраһим Абдуллиндың драма әҫәрҙәре генә түгел, проза әҫәрҙәре лә иғтибарға лайыҡ. Уның Бөйөк Ватан һуғышы ваҡиғаларына арналған дүрт романы бар. Мин китап уҡырға яратыусыларға шуларҙың береһен - "Хуш, Рим!" тип аталған романын уҡырға тәҡдим итәм. Әҫәрҙә алыҫ Италия ерҙәрендә фашистарға ҡаршы көрәшкән Өфө яҙыусыһы Алексей Коляскин яҙмышы тураһында һүҙ бара. Партизандарҙың батырлыҡтары, бер кеше яҙмышы аша бөтә ил, донъя халыҡтары яҙмышы сағылыш таба был әҫәрҙә.

***92.* *Әмир Гәрәев "Диңгеҙ бүреһе, йәнә бүтән хикәйәләр" йыйынтығы.*** Китап уҡырға яратҡан һәр кемдең күңеленә хуш килгән жанрҙар, әҫәр темаһы була. Берәүгә романтика менән һуғарылған нәфис әҙәбиәт оҡшаһа, икенсегә беҙ күреп белмәгән серле планеталар тураһында фантастик әҫәрҙәрҙе, йә, киреһенсә, ысынбарлыҡҡа нигеҙләнгән яҙылған тарихи художестволы әҙәбиәтте яҡын күрә. Ә бына Әмир Гәрәевтың әҫәрҙәре диңгеҙ мажараларын, моряктар тормошо, сәйәхәттәр тураһында уҡырға ярткан кешеләр өсөн яҙылған. Был йыйынтығында авторҙың повесы һәм хикәйәләре тупланған.

**"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иңиңдәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған **"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

**Рубриканы Сәриә ҒАРИПОВА алып бара.**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 16 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 280/02